ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

12-18 июль (майай) 2024

№27 (1120)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Туристар килем килтерә**



5

**Ырымбур губернаторҙары...**

һәм башҡорттар



7

**Хәҡиҡәткә аҡылың менән инан!**



8-9

**Әсәнән күргән...**

кейеҙ баҫҡан



12-13

*Ирмен тигән ир ҡулында ир ҡорамалы булыр, бейек ҡәлғәләр ҡорор. Ул машина заманына һылтанып ултырмаҫ - ат туғарып, егә белер.*

*(Аҡһаҡал һүҙе).*

*АФАРИН!*

## ТАРИХЫБЫҘ МЕНӘН ТАНЫШТЫРАБЫҘ!



**Ошо көндәрҙә Шишмә районында Евразия күсмә халыҡтар цивилизацияһы музейының визит үҙәген асыу тантанаһы уҙҙы. Унда Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров, саҡырылған ҡунаҡтар ҡатнашты.**

600 квадрат метрҙан ашыу майҙанлы был бина - Алтын Урҙа осорона ҡараған тарихи ҡомартҡылар, йәғни Турахан һәм Хөсәйенбәк кәшәнәләре янында формалашҡан туристик кластерҙың беренсе объекты. Бындағы төп объект яҡынса 20 мең квадрат метр майҙанлы Евразия күсмә халыҡтар цивилизацияһы музейы буласаҡ. Уның эргәһендә Башҡорт аты һәм һунарсы ҡоштар үҙәге, шулай уҡ СПА-шифахана асырға ниәтләйҙәр.

Башҡортостан Башлығы республика халҡын Визит үҙәге асылыу айҡанлы ҡотланы һәм музей комплексын булдырыуҙың мөһимлеген һыҙыҡ өҫтөнә алды.

- Бөгөн беҙ республика өсөн әһәмиәтле яңы объект - Евразия күсмә халыҡтар цивилизацияһы музейының Визит үҙәген асабыҙ. Был ҙур ғилми проекттың башы. Боронғо заманда ата-бабаларыбыҙ күсмә тормош алып барған һәм Евразия биләмәһендә йәшәгән күсмә ҡәбиләләрҙең ҙур берләшмәһенә ингән. Урта быуаттарға ҡараған Турахан, Хөсәйенбәк кәшәнәләре боронғо цивилизация үҙәктәренең береһе булған. Бында Волга буйы Болғарынан Урта Азияға һәм Себергә сауҙа юлдары үткән. Сикһеҙ киңлектәр буйлап күсеп йөрөп, күсмә халыҡтар ҡәбиләләрҙе, ерҙәрҙе берләштереү һәм башҡорт этносын формалаштырыуҙа ҙур тарихи роль уйнаған. Рус Православие Сиркәүенең Нәшриәт советы рәйесе, Калуга һәм Боровск митрополиты Климентҡа славян яҙмаһының иң боронғо ҡомартҡыларының береһе булған Остромир Евангелиеһы күсермәһен тапшырғаны өсөн айырым рәхмәт белдерәм. Китап музейҙың тәүге экспонаттарының береһе буласаҡ. Бынан тыш, былтыр республикаға Ғосман Ҡөрьәненең күсермәһе тапшырылғайны. Был Ташкентта Ҡөрьән музейында һаҡланған китаптың берҙән-бер алтын күсермәһе. Ғосман Ҡөрьәне - VII быуатҡа ҡараған изге Ҡөрьәндең иң боронғо алты күсермәһенең береһе. Ә буласаҡ Евразия күсмә халыҡтар цивилизацияһы музейы галереяһы өсөн бер нисә художестволы картина әҙерләнә. Тап бында туристарҙы, республика ҡунаҡтарын үҙенә саҡырып торорлоҡ урын булдырырға теләйбеҙ. Традицияларыбыҙҙы һәм мәҙәниәтебеҙҙе тулыһынса сағылдырырға тырышасаҡбыҙ, - тине Радий Хәбиров.

(Дауамы 2-се биттә).

*...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ*



## ҠӘҘЕРЕН ГЕНӘ БЕЛӘЙЕК!

**Беҙҙең республика матур тәбиғәтле, күркәм кешеләр йәшәгән, иҡтисади йәһәттән тотороҡло төбәк. Мине иң һөйөндөргәне - республикала ауыл хужалығының юҡҡа сыҡмауы. Күпме төбәктәр СССР тарҡалғандан һуң заманаға яраҡлаша алманы, ауыл хужалығы бөтөнләй тиерлек юҡҡа сыҡты, завод һәм фабрикалар ябылды. Был йәһәттән беҙҙең төбәк үҙенең тотороҡлоғон һаҡлап ҡала алды.**

(Дауамы 2-се биттә).

*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

## ТАУЫШҺЫҘ ТӨН



**БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттары "Граждандарҙың ялын һәм тынлыҡ тәьмин итеү хаҡындағы Башҡортостан Республикаһы Законының 5-се статьяһына үҙгәрештәр индереү тураһында" законды ҡабул итте.**

Төбәк парламентының матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, закон тарафынан спорт һәм башҡа уйындар үткәреү менән бәйле граждандарҙың төнгө ялын боҙоуҙарҙың ҡайһы бер положениелары аныҡланды. "Ғәмәлдәге закон нигеҙҙәренә ярашлы, торлаҡ зоналарында төнгө уйындар үткәреп, шау-шыу тыуҙырыу тыйыла. Төндә һыҙғырырға, ҡыҫҡырырға, тауыш көсәйтеү ҡорамалын файҙаланырға ярамай. Ләкин элек закон тарафынан торлаҡ биләмәләрендә шау-шыулы уйындар үткәреүҙе тыйыу ҡаралмағайны, ә бит ысынында уйында ҡатнашыусылар тынлыҡты һәм кешеләрҙең ялын боҙа. Яңы закон быны иҫәпкә алып, төнгө уйындар үткәреүҙе тыйҙы", - тип һөйләне Дәүләт Йыйылышы рәйесе Константин Толкачев. Дәүләт власы йәки урындағы үҙидара органдары ҡарары йәки рөхсәте менән ойошторолоусы күмәк сараларға тыйыу ҡағылмай. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ: "Граждандарҙың төнгө ялын һәм тынлыҡ тәьмин итеү тураһында" законға ярашлы, төнгө ваҡыт тип ябай көндәрҙә 23-тән иртәнге 7 сәғәткә, ял һәм байрам көндәрендә 23-тән иртәнге сәғәт 9-ға тиклем ара һанала.

**Әлфиә ӘҺЛИУЛЛИНА.**

12+

@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

✓ *Лилиә Ғүмәрова музей комплексы объекттарының әһәмиәтен юғары баһаланы һәм был юлы Радий Хәбировҡа "Башҡорт шәле" географик атамаһының дәүләт теркәүе үтеүе тураһында таныҡлыҡ тапшырҙы.*



...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ



# ҠӘҘЕРЕН ГЕНӘ БЕЛӘЙЕК!

(Башы 1-се һанда).

Әлеге мәлдә лә Башҡортостандың агросәнәғәт комплексы әүҙем эшләй, фермерҙар һаны арта. Республиканың ауыл хужалығы министры Илшат Фәзрахманов белдереүенсә, республикала 8 мендән ашыу фермер теркәлгән. Былтыр улар иген һәм ҡуҙаҡлы иген культураларының дөйөм уңышының 36 процентын, һөттөң - 11, шәкәр сөгөлдөрөнөң 22 процентын етештергән.

Фермерҙарҙың уңышлы эшмәкәрлегенә республикала ҡаралған төрлө грант программалары ла ярҙам итә. Мәҫәлән, быйыл минең таныш фермер "Ғаилә фермаһы" программаһында ҡатнашып, еңеүгә өлгәште. Уға һәм тағы бер еңеүсегә бүленгән грант күләме 40,6 миллион һум тәшкил итте. Был, әлбиттә, фермерҙарға ҙур ярҙам. Республика етәкселегенең ошо өлкәләге төрлө ярҙамы ауыл хужалығы эшсәндәренә дәрт өҫтәй, аяҡтарында ныҡлы баҫып торорға булышлыҡ итә.

Башҡортостанда бер нисә йыл "Башҡортостан оҙон ғүмерлелеге" программаһы уңышлы эшләп килә. Оло быуын кешеләре өсөн республика буйлап бик ҡыҙыҡлы һәм мауыҡтырғыс сәйәхәттәр ойоштороусыларға "Афарин!" тиергә генә була. Төрлө тәбиғәт ҡомартҡылары, Өфө һәм төбәктең башҡа ҡалалары буйлап сәйәхәт, музейҙар буйлап йөрөү һәр кемдең күңелендә яҡты эҙ ҡалдыра. Әле күптән түгел ошо программа буйынса ғаилә дуҫтарыбыҙ Беларусь республикаһын барып күреп ҡайтты. Әйткәндәй, Беларусь республикаһына беҙҙән 1,6 мең хеҙмәт ветераны барған икән. Үҙ тиҫтерҙәре менән аралашып, яңы дуҫтар табып, сит ерҙәрҙе күреп ҡайтыу донъяны йәмләп ебәрә. Ә оло кешегә күп кәрәкмәй - бары тик уға ҡарата булған иғтибар һәм ихтирам.

Республикала тормошҡа ашырылған тағы ла бер шәп программа - "Һаулыҡ поездары"ның районлар буйлап йөрөүе. Ауыл халҡына баш ҡалаға түгел, район үҙәгенә барып тикшерелеү ҙә ҙур ҡыйынлыҡтар тыуҙыра. Унан һуң, йәшерер урыны юҡ, үҙ һаулығыбыҙға ҡул һелтәп ҡарайбыҙ күп осраҡта һәм һаулыҡты тикшереү өсөн махсус дауаханаға барып йөрөмәйбеҙ. Ә бында табиптар үҙҙәре үк ауылға килә, ни күңел менән бармайынса ҡалырға мөмкин!

Ғөмүмән алғанда, республикала халыҡты ҡайғыртҡан, уның мәнфәғәтен уйлаған төрлө программалар бихисап. Балаларға ла, йәштәргә лә тәғәйенләнгәндәре бар, төрлө белгестәр ҙә ярҙам ала һәм башҡалар. Шуға күрә Башҡортостаныбыҙҙа йәшәүе унайлы. Ҡәҙерен генә беләйек!

**Тәғзимә ӘСФӘНДИЙӘРОВА.**
**Стәрлетамаҡ районы**

АФАРИН!

# ТАРИХЫБЫҘ МЕНӘН ТАНЫШТЫРАБЫҘ!



(Башы 1-се биттә).

Визит-үҙәкте асыу тантанаһында абруйлы ҡунаҡтар ҙа сығыш яһаны. Улар араһында федераль һәм төбәк власть органдары вәкилдәре, Рәсәй һәм сит ил ғалимдары һәм тикшеренеүселәре, конфессияларҙың рухи лидерҙары, шулай уҡ йәмәғәт эшмәкәрҙәре бар ине. Федерация Советының Фән, мәғариф һәм мәҙәниәт буйынса комитеты рәйесе Лилиә Ғүмәрова музей комплексы объекттарының әһәмиәтен юғары баһаланы. Ул Башҡортостандың уҙған йылда Роспатент тарафынан "Башҡорт аты" атамаһына хоҡуҡ алыуы тураһында иҫкә төшөрҙө һәм был юлы Радий Хәбировҡа "Башҡорт шәле" географик атамаһының дәүләт теркәүе үтеүе тураһында таныҡлыҡ тапшырҙы.

Рәсәй Хөкүмәте рәйесе Дмитрий Чернышенко урынбаҫары Антоний Швиндт билдәләүенсә, Евразия күсмә халыҡтар цивилизацияһы музейы проекты "Архитектура мираҫы" Бөтә Рәсәй конкурсы еңеүселәре иҫәбенә инде. "Ҡунаҡсыл башҡорт ерендә, Көнсығыш менән Көнбайыш тоташҡан урында ҙур музей комплексы барлыҡҡа килә. Ул ватандаштарыбыҙҙың хәҙерге быуынын ата-бабаларыбыҙ мәҙәниәте менән таныштырыуға, шулай уҡ яңы фәнни проекттарҙы тормошҡа ашырыуға булышлыҡ итәсәк" , - тине Антоний Швиндт.

Тантанала Татарстан Республикаһының Фәндәр академияһы президенты Рифҡәт Миңлеханов, Үзбәкстан тарихы дәүләт музейы директоры Жанат Исмаилова, Монголия фәндәр академияһының Сыңғыҙхан Милли музейы директоры Чулуун Сампилдондов, Ҡырғыҙ Республикаһы Милли тарихи музейы директоры урынбаҫары Замира Бегалиева, Әзербайжандың Гобустан милли тарихи-художество музейы директоры Вугар Урфат оғлы Исаев, Ҡаҙағстандан рәссам-реставратор Ҡырым Алтынбәков сәләмләү һүҙе менән сығыш яһаны. Улар Башҡортостан халҡын яңы объект асылыу айҡанлы ҡотланы һәм Евразия халыҡтарының тарихи мираҫының уртаҡлығын билдәләне. Яңы музей комплексын булдырыу Урта Азия дәүләттәренең фәнни һәм мәҙәни йәһәттән тәжрибә уртаҡлашыуына, шулай уҡ күсмә халыҡтарҙың йолаларын һәм традицияларын һаҡлауға яңы көс бирәсәк. Сит ил вәкилдәре Евразия күсмә халыҡтар цивилизацияһы музейына үҙ халыҡтарының традицион эйәрҙәрен тапшырҙы.

Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров һәм абруйлы ҡунаҡтар шулай уҡ яңы объектты ҡараны һәм уның мөмкинлектәре менән таныштты. Бинала буласаҡ Евразия күсмә халыҡтар цивилизацияһы музейының мини-экспозицияһы, лекциялар һәм презентациялар үткәреү өсөн амфитеатр, шулай уҡ кафе һәм сувенир тауарҙары магазины урынлашҡан. Объекттың ҡыйығында күҙәтеү майҙансығы йыһазландырылған, был урындан Турахан кәшәнәһенә һәм уға илтеүсе 600 метрҙан ашыу оҙонлоҡтағы һуҡмаҡҡа күренеш асыла. Визит үҙәге бинаһы янында автомобилдәр ҡуйыу урыны һәм мәҙәни-күмәк саралар өсөн асыҡ зона булдырылған.

Кәшәнә эргәһендә Нияз Мәжитов исемендәге Башҡорт археологик экспедицияһы ҡаҙыу эштәрен дауам итә. РФА Өфө федераль тикшеренеү үҙәгенең Этнологик тикшеренеүҙәр институты директоры вазифаһын башҡарыусы Илшат Бахшиев һөйләүенсә, уның эш һөҙөмтәләре мавзолей төҙөлөшөндә ҡулланылған мәғлүмәттәрҙе аныҡларға ярҙам итә. Башҡортостандың күсемһеҙ мәҙәни мираҫ объекттарын һаҡлау һәм файҙаланыу буйынса ғилми-етештереү үҙәге директоры Данир Ғәйнуллин аңлатыуынса, мавзолейға инеү урынында уны эске яҡтан һаҡлау өсөн быяла ҡуйыу планлаштырыла. Республика Башлығы кәшәнәне лә ҡарап, ғалимдарҙың бурысы - мавзолейҙы бөгөн нисек бар, шулай һаҡлап ҡалыу, тип билдәләне. "Был республика һәм бөтә ил өсөн



бик мөһим проект. Музей комплексы етди фәнни эҙләнеүҙәргә нигеҙләнеп булдырыла, һәм ул даими үҫешәсәк. Яңы майҙансыҡ шулай уҡ үҙ тарихына һәм мәҙәниәтенә хөрмәт нигеҙендә төрлө илдәрҙең халыҡтарын берләштерә. Һәм, әлбиттә, бында ҙур туристик үҙәк формалаша", - тине Радий Фәрит улы.

**Әйткәндәй, сара барышында Евразия күсмә халыҡтар цивилизацияһы музейы проекты тураһында "Самрау" мәҙәни мираҫты һаҡлау фонды белгестәре тарафынан төшөрөлгән "Көс урыны. Турахан визит үҙәге" документаль фильмы ла күрһәтелде. Башҡортостан Башлығы гранттары фонды ярҙамында төшөрөлгән фильмды шулай уҡ 11 июлдә БСТ телеканалында киске сәғәт 8-ҙә ҡарарға мөмкин ине.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә республикала социаль учреждениеларҙы газ менән йылытыуға күсереү эшен әүҙемләштерергә, шулай уҡ ошо маҡсатҡа финанслауҙы күҙ уңында тоторға ҡушты. Был эш "Газпром" менән берлектә алып барыла, газ үтмәгән объекттар күп түгел, уларҙың күбеһе Мәғариф һәм Мәҙәниәт министрлыҡтары ҡарамағында, тип билдәләне Радий Хәбиров.

✓Был аҙнала Башҡортостанда табиптарҙың мобиль бригадалары Кушнаренко, Стәрлетамаҡ, Мәсетле, Бәләбәй һәм Бөрйән районларына, шулай уҡ Нефтекама һәм Ағиҙел ҡалаларында хеҙмәтләндерә. Һаулыҡ һаҡлау министры Айрат Рәхмәтуллин һүҙҙәренсә, 15 апрелдән 5 июлгә хәтлем табиптар 169 торак пунктта 93 мендән ашыу пациентты ҡараған һәм 22 мендән ашыу рентген тикшереүе үткәргән. Һөҙөмтәлә 2112 сир асыҡланған, күбеһенсә йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙары, диабет һәм яман шеш. Бөтә пациенттар ҙа ентекле тикшереү үтергә ебәрелгән.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров "Брикс илдәренең спорт уйындары" Халыҡ-ара мультиспорт сараһы еңеүселәре һәм призерҙары менән осрашты (БРИКС уйындары). Спортсылар менән осрашыу 12 - 23 июндә Ҡаҙанда үткән ярыш йомғаҡтарына, шулай уҡ республикала спортты артабан үҫтереү пландарына арналды. Башҡортостан спортсылары БРИКС уйындарында 20 миҙал яуланы - 12 алтын, ете көмөш һәм бер бронза. Илдең йыйылма командаһына Башҡортостандан һигеҙ дисциплина буйынса 18 вәкил инде.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Өфө хосписында булды һәм хеҙмәткәрҙәрҙе учреждение асылыуҙың бер йыллығы менән ҡотланы. Төбәк етәксеһе билдәләүенсә, хосписта бер йылда 849 өлкән тәрбиәләнеүсе һәм 233 бала тейешле ярҙам алған. Хеҙмәткәрҙәр бригадалары шулай уҡ 3 600-гә яҡын кешене өйҙәрендә хеҙмәтләндергән. "Хоспис бөгөн - республикала паллиатив ярҙам структураһындағы бик етди, яйға һалынған механизм. Бында 120-нән ашыу кеше, шулай уҡ Башҡорт дәүләт медицина университеты, Өфө медицина колледжы һәм республика Һаулыҡ һаҡлау министрлығының Квалификация күтәреү үҙәге кафедралары өсөн клиник базалар эшләй.

✓ *Дәүләт пошлинаһын һигеҙ тапҡырға арттырып, тыуым күрһәткесен һигеҙ тапҡырға күтәреү мөмкин түгел. Киреһенсә, был "кәртә" ҡуйыу тыуымдың кәмеүенә генә килтерәсәк.*



БЫНАҒАЙЫШ!

**Рәсәй Президенты Владимир Путин сығышы һайын тиерлек ғаилә ҡиммәттәрен социаль сәйәсәт өлкәһендәге иң мөһим мәсьәләләрҙең береһе тип атай һәм беренсе урынға ҡуя. Һәм был юҡтан ғына түгел. Ғаиләләрҙең тарҡалыуы бөгөн ҡот осҡос хәлгә килеп терәлде. Федераль статистика хеҙмәтенең ошо бер генә мәғлүмәтен алып ҡарайыҡ: быйылғы йыл башынан апрелгә тиклемге арала ғынала 210 215 никах теркәлгән булһа, айырылышыуҙар һаны 3 меңгә артып киткән һәм 213 332 ғаилә юҡҡа сыҡҡан.**

# БАЛАЛЫ ӨЙРӘК...

## ҠҮЛДӘН КИТМӘҪ



Күптән түгел генә әле теркәлгән никахтар һаны менән айырылышыуҙар һаны бермә-бер тиңләшә башлағайны. Күренеүенсә, хәҙер инде ошо нисбәттең "емерелеү" тигән күңелһеҙ, ә бәлки, хәүефле яғы "иркенлеккә" сығып, күҙ эйәрмәҫ тиҙлек алды. Эйе, бындай хәл бер бөгөн генә башланманы, һуңғы сирек быуат буйына бысҡыны, ләкин яҙмыштарҙы көйҙөргөс ялҡынға әйләнмәҫ элек дәүләт кимәлендә ҡоро хәбәр һөйләүҙән башҡа бер эш тә башҡарылманы.

Айырылышыуҙарҙың сәбәптәренә туҡталып тормайынса (сөнки ул үҙе генә лә күп томлыҡ тема), Рәсәй Финанс министрлығының ошо "янғын" афәтен үҙ мәнфәғәтенә бороп, аҡса эшләргә ниәтләнеүен алып ҡарайыҡ, булмаһа. Әгәр финансистарҙың планы бойомға ашырыла ҡалһа, айырылышыуҙар ҡиммәткә төшәсәк: никахты тарҡатыу өсөн дәүләт пошлинаһы хаҡын ... һигеҙ тапҡырға арттырыу тәҡдим ителә! Йәғни 650 һумдан 5 меңгә тиклем. Бындай һандар, әлбиттә, бюджетты нисек тулыландырырға белмәй, ҡайҙан кемде йолҡҡоларға тип баш ватҡан финансистарға әлеге 213 мең айырылышыу ғына ла миллиардтан ашыу "файҙа" килтерәсәк бит! Былай тип әйтергә тел дә әйләнмәй, әлбиттә, ләкин парадокстар заманында йәшәйбеҙ бит, аптырарға түгел. Әлеге Министрлыҡ иҡтисадсылары ла, бәлки, "бер ҡатлылыҡтары" менән госпошлинаға хаҡ арттырыуҙың айырылышыуҙарға тотҡарлыҡ яһау ихтималлығын күҙҙә тоталыр, тик был ниәттең барыбер үҙен аҡламаҫы көн кеүек асыҡ. Социаль селтәрҙәрҙә һәм киң матбуғат сараларында барған бәхәстәр ҙә шул турала һөйләй.

Мәҫәлән, демограф Алексей Ракша "Московский комсомолец" гәзитенә биргән интервьюла раҫлауынса, был сараның ғаиләләрҙе һаҡлауҙа һәм тыуымды арттырыуҙа файҙаһы булмаясаҡ. "Дәүләт пошлинаһын һигеҙ тапҡырға арттырып, тыуым күрһәткесен һигеҙ тапҡырға күтәреү мөмкин түгел. Киреһенсә, бындай "кәртә" ҡуйыу тыуымдың кәмеүенә генә килтерәсәк," - ти ул. Ысынлап та, ғаилә башлыҡтары айырылышырға ҡарар иткән икән, тимәк, уларҙың ярашып, килешеп китеү осраҡтары һирәк, сөнки статистик мәғлүмәттәр ысынбарлыҡтан алынған бит. Икенсе яҡтан, айырылышыуҙың ҡиммәткә төшөүе (был осраҡта мораль йәһәттән генә түгел) кемдәрҙелер никахһыҙ ғына йәшәргә этәрмәҫ тип кем әйтә ала? Бөгөн бындай гражданлыҡ никахтары былай ҙа киң таралған.

Демограф фекеренсә, илдә тыуымды арттырыуҙа һәм шул уҡ ваҡытта ғаиләләрҙе һаҡлауҙа ла ғаиләләргә финанс ярҙамы ғына булышлыҡ итә ала. Мәҫәлән, шундай иҫәп тә бар: ғаиләләге һәр икенсе һәм өсөнсө тыуған балаға 1,5-2 млн түләгән хәлдә илдәге халыҡ һаны 15 процентҡа артасаҡ. Рәсәй ошо йүнәлештә тәжрибә туплай. Бөгөн икенсе балаға Әсәлек капиталы түләү һәм өсөнсөһө тыуғандан һуң ипотеканы ҡапларға 450 мең һум субсидия биреү сараһы ғына ла өс йыл эсендә 100 мең сабыйҙың донъяға килеүенә булышлыҡ иткән. Ошо юл менән барғанда, ти демограф, Рәсәй Европа илдәре араһында алдынғы урынға сығасаҡ.

Шулай була күрһен, тип теләйек, сөнки ғаиләлә атай менән әсәй мөнәсәбәттәрен бәйләп тороусы тап ана шул балалар ҙа инде. Күп балалы ғаиләләрҙә атай менән әсәй уртаҡ хәстәр һәм маҡсаттар менән берегеп йәшәй, уларға бер-береһенән "кер" эҙләү, тормоштарында иң ҡәҙерле булған сабыйҙарын илатып, айырылышыу хаҡында уйлау, ғаиләне ташлап китеү баштарына ла килмәйәсәк. "Балалы өйрәк күлдән китмәҫ", тигән бит халҡыбыҙ ҙа.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ

# ТАШЛАМА БУЛМАЯСАҠ



**3-4 июлдә Ҡаҙағстандың Астана ҡалаһында булып үткән ШОС (Шанхай хеҙмәттәшлек ойошмаһы) саммиты үткән аҙнаның мөһим һәм ҙур ваҡиғаһы булды.**

Бөгөн ойошмала һигеҙ тулы хоҡуҡлы ил: Ҡытай, Рәсәй, Һиндостан, Ҡаҙағстан,Ҡырғыҙстан, Пакистан, Тажикстан, Үзбәкстан ағза булып тора. Шулай итеп, уның эшендә күҙәтеүсе ил һәм партнерҙар менән бергә 24 ил ҡатнаша. Өҫтәүенә, был юлы ШОС үҙ составына тағы бер тулы хоҡуҡлы ил - Белоруссияны бер тауыштан һәм беренсе көн тәртибендә үк ҡабул итте һәм быны менән ШОС-тың Европа континентына сығыуы билдәләнде. Ойошманың төп тәғәйенләнеше - хәүефһеҙлекте тәьмин итеү. Бөгөн ШОС үҙенә донъя иғтибарын тартып тора һәм бөтөн Евразия күләмендә төп көс статусына дәғүә итә. "ШОС - кешелектең күпселек яртыһы ул. Был ойошмала диктатҡа урын юҡ, уның нигеҙендә үҙ-ара ихтирам һәм һәр ҡатнашсы ил мәнфәғәтен иҫәпкә алыу. Бөгөн ул БРИКС һәм Евразия союзы менән берлектә ғәҙел һәм күп полярлы донъяның ышаныслы ойошоу үҙәге булып тора", - тип билдәләнде саммитта. Уның эшендә БМО-ның Генераль секретары Антониу Гуттериш, Төркиә президенты Реджеп Эрдоган, Катар әмире бен Хамад һәм башҡалар, шулай уҡ почетлы ҡунаҡ булараҡ, Әзербайжан президенты Илһам Алиев ҡатнашты. Шанхай ойошмаһы эше аҙағында саммитта ҡатнашыусы Рәсәй Президенты Владимир Путин журналистар менән осрашты, уларҙың көнүҙәк һорауҙарына яуап бирҙе һәм бер нисә мөһим белдереү менән сығыш яһаны. Төп тема, әлбиттә, Украина конфликты булды һәм утты туҡтатыу мәсьәләһендә Президент, һөйләшеп-килешеүҙең мөмкин булыуы, ләкин бер яҡлы ғына ташлама яһауға бармаясағын белдерҙе.

• НАТО ла, Зеленский ҙа Трамптан шөрләй башлағандар, ти, сөнки уның власть башына килеүе һуғыш суҡмарҙары файҙаһына булмаясаҡ. АҠШ президенты Байден менән дебат мәлендә лә һәм, ғөмүмән, башҡа ваҡытта ла Трамп Украина конфликтын тәүлек эсендә туҡтатасағы хаҡында белдерә. Был айҡанлы Кремлдә билдәләүҙәренсә, Аҡ йорттоң элекке хужаһы туҡтауһыҙ ошо хаҡта ҡабатлаһа ла, уның нисек итеп быны ғәмәлгә ашырасағы берәүгә лә мәғлүм түгел. Шул уҡ ваҡытта Джо Байдендың Трамп менән дебаттағы еңелеүе демократтарҙы президент һайлауҙарына әҙерлек барышында вице-президент Камала Харрис кандидатураһын "көсәйтеүгә" мәжбүр итеүе ихтимал.

• НАТО-ның 32 ил вәкилдәре Марк Рюттены альянстың яңы генераль секретары итеп һайланы. Әлеге генсек Йенс Столтенбергты алыштырып, Марк Рютте октябрҙә үҙ бурыстарын башҡарыуға тотонасаҡ.

• Әйткәндәй, Евроберләшмә илдәре лә союздың яңы етәкселәрен һайланы. Еврокомиссия рәйесе булып "утта ла, һыуҙа ла батмай" торған ныҡыш ханым, һөнәре буйынса гинеколог Урсула фон дер Ляйен икенсе срокка ҡалды. Рәсәйгә ҡарата агрессив мөнәсәбәте менән билдәле Эстония премьеры, "һуғыш принцессаһы" ҡушаматы йөрөтөүсе Кая Каллас Жозеп Боррель урынына ЕС дипломатияһын етәкләйәсәк. Евросовет башлығы итеп, сират буйынса Венгрияның лидеры Виктор Орбан һайланырға тейеш булһа, Евросәйәсәтенә тап килмәгән ҡараштары һәм Урсулаға ҡаршы тауыш биргәне өсөн уның урынына Португалияның Рәсәйгә агрессив ҡарашлы экс-премьеры Антониу Коштаның кандидатураһын үткәрергә тырыштылар, ләкин ЕС лидерҙары ҡорған хәйлә барып сыҡманы. Ошо йылдың 1 июленән Венгрия башлығы Орбан ЕС Советы рәйесе бурыстарын башҡара башланы.

• НАТО-ның Украинаға ҡарата сәйәсәте - Рәсәйҙең тарихи биләмәләрен баҫып алыу булып тора, тип белдерҙе РФ Президентының Ҡырым Республикаһы буйынса даими вәкиле - Ҡырым хөкүмәтенең вице-премьеры Георгий Мурадов.

• The New York Times гәзите хәбәр итеүенсә, АҠШ хөкүмәте әлегә Рәсәйгә ҡаршы яңы санкциялар индермәҫкә ҡарар итте, сөнки был нефть һәм бензинға хаҡтарҙы арттырасаҡ. Ә ҡара алтын менән бензинға хаҡ күтәрелеү Джо Байдендың һайлау алды кампанияһында халыҡта ризаһыҙлыҡ тыуҙырыуы бар.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Уҙған ике аҙнала Башҡортостандың 8 муниципалитетында һыу объекттарында 9 кешенең ғүмере өҙөлгән, уларҙың барыһы ла рөхсәт ителмәгән урындарҙа һыу ингән. Был хаҡта Ғәҙәттән тыш хәлдәр буйынса дәүләт комитеты рәйесе Кирилл Первов хәбәр итте. "Муниципаль берәмектәрҙең контролдә тотолған территорияларында 700-ҙән ашыу һыу инеү өсөн йыһазландырылмаған урын асыҡланған. Шуға күрә ошондай урындарҙа өҫтәмә иҫкәртеү сараларына айырым иғтибар бүленә. Республиканың 60 муниципалитетында 168 махсус пляж эшләй", - тип хәбәр итте ведомство етәксеһе.

✓2024 йылда янғын хәүефе осоро башланғандан алып 17 гектар майҙанда бөтәһе 8 урман янғыны сығанағы асыҡланған, былтыр был һан 98-гә күберәк булған. Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығы хеҙмәткәрҙәре "Урман һаҡсыһы" системаһы ярҙамында биләмәләрҙе тәүлек әйләнәһенә күҙәтә - Башҡортостанда радиусы 35 километрға еткән 12 комплекс ҡуйылған. Бынан тыш, белгестәр махсус самолет, күп маҡсатлы КА-32 вертолеты ярҙамында авиация патруле алып бара, министрлыҡтың пилотһыҙ осоу аппараттары ҡулланыла. Хәлде шулай уҡ йыһан мониторингы аша ла күҙәтәләр.

✓Рәсәйҙең Хеҙмәт министрлығы белдереүенсә, байрам көндәрен күсереүгә бәйле 2025 йылдың 31 декабре ял көнө була, тип хәбәр итә РИА Новости агентлығы ведомство башлығы Антон Котяковҡа һылтанма менән. "Быйыл 31 декабрь - ял көнө. Киләһе йылда ла, беҙҙең проектлауҙар буйынса, 31 декабрь ял көнө булып тора. Артабан ҡарарбыҙ", - тип белдерҙе Котяков. Хөкүмәт быйылғы ял көндәрен уҙған йылдың авгусында раҫланы. 6 һәм 7 ғинуарҙағы байрамдар шәмбе һәм йәкшәмбе көндәренә тура килгәс, уларҙы 10 майға һәм 31 декабргә күсерҙеләр. Шунан сығып, быйыл да яңы йыл алды көнө ял була.

✓Евразия ғилми-белем биреү үҙәгенең Вуз-ара студенттар кампусында Радий Хәбиров икенсе Республика йәштәр ҡануниәт форумында ҡатнашыусылар менән осрашты. Башҡортостан Башлығынан республикала эшҡыуарлыҡҡа һәм бизнесҡа ниндәй ярҙам саралары күрһәтелеүе хаҡында һоранылар. "Эшҡыуарлыҡтың үҫеш динамикаһы тураһында бер нисә күрһәткес буйынса фекер йөрөтөргә мөмкин. Үҙмәшғүлдәрҙең, бәләкәй һәм урта бизнес субъекттарының үҫеше, хеҙмәткәрҙәр һаны һәм финанс күрһәткестәре. Ошо йүнәлештәр буйынса Башҡортостанда ыңғай тенденция күҙәтелә", - тине Радий Хәбиров.

✓ *Верхотор ауылында ла XVIII быуатта нигеҙ һалынған баҡыр иретеү заводы һаҡланған. Унда XIX быуаттың икенсе яртыһында төҙөлгән бик матур ҡорам һәм күпер бар. Әлеге ваҡытта биләмәне төҙөкләндереү эштәре әүҙем бара.*



ҠЫҪҠАСА

# ӘСӘЛЕК КАПИТАЛЫН...

**Әсәлек капиталы аҡсаһын шәхси торлаҡ төҙөләшөнә йүнәлтеү мөмкинлеген кңә уңында тотҡан закон проекты Дәүләт Думаһында икенсе уҡыуҙы үтте. Федераль киң мәғлүмәт саралары яҙыуынса, балаға дәүләт ярҙамын файҙаланыуҙың төп шарты - эскроу иҫәбе аша, сонки төҙөүселәргә аҡса объ-ектты тапшырғандан һуң ғына күсергә тейеш.** Әсәлек капиталы һәм эскроу иҫәбе ипотекала һәм күп фатирлы йорттар төҙөләшөндә киң ҡулланыла. Закон проектына ярашлы, түбәндәге шарттарҙы үтәргә кәрәк: подрядсының Торлаҡ төҙөләшө берҙәм мәғлүмәт системаһында аккаунты һәм банк аккредитацияһы булырға, үҙебеҙҙә етештерелгән йорт комплекттарын йәки типовой проекттарҙы файҙаланырға тейеш. Шәхси торлаҡ төҙөләшөндә эскроу иҫәптәре өләшләтә ҡатнашыу килешеүендәге кеүек ҡағыҙәләр буйынса страховкалана - яҡынса 10 миллион һумды ҡайтарырға мөмкин.

✓ **Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров "Йәмәғәт киңлектәре сәғәте" форматында тематик кәңәшмә үткәрҙе. Унда республиканың торлаҡ пункттарын төҙөкләндереү проекттары ҡаралды.** Торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министры Ирина Голованова Өфөнөң Башҡортостан урмансылары һәм Ленин исемендәге парктарын яңыртыу буйынса эштәр башҡарылыуы, шулай уҡ республика муниципалитеттарында "Башҡортостан ихаталары" программаһын тормошҡа ашырыу хаҡында һөйләне. Министр шулай уҡ бәләкәй ҡалаларҙа һәм тарихи ауылдарҙа уңайлы ҡала мөхитен булдырыу буйынса Бөтә Рәсәй конкурсында еңеүсе проекттарға ла туҡталды. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ: "Башҡортостан ихаталары" республика программаһы сиктәрендә 2024 йылда 33 муниципалитетта 143 ихата биләмәне төҙөкләндерелә. Бынан тыш, "Торлаҡ һәм ҡала мөхите" милли проектының "Уңайлы ҡала мөхитен булдырыу" федераль программаһы буйынса Башҡортостанда 123 йәмәғәт биләмәһе тәртипкә килтерелә. Бәләкәй ҡалаларҙа һәм тарихи ауылдарҙа уңайлы ҡала мөхитен булдырыу буйынса Бөтә Рәсәй конкурсында быйыл Башҡортостандың ете ҡалаһы ҡатнаша.

✓ **Башҡортостанда күп балалы ғаиләләргә балаларын республика колледждарында һәм техникумдарында уҡытыу хаҡының яртыһы компенсациялана.** Компенсация күләме йылына 30 мең һумдан ашмай. Аҡса уҡыу йылы тамамланғандан һуң түләнә, тип хәбәр итә Башҡортостан Хеҙмәт министрлығының матбуғат хеҙмәте. Был льготаға барлыҡ ишле ғаиләләрҙең дә хоҡуғы бар. Компенсация алыу өсөн түбәндәге шарттарҙы үтәргә кәрәк: ғариза биреүсе һәм күп балалы ғаилә ағзалары - Рәсәй граждандары һәм Башҡортостанда йәшәйҙәр; 23 йәшкәсә студенттар; студент беренсе тапҡыр урта һөнәри белем ала. Шул уҡ ваҡытта ос һәм унан да күберәк балиғ булмаған бала тәрбиәләгән ғаилә генә түгел, ә мәктәптә, колледжда һәм юғары уҡыу йорттарында көндөҙгө бүлектә уҡыған балалары булған ғаилә лә ишле тип иҫәпләнә. Компенсация алыу өсөн ғаризаны күп функциялы үҙәк бүлексәләрендә йәки Республика халыҡҡа социаль ярҙам үҙәге филиалдарында бирергә мөмкин.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ҠУНАҠТАРҒА КҮРҺӘТЕР ХАЗИНАБЫҘ



**Евразия ғилми-белем береү үҙәгенең Вуз-ара студенттар кампусында Башҡортостан Башлығы Рус география йәмғиәтенең Төбәктәр советы ултырышында ҡатнашыусылар менән осрашты.**

"Республика Рус география йәмғиәтенең федераль проекттарында әүҙем ҡатнаша һәм ҡатнашыусылар, майҙансыҡтар һаны буйынса лидерҙарҙың береһе булып тора, - тип билдәләне Радий Хәбиров. - Беҙ элекке Советтар Союзы биләмәһендә ЮНЕСКО статусына эйә "Янғантау" геопаркы ойошторолған тәүге төбәк булдыҡ. Геопарк үҫешә, яңы йәлеп итеү урындары барлыҡҡа килә. Ике аҙна элек кенә бында "Салауат ере" тарихи-мемориаль паркын астыҡ. Ошо үҙенсәлекле тарихи паркта милли батырыбыҙ Салауат Юлаевтың тормошона арналған ҡыҙыҡлы объекттар бик күп".

"Торатау" геопаркы ла халыҡ-ара статус алырға ынтыла. Бында ғәйәт ҙур эш башҡарылды: визит-үҙәк асылды, 697 баҫҡыслы экоһуҡмаҡ һалынды. Улар уникаль флораны һәм фаунаны һаҡлап ҡалырға ярҙам итә. Шулай уҡ алты башҡорт тирмәһенән торған этнокомплекс бар. Ултырышта ҡатнашыусылар бөгөн "Торатау" геопаркын барып ҡарарға йыйына.

"Торатау" геопаркы сиктәрендә сәнәғәт мираҫы объекттарын һаҡлау кеүек ҙур эш алып барыла. Был өлкәләге тәүге проекттарҙың береһе - Көньяҡ Уралдағы боронғо баҡыр иретеү заводы биләмәһен реконструкциялау. Ул Мәләүез районының Воскресенск ауылында урынлашҡан. Ишембай районының Верхотор ауылында ла XVIII быуатта нигеҙ һалынған баҡыр иретеү заводы һаҡланған. Унда XIX быуаттың икенсе яртыһында төҙөлгән бик матур ҡорам һәм күпер бар. Әлеге ваҡытта биләмәне төҙөкләндереү эштәре әүҙем бара.

"Республикала "Шүлгәнташ" тарихи-мәҙәни музей комплексы асылды, - тип билдәләне Радий Хәбиров. - Беҙ палеолит дәүеренә ҡараған рәсемдәре менән билдәле мәмерйә янындағы музейҙы бик оҙаҡ төҙөнөк, ата-бабаларыбыҙҙың тарихи һәм мәҙәни мираҫы менән һәр кем таныша алырлыҡ итеп эшләнек".

# ҒАИЛӘЛӘР ЮҒАЛМАҺЫН

**Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы рәйесе Константин Толкачев Петербург халыҡ-ара юридик форумында чайлдфри идеологияһын пропагандалауҙы тыйыу тураһында закон проектын хуплауға бәйле башланған дискуссияла үҙ фекерен әйтте.**

"Ғаилә: һаҡларға, юғалтырға ярамай" сессияһында Рәсәй Федерацияһының юстиция министры урынбаҫары Всеволод Вуколов илдә тейешле закон проектының әҙерләнеүе тураһында иҫкә төшөрҙө. Дәүләт Думаһы рәйесе урынбаҫары Ирина Яровая ла хуплап сығыш яһаны. Ул "Радикаль, экстремистик һәм террористик эшмәкәрлекте пропагандалауға ҡаршы тороуҙа яһалма интеллекттың роле" сессияһы ваҡытында чайлдфриҙы ҡорал менән сағыштырҙы һәм уны тыйырға тәҡдим итте.

"Беҙҙең закон проекты Дәүләт Думаһында ҡарауҙа, уның төп маҡсаты - балиғ булмағандар араһында балаһыҙлыҡ идеологияһын таратыуҙы тыйыу, - тине Константин Толкачев. - Ул эксперттар берләшмәһе, йәмәғәт ойошмалары, Рус православие сиркәүе ҡатнашлығында әҙерләнгән. Рәсәйҙең Юстиция министрлығы һәм Дәүләт Думаһы етәкселеге ярҙамы менән беҙҙең башланғыс тиҙерәк ҡарарлыр һәм яҡын арала депутаттарҙа хуплау табыр, тип ышанабыҙ".

# ҠУРТЫМҒА - АВТОМОБИЛЬ

**Башҡортостанда каршеринг - автомобилдәрҙе ҡыҫҡа ваҡытҡа ҡуртымға алыу сервисы эшләй башланы. Республика йортонда Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров "Делимобиль" компанияһын ойоштороусы Винченцо Трани менән яңы проекттың нескәлектәрен тикшерҙе.**

Республика халҡына яңы хеҙмәт ҡыҙыҡлы булыр, тип билдәләне Башҡортостан Башлығы. Быға тиклем дә Өфөлә каршеринг компаниялары эшләй башлағайны, ләкин коронавирус пандемияһына бәйле был йүнәлеш үҫешә алманы. "Каршеринг - Башҡортостан өсөн сағыштырмаса яңы күренеш. Ул илдең бер нисә ҙур ҡалаһында яҡшы үҫешә, - тине Радий Хәбиров. - Каршеринг - заманса ҡала билдәләренең береһе. Ул юлдар төҙөк, юл хәрәкәте менән идара итеүҙең дөрөҫ системаһы, халыҡтың килеме юғары, машина йөрөтөү мәҙәниәте булған урында барлыҡҡа килә".

"Делимобиль" компанияһын ойоштороусы республиканың автомобилдәрҙе ҡуртымға алыу баҙары мөмкинлеген юғары баһаланы. "Бизнесты үҫтереү йәһәтенән Башҡортостан, Өфө менән бик ҡыҙыҡһынабыҙ, - тине Винченцо Трани. - Беҙ шулай уҡ кешеләр автомобиль менән төрлө иҫтәлекле урындарға йөрөй алһын өсөн эске туризмды үҫтереүгә йүнәлеш алғанбыҙ. Шул уҡ ваҡытта беҙ республика менән үҙ-ара уҙ итеүҙе киңәйтергә уйлайбыҙ".

Беренсе этапта "Делимобиль" Өфөлә 500 автомобилде файҙаланыуға тапшыра. Инвестициялар күләме 800 миллион һумға баһалана, 50-нән ашыу яңы эш урыны булдырыла. Сервис 28 июндә асылды.

# ӘЙ ЙЫЛҒАҺЫНДА...

**Башҡортостандың Лаҡлы ауылында Әй йылғаһы аша күперҙе ремонтлай башланылар. 157 метр оҙонлоғондағы күпер "Хәүефһеҙ һәм сифатлы юлдар" милли проекты сиктәрендә төҙөкләндерелә.**

Эштәр күперҙең уң һыҙатында алып барыла, тип хәбәр итә Башҡортостан Хөкүмәтенең матбуғат хеҙмәте. Күперҙәге эштәрҙе 2025 йылдың аҙағына тиклем тамамлау күҙаллана. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, 2024 йылда "Хәүефһеҙ һәм сифатлы юлдар" милли проекты сиктәрендә Башҡортостанда 8 күперҙе ремонтлайҙар. Уларҙың дөйөм оҙонлоғо - 419 метрҙан ашыуыраҡ. Милли проект сиктәрендә яһалма ҡоролмаларҙы ремонтлау Башҡортостанда 2022 йылдан башҡарыла. Ике йыл эсендә 1282 метрҙан ашыу күпер ремонтланған. Әйтәйек, 2022 йылда дөйөм оҙонлоғо 431,5 метрлыҡ 8 күперҙең торошо яҡшыртылған, 2023 йылда иһә ике тапҡырға күберәк - дөйөм оҙонлоғо 851 метрлыҡ 7 ҡоролма. Эштәр Баймаҡ, Бәләбәй, Белорет, Благовар, Ғафури, Иглин, Ҡырмыҫҡалы, Ҡариҙел, Күгәрсен, Саҡмағош, Шаран районДарында Өсән, Ағиҙел, Әсәм, Камайылға, Өйәҙән, Суходол, Иртәбәк, Йөйәк, Болошло, Һаҡмар, Бедринка, Инйәр, Ташшишмә, Ҡалмаш, Байҡы йылғалары аша күперҙәрҙә башҡарылды.

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓ Өфөлә Башҡортостан Башлығы Стратегик башланғыстар агентлығының генераль директоры Светлана Чупшева өсөн Аксаков исемендәге баҡса буйлап экскурсия үткәрҙе. Ул республикабыҙға бизнес берләшмәһе менән осрашыу һәм Global Management Challenge чемпионатының милли финалында ҡатнашыу өсөн килде. Светлана Чупшева йәмәғәт киңлеген төҙөкләндереү буйынса башҡарылған эштәрҙе юғары баһаланы. Бында барыһы ла Сергей Тимофеевич Аксаковтың ижадына һөйөү менән башҡарылған, тип билдәләне ул.

✓ Өфөлә "Хәүефһеҙ һәм сифатлы юлдар" милли проекты сиктәрендә Шаҡша күперендә ремонт эштәре бара. Тиҙҙән бында йәнә автотранспорт өсөн сикләү индерелә. Ашығыс хеҙмәттәр өсөн Кенәз ауылындағы паром кисеүе эшләй. Автомобилселәргә иһә Көнсығыш сығыу юлы аша урарға кәрәк. Шулай уҡ электричка менән йөрөргә мөмкин, тип хәбәр иттеләр Башҡортостан Транспорт министрлығының матбуғат хеҙмәтендә. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров оператив кәңәшмәлә халыҡты күрелгән саралар тураһында иҫкәртергә кәрәклеген белдерҙе.

✓ Өфөлә "Иң яҡшы күп фатирлы йорт советы" конкурсына йомғаҡ яһалды. Конкурстың маҡсаты - йәшәү кимәлен күтәреү һәм уңайлы шарттар булдырыу. Быйыл унда 54 күп фатирлы йорт советы ҡатнашты. Еңеүселәр өсөн ҡала бюджетынан 928,7 мең һум аҡса ҡаралған. 2024 йылда конкурста Менделеев урамындағы 173/2-се күп фатирлы йорт советы еңеүсе тип танылды. Икенсе урынды Ҡулса урамындағы 59-сы йорт советы яуланы. Өсөнсө урында - Даян Мурзин урамындағы 9/1-се йорт советы.

✓ Өфө аэропортының матбуғат хеҙмәте хәбәр итеүенсә, 3 июлдән Red Wings авиакомпанияһы Башҡортостандың баш ҡалаһынан Алматыға (Ҡаҙағстан) осоштар программаһын киңәйтә. Хәҙер аҙнаһына ике рейс башҡарыла. Шаршамбы һәм йома көндәрендә 100 пассажирға иҫәпләнгән Sukhoi Superjet 100 менән осорға мөмкин. "Өфө" аэропортынан осоштар урындағы ваҡыт буйынса көндөҙгө 1 тула 5 минутҡа билдәләнгән. Ике ҡала араһындағы юлға 2 сәғәт 55 минут ваҡыт кәрәк.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

**2024 йыл Башҡортостанда республика халҡы һәм ҡунаҡтары өсөн әһәмиәтле тарихи-мәҙәни объекттарҙың барлыҡҡа килеүе менән иҫтә ҡаласаҡ. Улар - 16 июндә асылған "Салауат ере" тарихи-мәҙәни комплексы һәм июлдә асылған Евразия күсмә цивилизациялар музейының визит-үҙәге. Былар Бөрйән районындағы "Шүлгәнташ" музей комплексы һымаҡ, бөтә Рәсәйгә генә түгел, ә һуңғы йылдарҙа халыҡ-ара танылыу яулаған күп кенә комплекстарға уңышлы өҫтәмә буласаҡ.**



# ТУРИСТАР КИЛЕМ КИЛТЕРӘ

Бер йыл элек ил Президенты Владимир Путин эске туризмды үҫтереү буйынса кәңәшмә үткәрҙе. Ил башлығы дәүләт һәм бизнестың был өлкәлә бурысын билдәләне: туристик хеҙмәттең сифатын күтәрергә, уңайлылыҡтың иң юғары стандарттарына, хәүефһеҙлеккә һәм төрлө килемле кешеләр (йәштәр, ололар, балалы ғаиләләр) алырлыҡ булыуына ынтылырға. Һәм ысынлап та эксперттар 2023 йылда туристар ағымы үҫешен билдәләй. Атап әйткәндә, былтыр рәсәйҙәр 153 млн сәйәхәт ҡылған, күптәре ил буйлап бер нисә тапҡыр сәйәхәт иткән һәм тукланыуға, күңел асыуға, отелгә 1,8 трлн һум аҡса тотонған. Был Рәсәй бюджетының яҡынса 5 проценты.

Башҡортостанда ла һуңғы йылдарҙа туристик тармаҡты үҫтереү буйынса системалы эш алып барыла. 2019 йылда уҡ республика Башлығы эске туризмды үҫтереүгә арналған кәңәшмәлә Башҡортостанда был өлкә тейешле үҫешмәгәнлегенә иғтибарҙы йүнәлткәйне һәм был йүнәлештә эште йәнләндерергә, гранттар, субсидиялар, льготалар системаһын булдырырға ҡушҡайны. Һуңғы биш йылда туристик тармаҡ үҫеше алға китте, был хаҡта статистика һандары ла һөйләй: 2018 йылда 1,169 млн турист булһа, 2023 йылда - 2,2 млн кеше. Был күрһәткес буйынса беҙҙең республика Волга буйы федераль округында - өсөнсө, Рәсәйҙә ун икенсе урында.

Башҡортостан "Туризм һәм ҡунаҡсыллыҡ индустрияһы" милли проектын уңышлы бойомға ашыра. Был маҡсатта 2023 йылда федераль бюджеттан 1,5 млрд һум йәлеп ителде. Бөгөн Башҡортостан туристар өсөн уларҙың мәнфәғәттәренә ҡарап төрлө мөмкинлек тәҡдим итә. Күп кенә мөһим проекттар Радий Хәбировтың әүҙем ярҙамы менән тормошҡа ашырыла. Башҡортостандың эске туризм инфраструктураһын үҫтергән компаниялары һәм эшҡыуарҙары конкурс нигеҙендә яңы туристик маршруттар әҙерләүгә, кемпингтар булдырыуға, пляждарҙы һәм балалар ялы зоналарын төҙөкләндереүгә, ҡорамалдар һәм инвентарь һатып алыуға, мөмкинлектәре сикләнгән кешеләрҙең ялы өсөн шарттар булдырыуға һәм башҡаларға гранттар алырға мөмкин.

Мәҫәлән, "Башҡортостан оҙон ғүмерлелеге. Туризм" проекты ярҙамында өлкән йәштәге граждандар республика буйлап бушлай сәйәхәт итә, шулай уҡ льготалы шарттарҙа Белоруссияла, Абхазияла һ.б. төбәктәрҙә була ала. Былтыр Белоруссияла "Башҡортостан оҙон ғүмерлелеге" программаһы буйынса Башҡортостандан йәмғеһе 1621 турист булған. Икенсе, ҡыҙыҡлы туристик йүнәлеш - Абхазия. 2023 йылда Башҡортостандан өлкән быуын вәкилдәре Гаграла, Рица күлендә, Яңы Афонда булды, Сталиндың дачаһын һәм был матур ҡунаҡсыл илдең башҡа иҫтәлекле урындарын ҡараны. Быйыл Үзбәкстанға, Ҡаҙағстанға һәм Санкт-Петербургҡа сәфәрҙәр ойоштороу ҡарала.

Республика фәнни туризмды үҫтереүгә әүҙем ҡушыла. Әҙерләнгән маршруттар һәм программалар фән менән мауығыусыларға һәм теләгән һәр кемгә Башҡортостандың фәнни һәм технологик ҡаҙаныштары тураһында белергә, үҙенсәлекле тарихи-мәҙәни мираҫ объекттарын үҙ күҙҙәре менән күрергә мөмкинлек бирәсәк. Рәсәй төбәктәренән һәм сит илдәрҙән ғалимдар һәм туристар "Шүлгәнташ" музей-ҡурсаулығының мөмкинлектәрен баһаланы ла инде. Фәнни донъя Евразия күсмә цивилизациялар музейы асылыуын көтә. Әйткәндәй, күптән түгел был музей проекты "Архитектура мираҫы" бөтә Рәсәй фестивалендә тарихи-мәҙәни туризм өлкәһендә иң яҡшы инновацион проект тип танылды.

Башҡортостан сәнәғәт һәм мәктәп туризмын үҫтерә. Ике йыл эсендә мәктәп туризмы программаһына 50 меңдән ашыу бала йәлеп ителгән. Ғөмүмән, республикала яңы туристик йүнәлештәр эҙләү һәм инфраструктура объекттарын төҙөү бара. "Урал" туристик-рекреацион тибындағы махсус иҡтисади зона булдырыу буйынса эш дауам итә. Ул Бөрйән, Белорет һәм Әбйәлил райондары биләмәләрендә урынлашасаҡ. Уның төп туристик объекттары - Шүлгәнташ мәмерйәһе һәм музей комплексы, Башҡортостан дәүләт ҡурсаулығы, Ирәмәл тауы, Ирәкташ, Әбйәлил һәм Белорет райондарының тау саңғыһы курорттары, солоҡсолоҡ һәм башҡа объекттар.

Туризмдың һәр төрө ял итеүҙе, сәйәхәт итеүҙе генә түгел, ә тәьҫораттар, ыңғай эмоциялар алыуҙы ла күҙ уңында тота. Былар барыһы бергә республикаға танылыу һәм ҡыҙыҡһыныу артыуы иҫәбенә туристарҙы йәлеп итеү генә түгел, Башҡортостанда булған кешеләрҙең бында яңынан әйләнеп килеүе өсөн шарттар булдырырға ла мөмкинлек бирә.

Башҡортостан ҡунаҡ саҡырып ҡына ҡалмай, республика вәкилдәре төрлө төбәктәргә һәм илдәргә барып, төбәкте презентациялай, был ҡыҙыҡһыныу уята. Мәҫәлән, 2023 йылдың августында Санкт-Петербургта Башҡортостан көндәре үтте. Төньяҡ баш ҡала губернаторы Александр Беглов уларҙы "ҡала өсөн ысын бүләк" тип атаны. Февралдә Минск халҡы һәм Белоруссия баш ҡалаһы ҡунаҡтарының башҡорт аш-һыуы донъяһы менән танышыу мөмкинлегенә эйә булды. Һәм бындай миҫалдар күп.

Былтыр республикабыҙҙың Russian Event Awards халыҡ-ара премияһы йомғаҡтары буйынса ваҡиғалы туризм буйынса тәүге 5 төбәк иҫәбенә инеүе осраҡлы түгел. Был республиканың бөтә территорияһында барған туристик ваҡиғаларҙың сағыу эше. "Рәсәйҙең күп кенә төбәктәре был тәңгәлдә Башҡортостандан өлгө ала", - тип билдәләй эксперттар.

**Роман ЯКИМЧУК.**

*ҮӘТ, ШУЛАЙ!*

# БАРМАЙ ТОР!

**Шаҡша күперендә капиталь ремонт эштәре дауам итә. 9 июлдең 00:00 сәғәтенән 24 июлдең 23:00 сәғәтенә тиклем бында автотранспорт хәрәкәте тулыһынса ябыла. Белгестәр әйтеүенсә, был ремонт эштәре барышында күпер конструкцияларының тирбәлеүен булдырмаҫ өсөн кәрәк.**

5 июлдә Башҡортостандың Транспорт менән ташыуҙы ойоштороу үҙәгендә брифинг уҙғарылды, унда БР Транспорт һәм юл хужалығы министрлығы, Өфө ҡалаһы хакимиәте, подряд ойошмалары вәкилдәре, шулай уҡ ташыусылар журналистарға әлеге күперҙең ябылып тороуы ваҡытында халыҡты транспорт менән тәьмин итеү һәм урап үтеү юлдары хаҡында мәғлүмәт бирҙе. "Былтыр беҙ Шаҡша күперен капиталь ремонтлау буйынса контракт төҙөгәйнек, уға ярашлы эштәрҙе 2025 йылдың февралендә тамамлау күҙалланғайны. Әммә ҡышын асфальт һалып булмай, шуға күрә эштәрҙе 2024 йылда тамамлау өсөн яңы график төҙөнөк. Проектты тиҙерәк ғәмәлгә ашырыу өсөн күперҙе пландан тыш 16 көнгә ябып торорға булдыҡ, был осраҡта асфальт һалыуҙы ноябрҙә тамамлап буласаҡ, - тине Өфө хакимиәтенең Юл төҙөү, ремонтлау һәм яһалма ҡоролмалар буйынса идаралығы начальнигы вазифаһын башҡарыусы Евгений Кулешов.

"Башҡортостан ҡала яңы пассажирҙар компанияһы" генераль директорының беренсе урынбаҫары Анатолий Глухов компанияның Транспорт һәм юл хужалығы министрлығы һәм мэрия менән берлектә Өфө ҡалаһында йәшәүселәрҙе уңайлы транспорт менән тәьмин итеү сараларын билдәләүе хаҡында мәғлүмәт бирҙе. "Муниципаль транспорт графигы электропоездарҙың ҡалаға килеү ваҡыты менән яраштырылды. Иглиндә, Иглин районында, шулай уҡ Шаҡша микрорайонында йәшәүселәр ҡала яңы поездарына уңайлы рәүештә ултыра аласаҡ, шул иҫәптән "Ҡарлуғас" сериялы инновацион йөрөтөү составына ла. Хәҙер ҡала сиктәрендә, "Дим - Шаҡша" маршрутында, 5:00 сәғ. 22:00 сәғ. тиклем 30 ҡала яңы поезы йөрөй, - тине Анатолий Глухов.

Шәхси автотранспорт менән ҡулланыусыларға ҡала үҙәгенә һәм башҡа райондарға сығыу өсөн иң уңайлыһы - Көнсығыш сығыу юлын файҙаланыу. Шулай уҡ Көньяҡ урап йөрөү юлынан, мәҫәлән, Кузнецов затоны аша ла йөрөп була.

**Өфө хакимиәтенең матбуғат хеҙмәте.**

# ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Алма

Алма май-июнь айҙарында сәскә ата. Унда шәкәрҙәр, органик кислоталар, пектин матдәләре, витаминдар һәм тимер күп. Дауаланыуҙа сәскәһен, япрағын, емешен ҡулланалар. Сәскәһен - атҡан саҡта, япрағын - сәскә атып бөткәс тә, емешен тулыһынса бешкәс алалар. Алмала тимерҙе үҙләштереүгә булышлыҡ иткән аскорбин һәм фолий кислоталары, рутин, органик кислоталар (алма, шарап һәм лимон) булыуы ҡан системаһына ыңғай йоғонто яһай. Алма тынысландырыу, ҡан тамырҙарын киңәйтеү, ҡан барлыҡҡа килтереү, бәүел ҡыуҙырыу, ҡаҡырыҡты сығарыу сифаттарына эйә. Матдәләр алмашыныуы насарайғанда һәм аппетит булмағанда алма ашау файҙалы. Ул организмдан ҡуҙғалаҡ кислотаһын, радионуклидтарҙы, артыҡ холестеринды сығара. Алма һуты аҙҡанлылыҡ, бөйөр һәм бауыр ауырыуҙары, атеросклероз, респиратор ауырыуҙары, ревматизм, подагра, бәүел ташы ауырыуынан файҙалы. Әммә гастрит һәм ашҡаҙан сей яраһы менән яфаланғандарға алма һутын самалап эсергә кәрәк.

❖ Ангина булғанда 1 стакан йылы һыуға 1 балғалаҡ алма һеркәһе ҡойорға һәм тамаҡты сәғәт һайын сайҡатырға. Алма һеркәһен түбәндәгесә әҙерләргә: алманы шул көйө һут һыҡҡыс аша, йәки эре ҡырғыстан үткәрергә. Шунан ҙур быяла банкаға һалырға һәм ҡайнатылған һыу ҡойорға (һәр 0,5 литр һыуға 2 стакан ҡырылған алма). Аҙағынан һәр 1 литр һыуға 100-әр грамм бал йәки шәкәр, 10 грамм сүпрә һәм 20 грамм кипкән ҡаты икмәк киҫәге һалырға. Банканы бүлмә температураһында 10 көнгә ауыҙын асып ҡалдырырға. Көн һайын болғатып торорға. 10 көн үткәс, әҙерләмәне марля аша һөҙөргә, шунан ауыҙы киң һауытҡа ҡойоп алып, марля менән ҡаплап ябырға һәм әсегәнсе йылыла тоторға. Әсегәс (шыйыҡса тоноҡланғас), һеркә әҙер һанала. Ғәҙәттә быға 1,5-2 ай кәрәк. Һеркәне тағы бер ҡат һөҙөргә һәм һалҡын урында һаҡлау өсөн шешәләргә ҡойоп алырға.

❖ Артриттан ангинаны дауалағанда күрһәтелгән ысул буйынса әҙерләнгән алма һеркәһенең 1 балғалағын 1 стакан һыуға ҡушып, көнөнә 4 тапҡыр эсергә. 2 аҙнанан һыҙланыу баҫыла.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

## Ҡыйғыр, ҡыйғыр ыласын

(Чеглок)



Ыласындан бәләкәйерәк. Ҡорһағы аҡ, йәш ҡоштарҙыҡы арҡыры һыҙыҡтары булған ерән төҫтә. Аяғының өҫкө яғы ("ыштаны") сағыу ерән, арҡаһы ҡарараҡ төҫтә. "Мыйығы" яҡшы күренә. Ҡанаттары оҙон, осошо бик тиҙ, етеҙ, нәфис.

Илдең бөтөн төбәгендә лә осрай. Ағастарға, ҡаяларға оя ҡора, ҡайһы саҡта ҡарғаларҙың ояһын ала.

Эре бөжәктәр һәм ваҡ ҡоштар уның ризығы булып тора. Табышын осоп китеп барышлай тота.

## Шоңҡар

(Кречет)



Иң ҙур бөркөт. Арҡаһы ҡара, ҡорһағы аҡ. "Мыйығы" күренмәй тиерлек.

Диңгеҙ ярҙарында йәшәй. Ояһын ҡаяларға, ағастарға ҡора. Көҙөн-ҡышын Рәсәйҙең бөтөн төбәгендә лә, шул иҫәптән, Башҡортостанда ла осрай. 1890 йылдың декабрендә Бәләбәй ҡалаһы янында ғалимдар шоңҡар тота, 1850 йылда ошонда уҡ аҡ шоңҡарҙы ҡулға төшөрөргә мөмкинлек була. Ғалим В. Валуев пар аҡ шоңҡарҙарҙы Мишкә районында, шулай уҡ яңғыҙ шоңҡарҙы Өфө эргәһендә күрә. Ырымбурҙа теркәлмәгән. Һирәк осрай, Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың Ҡыҙыл китабына индерелгән.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов, "Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан. (Дауамы бар).**

*АЛДАНМАҒЫҘ!*

# ЕМЕРЕП ИНӘЛӘР

**Илдә яңы хәүефле мутлашыу төрө тулҡыны бара: сит ил хакерҙары кешенең ватсап йәки телеграмын емереп, уның исеменән бөтә контакттарына ла бер-нисә сәғәткә аҡса биреп тороуҙы һорап хәбәр ебәрә. Мутлашыусылар ҡулына меңәрләгән кеше эләккән дә инде һәм эләгеүен дауам итә.**



Телефонды емереүҙең иң таралған ысулы - вируслы ссылка ебәреү. Кешегә зарарланған аккаунттан ниндәйҙер конкурста ҡатнашҡан туғаны, танышы, хеҙмәттәше һәм башҡалар өсөн тауыш биреүҙе һораған ссылка килә. Уға баҫып ингән һәр кем мутлашыусылар ҡармағына ҡабып та ҡуя. Телефонды емереүҙең икенсе төрө - нисек тә булһа смс хәбәр аша килгән кодтарҙы әйттереү. Ул кодты әйтеүегеҙ генә көс - телефонға шул минутта уҡ вирус "инеп оялай" һәм мутлашыусыларға дистанцион идара итеү өсөн юл аса.

Мутлашыусылар ҡулына эләкмәҫ өсөн бер ҡасан да таныш булмаған сайттарға илтеүсе ссылкалар аша үтмәгеҙ. Хатта ссылка һеҙ белгән таныш номерҙан килгәндә лә йәки социаль селтәрҙәрҙәге дуҫығыҙҙан булған осраҡта ла уға баҫмағыҙ, сөнки уларҙың телефоны зарарланған булыуы мөмкин. Шулай уҡ телефоныгыҙға килгән паролдәрҙе лә бер кемгә лә әйтмәгеҙ, смс-хәбәр йәки мессенджер аша ебәрмәгеҙ.

**Мессенджерҙарҙың мутлашыусылар тарафынан емерелеүенән нисек һаҡларға?**

● бөтә мессенджерҙарығыҙҙа мотлаҡ рәүештә **"ике факторлы аутентификация"** функцияһын ҡуйығыҙ. Быға бер минут ваҡыт талап ителә, ләкин мутлашыусыларҙың эшмәкәрлеген ныҡ ҡатмарлаштыра.

Бынын өсөн, әгәр ҙә телефоныгыҙ андроид булһа:

● **ватсап:** өҫкө уң яҡтағы өс йондоҙсоҡҡа баҫырға - көйләү - аккаунт - ике аҙымлы тикшереү - ҡабыҙыу. Алты һандан торған пароль уйлағыҙ, уны ике тапҡыр индерегеҙ һәм электрон почтағыҙҙың адресын яҙығыҙ. Был мотлаҡ булмаған, әммә хәүефһеҙлек өсөн бик тә кәрәк аҙым.

● **телеграм:** көйләү - болотло пароль (облачный пароль) - пароль ҡуйыу.

Пароль уйлағыҙ (хәрефтәр ҙә ҡулланырға була), уны шулай уҡ ике тапҡыр индерергә. Артабан программа һеҙгә паролде иҫләтеүҙе (бында паролде яҙмағыҙ) һәм тергеҙеү өсөн (восстановление) электрон почтаны тәҡдим итәсәк. Почтағыҙға килгән алты һанлы кодты яҙырға кәрәк.

Әгәр ҙә телефоныгыҙ айфон булһа:

● **ватсап:** көйләү (унда аҫҡа мөйөштәге киртләс) - иҫәп яҙыуы - ике аҙымлы тикшереү - ҡабыҙыу. Алты һанлы кодты уйларға һәм ике тапҡыр яҙырға, шулай уҡ электрон почтаның адресын күрһәтергә кәрәк.

● **телеграм:** көйләү - (унда аҫҡа мөйөштәге киртләс) - конфиденциальность - болотло пароль (облачный пароль) - пароль күрһәтеү.

Ике факторлы аутентификация иҫәп яҙмаһын телефонға бәйләй һәм икенсе телефондан һеҙҙең профилегеҙгә инеү мутлашыусыларға ауырға төшәсәк, сөнки вирус ебәреүҙән тыш паролде лә сисергә кәрәк буласаҡ.

Әгәр ҙә аҡса һорап смс-хәбәр ебәрһәләр, һеҙгә мөрәжәғәт иткән "танышығыҙға" үҙегеҙ шылтыратып аныҡлағыҙ. Шылтыратыу ватсаптан түгел, мотлаҡ телефондан булырға тейеш.

Әгәр ҙә инде һеҙҙең телефоныгыҙҙы емереп, һеҙҙең исемдән аҡса һорапһалар, тиҙ арала "авиа" режимына ҡуйып, интернет менән вай-фай аша ҡулланығыҙ. Шулай уҡ телефоныгыҙҙың "Көйләүендә" "Бәйләнгән ҡоролма" бүлегенә инегеҙ. Унда һеҙҙең профилгә инеү мөмкинлеге булған телефон һәм компьютерҙар исемлеге күренәсәк. Исемлектә тик үҙегеҙҙең телефонды ғына ҡалдырып, ҡалғандарына "Сеансты туҡтатыу" функцияһын тоҡандырығыҙ. Артабан өҫтә әйтелгәнсә ике факторлы аутентификациялауҙы ҡуйығыҙ һәм авиарежимды һүндерегеҙ.

Һеҙҙең исемдән смс-хәбәр ебәргән һәр кемгә шылтыратып, һеҙҙең телефонды емереүҙәре хаҡында белдерегеҙ. Шулай уҡ бөтә социаль селтәрҙәрегеҙҙә "Минең телефонды ватҡандар, бер кемгә лә аҡса ебәрмәгеҙ" тигән мәғәнәлә статус ҡуйығыҙ.

Мотлаҡ рәүештә "Одноклассники", "ВКонтакте" һәм, иң мөһиме, gmail почтаһының, сөнки уға телефон бәйләнгән, паролен үҙгәртегеҙ.

Башҡортостан халҡы минут һайын мутлашыусыларға 30 миллион һум аҡса күсерә. Уларҙың рәтен тулыландырма, һаҡ бул!

*ХОҠУҒЫҢДЫ БЕЛ!*

# ҒӘМӘЛДӘ - ЯҢЫ ЗАКОНДАР




**Июлдә граждандар һәм ойошмалар өсөн мөһим федераль закондар ғәмәлгә инәсәк. Был турала үҙенең телеграм-каналында Дәүләт Думаһы рәйесе Вячеслав ВОЛОДИН һөйләне.**

● 1 июлдән үк социаль ярҙамға мохтаж граждандарҙан (күп балалы ата-әсәләр, пенсионерҙар, инвалидтар, хәрби хәрәкәт ветерандары) коммуналь хеҙмәттәргә түләгәндә банк комиссияһы алынмай. Әйткәндәй, социаль ярҙам алыу ябайлаштырыласаҡ. Был йәһәттән социаль өлкәлә льготалы категория граждандарҙы теркәү һәм иҫәпкә алыуҙы тәьмин итеүсе берҙәм цифрлы платформа ярҙамға киләсәк.

● Кеше алдаусыларға күсерелгән аҡсаны, хатта кеше уны үҙ теләге менән башҡарған хәлдә лә, кире ҡайтарып алыу мөмкин буласаҡ. Был хаҡтағы закон 25 июлдә көсөнә инәсәк. Банктарҙан һәм түләтеү системаларынан икеле транзакцияларҙы тикшереүҙе талап итәсәктәр һәм хатта клиенттың ризалығы булған хәлдә лә шикле операцияларҙы 2 көнгә туҡтатып торасаҡтар. Рәсәй банкының махсус базаһындағы яуыз уйлы әҙәмдәр иҫәбенә күсерелгән аҡсалар кире ҡайтарыласаҡ.

● Кредиттар буйынса бурыстарҙы түләү тәртибе лә үҙгәрә. Кредитты түләү ваҡыты үтеп киткән хәлдә иң тәүҙә проценттар, төп бурыс буйынса проценттар, ағымдағы осор өсөн проценттар һәм шунан һуң ғына штраф санкцияһы һәм түләтеүҙәр башҡарыласаҡ. Элек иһә штраф түләтеүҙәре был исемлектә өсөнсө булып тора ине. Закон граждандарға бурыстарын тиҙерәк түләргә ярҙам итә. Бынан тыш, бурыслыларҙың хоҡуҡтары яҡлана.

● Дәүләттеке булмаған пенсия фондтары клиенттарына уларҙың пенсия тупланмалары күләме хаҡында "Дәүләт хеҙмәттәре" порталындағы шәхси кабинет аша йәки РФ Социаль фондының клиент хеҙмәтендә мәғлүмәт бирелеп барасаҡ. Бынан алдараҡ граждандарға пенсия тупланмалары һәм йәш буйынса страховкалы пенсия күләме хаҡында мотлаҡ мәғлүмәт биреү тәртибе ғәмәлгә ингәйне инде.

● Судтан тыш банкротлыҡ процедураһы ябайлаштырыла. Граждандарға судтан тыш банкротлыҡ өсөн яҙма рәүештәге ҡайһы бер белешмәләрҙе биреү мотлаҡ булмаясаҡ. Федераль һалым системаһы ведомство-ара электрон бәйләнештәр аша бөтөн мәғлүмәттәрҙе йыя ала.

● Финанс компаниялары мөрәжәғәттәрҙе ҡарауҙы тиҙләтәсәк. Кредит финанс ойошмалары тарафынан граждандарҙың мөрәжәғәттәрен ҡарау ваҡыты 15 көнгә тиклем ҡыҫҡартыла. Өҫтәмә мәғлүмәттәр кәрәк булған осраҡтарҙа ғына был ваҡыт тағы ла 10 көнгә оҙайтыла ала.

● Былардан тыш, ватан сәнәғәтенә өҫтәмә ярҙам күрһәтеләсәк. Рәсәй сәнәғәт продукцияһы һәм етештереүсеһе төшөнсәләре индерелә. Хөкүмәт өҫтөнлөклө тәртиптә Рәсәй сәнәғәт продукцияһын ҡабул итеү, файҙаланыу һәм һатыу тураһында талаптар ҡуя аласаҡ.

● Йәмәғәт экологик контроле камиллаштырыласаҡ. Тирәяҡ мөхитте һаҡлау буйынса йәмәғәт инспекторҙарының хоҡуҡтары һәм бурыстары һәм уларҙың дәүләт контроле органдары менән бәйләнештәр тәртибе аныҡлана. Сит ил агенттары йәмәғәтселек экология контролен башҡарыу хоҡуғына эйә була алмаясаҡ.

**Әйткәндәй, "Башинформ" БР Дәүләт Йыйылышы депутаттарының торлаҡ йорттарҙағы төнгө "көйөп биреү" нөктәләрен тыйыу хаҡындағы закон проектын хуплауҙары хаҡында хәбәр иткәйне.**

**"Башинформ" мәғлүмәт агентлығынан.**

✓ *Ул, һаҡмар йылғаһы туңғас, боҙ өҫтөндә ыҙма һалырға бойора; һуңынан, ышаныслыҙ булыуҙары асыҡланып, бында йыйылған башҡорттарҙы, исемләп әйтеп, һорау алырға саҡыралар.*



*ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ*

**Иван Васильевич Чернов (1825-1902) - Ырымбур казак ғәскәренең генерал-майоры, тыуған яҡты өйрәнеүсе, хәйриә ярҙамы күрһәтеүсе. Сығышы менән Һамар казактарынан. 1839-1847 йылдарҙа Каруанһарайҙа урынлашҡан Башҡорт-мишәр ғәскәре командующийы канцелярияһында хеҙмәт итә, белемле булыуы һәм тырышлығы уға урядник чинынан башлап генерал дәрәжәһенә тиклем күтәрелеү мөмкинлеген бирә. 1847-1861 йылдарҙа Ырымбур хәрби губернаторы штабында өҫтәл начальнигы (дәүләт учреждениеларындағы VII класлы түбәнге ҡатлам чиновнигы) дәрәжәһендә эш башҡарыусы була. 1861-1865 йылдарҙа - 1-се, 2-се һәм 3-сө башҡорт кантондары попечителе, 1-се кантон начальнигы вазифаларын башҡара. 1865 йылда башҡорттарҙың ергә хоҡуҡтары буйынса комиссия ағзаһы итеп ҡуйыла, Ырымбур губернаһында крәҫтиәндәр эштәре, ҡала мәсьәләләре менән шөғөлләнә, 1866 йылда Ырымбур дворяндары йыйылышы депутаты итеп һайлана. 2-се һәм 1-се дәрәжә изге Станислав, 4-се һәм 3-сө дәрәжә изге Владимир, 1-се дәрәжә изге Анна ордендары кавалеры. 1874 йылда генерал-майор чинында отставкаға сыға. 1907 йылда, үҙе үлгәндән һуң 5 йыл үтеүгә, Ырымбурҙа уның "Генерал-майор Иван Васильевич Чернов яҙмалары" тигән китабы нәшер ителә. Был әҫәрҙә, башлыса, Ырымбур губернаторҙары эшмәкәрлеге һәм ошо осорға ҡараған ижтимағи-сәйәси ваҡиғалар хаҡында бәйән ителә. "Хаҡлыҡтан һис бер тайпылмайынса, шәхсән үҙем күргәндәр, ышаныслы кешеләрҙән ишеткән нәмәләр йә иһә эштәрҙән һәм башҡа сығанаҡтарҙан алынғандар ошо яҙмаларымдың нигеҙе булып тора", - тип башлай автор үҙенең хеҙмәтен. Уҡыусыларыбыҙға XIX быуатта йәшәгән күренекле дәүләт эшмәкәренең башҡорттар хаҡында яҙып ҡалдырған мәғлүмәттәрен тәҡдим итәбеҙ.**

# ЫРЫМБУР ГУБЕРНАТОРҘАРЫ ҺӘМ БАШҠОРТТАР

## (Генерал-майор И.В. Чернов яҙмаларынан)



**И.И. Неплюев**

**(1742-1757)**

Йәшерен Советник Иван Иванович Неплюев аңлы, эшмәкәр кеше була, әммә ул үҙенең бойороҡтарын үтәтеү йәһәтенән ҡаныҡлыҡҡа тиклем ҡәтғилек күрһәтә, уларҙы бер ҡасан да ғәмәлдән сығармай, ҡаршылыҡтарҙы бөтөрөү өсөн күрелгән ҡаты саралар ҙан екһенмәй һәм һәр бер эште ахырынаса еткерә. Ул башҡорттарҙың икенсе болаһын ҡаты саралар, үҙе уйлап сығарған язалар ярҙамында баҫтыра. Уларҙың береһен миҫалға килтерәм. Ул, Һаҡмар йылғаһы туңғас, боҙ өҫтөндә ыҙма һалырға бойора; һуңынан, ышаныслыҙ булыуҙары асыҡланып, бында йыйылған башҡорттарҙы, исемләп әйтеп, һорау алырға саҡыралар. Башҡорт ыҙмаға килеп инеү менән эстә торған һалдаттар уны шундуҡ мәкегә, боҙ аҫтына төшөрөп ебәрә. Шулай итеп, бында ингәндәрҙең барыһы ла ер йөҙөнән юҡ була бара, һәм бер кем дә кире сыҡмай; халыҡты кәнәш ҡороу өсөн йыябыҙ, тип алдан әйтеүҙәренә ҡарамаҫтан, ыҙманың күләме бәләкәй генә булыуынан унда ингәндәрҙең һис бер тауышһыҙ һыуға батырылыуын аңлап ҡалған халыҡ яр буйынан ҡасып, таралып китә.

Был сара ҡаҙыҡҡа ултыртыу һәм тән язаларына дусар итеүҙән аҙаҡ хөкүмәт ҡулына эләкмәй ҡалған ихтилалсыларға ҡарата ҡулланыла. Көс ҡулланып эҙәрлекләнгән башҡорттар ҡаршылыҡ күрһәтә алмай, һәм улар Урал аръяғына, Ҡырғыҙ (Ҡаҙаҡ. - **Тәрж. иҫк.**) далаларына ҡасып киткәс, Неплюев ҡасҡындарҙы таларға, уларҙың мал-тыуарын, ҡатындарын, ҡыҙҙарын мөлкәт итеп алырға, ир-аттарын ҡол итергә рөхсәт итә. Ырымбур өйәҙе башҡорттары, мин уларҙың начальнигы булғанымда, 40-сы йылдарҙың аҙағында - 50-се йылдар башында Һырдаръяға нығытмалар төҙөргә барған саҡтарында ҡырғыҙҙарҙың бында ҡасып килгән башҡорттар ҡаҙған, уларҙың исемдәре менән аталған арыҡтарын күрһәтеүе хаҡында минә һөйләгәйне. Баҫтырылғандан һуң башҡорттар үҙ ерҙәренә ҡайтты һәм, хоҡуҡтары тергеҙелеп, кисерелде.

Неплюев идара иткән саҡта Ҡаҙан һәм Вятка губерналарынан килгән бай татарҙар, төбәктә Хиуа һәм Бохара менән сауҙаны үҫтереү маҡсатында Ҡарғалы (Сәйет посады) ауылын нигеҙләне, тәүге осорҙа, Ырымбур ҡәлғәһенән төҙәгәнсе, ул яҡтарҙан килгән каруандар Ҡарғалыла туҡтай ине. Иң Юғары заттың рөхсәте менән билдәле привилегиялар алған сәйетләләргә мамыҡ, Сорочин бойҙайы һәм марена сәсеп үҫтереү бурысы ҡуйыла. Әммә был тәжрибә килеп сыҡманы. Неплюев оҙаҡ ваҡыттар дауамында атап үтелгән үҫемлектәрҙе сәсеүҙе талап итте һәм ҡыҫтап күндерҙе, быны өсөн Ырымбурҙан йыраҡ булмаған ерҙә, Өфө ҡалаһына барған хәҙерге почта юлы буйында тәғәйен урын күрһәтте. Сәйетләләр был урындағы ерҙе урмандан таҙартты, әммә бынан бер яҡшы нәмә лә килеп сыҡманы, һәм улар Неплюев киткәндән һуң сәсеүлектәрен ташланы.

Неплюев, төбәктә тау эштәрен үҫтереүҙең әһәмиәтен аңлап, тау заводтарына тәүләп нигеҙ һалыусы, Преображенск, Богоявленск, Верхотор һәм хәҙерге Өфө һәм Ырымбур губерналарындағы башҡа заводтарҙы төҙөүсе Твердышевтарға һәм Мясниковтарға (Тула кешеләренә) ныҡлап булышлыҡ итте. Ерҙәр башҡорттарҙан йөҙәр меңләгән дисәтинә майҙанда юҡ ҡына хаҡҡа һатып алынды, рудниктарға ер ул ваҡытта ғәмәлдә булған закон нигеҙендә бушлай бирелде. Преображен заводы 100 мең дисәтинә ерҙе 300 һум аҡсаға һәм бер нисә фунт сәйгә һатып алды; башҡа заводтар өсөн ерҙәр шул уҡ хаҡҡа алынды.

Шул уҡ Неплюев Ырымбур төбәген төрлө сословиеләғы рус кешеләре менән колонизациялауҙы ҡайғыртты; бында килеп төпләнгән халыҡ, улар берәҙәк йә иһә ҡасып йөрөгән крепостной кешеләр булыуына ҡарамаҫтан, үҙҙәре һайлаған урында бар ғүмерҙәре буйына йәшәргә ҡалды; кире ҡайтарыу булманы, һәм был хәлгә ҡарата мәҡәл дә сығарылды: "Помещик талабына Неплюев тәкөрөп бирер, Рычков ырғаҡтар эшләр (бюрократик хәйләләр, алдаҡ ҡулланыу. - **Тәржемәсе иҫкәрмәһе**), үлгән кешене бәйләп һалһа, шайтан үҙе лә сисә алмаҫ".



**О.А. Игельстром**

**(1784-1792, 1796-1798)**

Губернатор, инфантерияһан генерал, барон Осип Андреевич Игельстром, барса Башҡортостанды ырыу старшиналары идара иткән кантондарға (округтарға) бүлеүе, башҡорттар араһынан оҙайлы чин хеҙмәте өсөн дәртләндереү хоҡуғына (выслуга) эйә булған кантон начальниктарын ҡуйыуы менән иҫтә ҡалды. Был сара башҡорттарҙы эстән бүлгеләүгә һәм уларҙы тоғро кешеләргә буйһондороуға йүнәлтелгәйне, һуңғылары аша хөкүмәт халыҡтың ихтыяждарын белеп торҙо.

Шундай уҡ бүленеш Ырымбур казактарына ла ҡағылды: эске станицалар кантондар составына, ә линия буйы отрядтары һәм форпостар дистанцияларға индерелде. Өфө, Вятка, Пермь, Һамар һәм Ырымбур губерналарында, мишәрҙәрҙе лә иҫәпкә алып, барлығы 17 башҡорт кантоны булдырылды. Һамарҙан һәм Өфөнән Ырымбурға тиклем 5 эске казак кантоны һәм Урал йылғаһы буйлап 5 дистанция хасил ителде. Былдай бүленеш башҡорттарҙа 1860 йылға, ә казактарҙа 1841 йылға тиклем ғәмәлдә ҡалды, һуңынан һәр халыҡ өсөн махсус ҡабул ителгән положениеларға ярашлы, беренселәрен өйәҙҙәргә, һуңғыларын полк округтарына бүлеү индерелде.

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ тәржемәһе.**

**(Дауамы бар).**

*БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 79*



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Көнсығыш Померания һөжүм итеү операцияһында

1945 йылдың беренсе кварталында Совет Армияһы Көнсығыш Пруссия, Көнсығыш Померания, Түбәнге һәм Үрге Силезия территорияларындағы дошман төркөмдәрен тар-мар итеүҙе төп маҡсат итеп ҡуя. Юғары Баш командование Ставкаһы бер нисә эре һөжүм итеү операцияларын планлаштыра. 13 ғинуарҙан 25 апрелгә тиклем 2-се, 3-сө Белорус һәм 1-се Балтика буйы фронты ғәскәрҙәре частары тарафынан Германияның "Төньяҡ" армиялар төркөмөнә ҡаршы Көнсығыш Пруссия стратегик һөжүм итеү операцияһы ғәмәлгә ашырыла. Һөжүмтәлә немецтарҙың Көнсығыш Пруссиялағы төп көстәре бер-береһенән айыртылған өс төркөмгә бүлгеләнә: Хейльсберг, Кенигсберг һәм Земланд биләмәләрендәге дошман частарына ҡаршы айырым операциялар уҙғарыла. 1945 йылдың апрелендә 3-сө Белорус фронты ғәскәрҙәре Кенигсберг (6 - 9 апрель) һәм Земланд (13 - 25 апрель) һөжүм итеү операцияларын бойомға ашыра. Совет Армияһы Көнсығыш Пруссияның бөтөн территорияһын яулап ала, Польшаның төньяҡ районларының байтаҡ өлөшөн азат итә.

Ғинуар һәм февраль айҙарында 1-се, 2-се һәм 4-се Украин фронттары ғәскәрҙәре Сандомир-Силезия, Көнбайыш Карпат һәм Түбәнге Силезия стратегик һөжүм итеү операцияларын уҙғара. Һөжүмтәлә Польшаның көньяҡ райондары, Словакия территорияһының ҙур өлөшө азат ителә, Германияның мөһим хәрби-сәнәғәти райондарының береһе - Түбәнге Силезия яулап алына. Ошо операцияларҙың уңышлы тамамланыуы Берлин йүнәлешендә һөжүм башлау һәм Чехословакияның үҙәк райондарын дошмандан таҙартыу өсөн уңайлы шарттар тыуҙыра.

Фашист Германияһын ахырынаса тар-мар итеү һәм ошо ауаҙы һуғышта еңеүгә өлгәшеүҙең төп маҡсаты - Берлинға тиклем әллә ни күп тә ҡалмай. Әммә ошо йүнәлештә, туҡтап тормайынса, һөжүмде дауам итеү мөмкинлеге булмай. Ошо ваҡытҡа беҙҙең ғәскәрҙәр ауыр алыштарҙа, күп юғалтыуҙар менән 500 саҡрымдан ашыу һуғыш юлдарын үтә. Алынған рубеждарҙа нығыныу, һуғыш кәрәк-яраҡтары, яғыулыҡ, аҙыҡ-түлек менән тәьмин итеү юлдарын билдәләү, частарҙың шәхси составын тулыландырыу, авиация базаларын күсереү талап ителә. Шул уҡ ваҡытта дошман Берлин йүнәлешендә ауыр ҡаршылыҡ күрһәтә, Көнсығыш Померанияла совет ғәскәрҙәре флангыһына һөжүм итеү маҡсатында ҙур көстәр туплай, Силезиялағы ғәскәр төркөмдәрен ишәйтә.

Фронтта килеп тыуған ошондай шарттарҙа беҙҙең командование өсөн иң тәүҙә үтәлергә тейешле бурыс - дошмандың Көнсығыш Померания һәм Силезия төркөмдәрен тар-мар итеү була. Көнсығыш Померанияла Германия армияһы етәкселеге 25 ғинуарҙа уҡ Генрих Гиммлер командалыҡ иткән "Висла" армиялар төркөмөн булдыра (Көнсығыш Пруссия операцияһы барышында 2-се немец-фашист армияһының байтаҡ өлөшө Көнсығыш Померанияға сигенеп өлгөрөп ҡала). Фашистар, Померанияләғы позицияларында нығынып, Көнсығыш Пруссияға сыға алыу юлдарын һаҡлап ҡалырға ынтыла. Улар 16 пехота, 4 танк, 2 моторлаштырылған дивизиялар, 5 бригада, 8 айырым төркөм һәм 5 ҡәлғә гарнизоны көстәре менән контрудар яһарға ҡарар итә. "Висла" армиялар төркөмө резервында тағы ла 4 пехота һәм 2 моторлаштырылған дивизиялар була.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**

**(Дауамы бар).**

***✓ Олатай-өләсәйҙәр беҙҙе бәләкәйҙән "Тәүфиҡлы бул", тип үҫтерҙе. Беҙҙең халыҡ өсөн иң мөһиме - күркәм холоҡ. Элек-электән шулай килгән. Тәүфиҡ имандан айырып алғыһыҙ. Дин - ул әҙәп тә, әхлаҡ та.***

# ХӘҠИҠӘТКӘ АҠЫЛЫҢ

**Рухи хазиналар, тигән саҡта, әлбиттә, үҙебеҙҙең меңәр йыллыҡ тамырҙарҙы барлайбыҙ. Шул ваҡыттар эсендә халҡыбыҙға төрлө һынауҙар үтергә тура килде. Һынауҙарға һынмай, киләсәккә атларға динебеҙ көс-ҡеүәт бирҙе. Ислам динен һаҡлап, милләттең иманын нығытып йәшәгән дин әһелдәре, уҡымышлылар тураһында китаптар ҙа донъя күреп тора. Йәмғиәттә әле ниндәй үҙгәрештәр бара? Бөгөнгө йәштәребеҙ ниндәй? Уларҙың матур итеп никах мәжлестәре, айыҡ туйҙар үткәреүе хәҙер кемделер аптыратмай. Дини ғилем алыр өсөн мәсеттәрҙә төрлө курстар эшләп тора. Шул уҡ ваҡытта һәр замандың һәр өлкәлә хәл итәһе үҙ проблемалары бар. Быйылғы Ғаилә йылы уға ниндәй үҙгәрештәр индерер? Ғаилә, тигән саҡта беҙ нимәләргә иғтибар йүнәлтергә тейешбеҙ? Хөрмәтле дин әһелдәребеҙ - Булгаков ауылының 1-се йәмиғ мәсете имам-хатибы Нурмөхәмәт НУРИЕВ һәм Өфө ҡалаһының "Рамаҙан" мәсете имам-хатибы Илшат ҒӘТИӘТУЛЛИНдың фекерҙәре заманыбыҙ, замандаштарыбыҙ хаҡында.**

**Быйыл ураҙа тотоусыларҙың күплегенә, Ураҙа ғәйете һәм Ҡорбан байрамдары сараларына халыҡтың эркелеп килеүенә ҡарап та, йылдың-йылы иманға килеүселәр арта бара, тигән ышаныс нығый. Был, йәмғиәттә диндең дәрәжәһе күтәрелә, тип уйларға нигеҙ бирәләр бит?**

**Илшат хәҙрәт:** Эйе, бөгөнгө көндә диндең дәрәжәһе күтәрелә бара, тип уйлайым. Сөнки элегерәк дингә килеүселәрҙең тәртибе лә, мөнәсәбәттәре лә төрлөсә ине: бер яҡтан, намаҙ ҙа уҡыйҙар, икенсе яҡтан, гонаһ та ҡылып ҡуялар, йәғни инанғанлыҡ күңелдә әллә ни тойолмай ине. Хәҙер әйтә алам: Ислам диненә, әлхәмдүлилләһи, зыялылар - ғалимдар, уҡытыусылар, офицерҙар, инженерҙар, спортсылар, табиптар һәм бизнесмендар күпләп килә. Улар - бик аҡыллы, ғаилә ҡорған, эсмәгән-тартмаған эшһөйәр кешеләр. Уларҙы күреп, халыҡта дингә мөнәсәбәт үҙгәрә. Тренерҙар, уҡытыусылар артынан уҡыусылары Исламға килә. Ҡөрьән-Кәримдә тап-таҙа йөрәкле кешеләр тураһында йыш телгә алына. Бер аятта, кешеләрҙең йөрәге ысынлап та тыныслана Аллаһы Тәғәләне иҫкә алыуҙан, тиелә. Тәнгә көс бирер өсөн көнөнә өс-дүрт тапҡыр ашайбыҙ, шуның һымаҡ, күңелгә лә ниндәйҙер ризыҡ кәрәк. Мәсеткә килгән кешеләрҙән: "Ҡөрьән уҡығас, доға ҡылғас, күңелегеҙ тынысландымы?" - тип һораһаң, бөтәһе лә: "Эйе, күңелгә шул тиклем рәхәт булып ҡалды", - тиҙәр. "Ә ни өсөн?" - тип һораһаң, "Белмәйбеҙ", йәки "Бында күп кеше килеп доға ҡылғанғалыр", - тиҙәр. Ә беҙҙең күңел доға ҡылырға, зикер уҡырға тартылып тора, шуны эшләгән саҡта күңелебеҙ тынислана.

Ошо йән тыныслығын тойғандар барыбер уйлана, сөнки был ғүмер бик тиҙ үтә. Беҙ кешеләрҙең йөрәген аса алмайбыҙ, уны Аллаһы Тәғәлә генә аса ала. Ҡайһы ваҡыт кешеләрҙән: "Нимә ул дин?" - тип һорайым. Күп кеше яуап бирә алмай. Шул саҡта инде: "Ә һеҙҙе был донъяға кем яралтты?" - тип һорарға тура килә. "Аллаһ Сөбхәнә вә Тәғәлә", - тиҙәр. Эйе, әгәр ҙә Аллаһы Тәғәлә беҙҙе был донъяға яралтҡан икән, Ул беҙгә ошо донъяла нисек дөрөҫ итеп йәшәргә, тигән инструкция ла яҙа ала. Тимәк, һеҙ харам ризыҡтар ашайһығыҙэсәһегеҙ икән, мотлаҡ проблемалар тыуасаҡ. Хәләл ризыҡланған кеше сәләмәт тә, көслө лә була. Араҡы эсмәгән дуҫтарығыҙ бар икән, һеҙҙең яҡшы дуҫтарығыҙ бар, тигән һүҙ. Ғаилә тарҡалыуы, бер ҡайҙа ла йүнләп эшләй алмау - шул инструкцияны белмәүҙән килә.

Аллаһы Тәғәлә күршеләр менән нисек йәшәргә икәнен дә өйрәтә. Был турала хәҙис тә бар. "Ябраил ғәләйһиссәләм күрше тураһында шул тиклем күп һөйләне, хатта мин уларҙың минең мираҫыма хоҡуҡтары барҙыр, тип уйлай башланым", ти Мөхәммәт бәйғәмбәр (с.ғ.с). Ғаилә, күршеләр менән яҡшы мөнәсәбәт икән, шул ваҡытта Аллаһы Тәғәлә бәрәкәт бирә, үҙегеҙ өсөн ваҡытығыҙ күбәйә, тимәк, ғилем алырға, кешеләргә ғилем таратырға һәм халыҡҡа хеҙмәт ҡылырға мөмкинлек тыуа.

**Нурмөхәмәт хәҙрәт:** Илшат хәҙрәттең фекерҙәре менән килешмәү мөмкин түгел, сөнки бер ҡаҙанда ҡайнайбыҙ. Халҡыбыҙҙың матур, бәхетле киләсәге тураһында һәр саҡ уйланабыҙ. Ниндәй генә закондар уйлап сығарһаҡ та, ниндәй генә тәртиптәр урынлаштырһаҡ та, халҡыбыҙ, милләтебеҙ, телебеҙ өсөн нимә эшләнек һәм нимә эшләргә кәрәк, дөрөҫ эшләйбеҙме, тигән һорау барыбер алға килеп баҫа. Дингә ирек бирелгәнгә утыҙ йыллап ваҡыт үтеп китте. Ошо ваҡыт эсендә бала инде ир ҡорона етә, ҡыҙ балалар әсә булып, балалар тәрбиәләй, ә беҙ һаман бер урында тапанабыҙ. Ураҙа, ҡорбан байрамдарын, һабантуйҙар, исем туйҙары, никахтарҙы хәләл үткәрергә тырышалар, әммә шунан артыҡ китә алмағанбыҙ кеүек. Беҙҙең диндәге башҡа халыҡтар дин ғилемен өйрәнеүҙә бик алға киткәндәр һымаҡ. Ситтән килгән байрам-йолалар - хеллоуиндармы шунда, йәш быуынға көслөрәк тәьҫир итә. Ә беҙҙең дин аша йоғонтобоҙ зәғиф.

Иң тәүҙә, ғаиләнең абруйы булырға итейеш. Сөнки ғаилә - тәрбиә усағы. Быйыл Ғаилә йылы тип иғлан ителде, ә ғаилә көсө - балаларҙың тәрбиәһендә. Балалар ғаиләлә тәрбиәләнергә тейеш. Бөгөн кейәүгә сыҡмаған ҡыҙҙар, кәләш алмаған егеттәр ишәйгән ваҡытта ғаилә тураһында һүҙ йөрөтөп тә булмай. Демография хәле бик насар. Ҡайһы ваҡыт ошо турала фекеремде еткерһәм, мине тәнҡитләйҙәр. Тәнҡитләһәләр ҙә, әйтәм егеттәргә: "Хәлеңдән килһә, ал тағы бер кәләш, ике кәләш ал, аҙып-туҙып йөрөмә, балалар тәрбиәләп үҫтер", - тием. Элек-электән беҙҙә шулай булған - минең олатайымдың, мәҫәлән, ике ҡатыны булған, ул Мәсетле районынан. Ун бала үҫтергән, улар барыһы ла татыу, дуҫ булып бергә ҡайнап йәшәйҙәр. Ғаиләгә бына ошондай ҡаты талап булмаған өсөн дә ҡыҙҙар кейәүгә сыҡмай. Ғаиләнең абруйын, мөһимлеген беҙ, имамдар, яҡлап, аңлатып йәшәргә тейешбеҙ.

Балаларға матур исемдәр биреү мөһимлеген онотмайыҡ. Хатта имамдар араһында Альфред, Альберт исемлеләр осрай. Артем, Радмир, Светлана, Арина, Юлия, Ленанан кем тыуа? Әхмәт менән Мөхәммәт, Сафия менән Әҡлимә тыуамы? Өләсәйҙәрҙең балаларына һүҙҙәре үтмәйме ни? Абруйҙары юҡмы әллә? Исмаһам, ун ейәне араһында бер Мөхәммәт, бер Әҡлимә булырға тейештер бит? Әгәр ҙә бала туған телендә һөйләшмәй икән, ул халыҡтың киләсәге бармы? Ғаиләлә атай-әсәй булырға һәм ғаиләлә туған тел йәшәргә тейеш.

**Илшат хәҙрәт, Һеҙҙең дин, иман юлын һайлауығыҙға нимә сәбәпсе?**

**Илшат хәҙрәт:** Бәләкәй саҡта уҡ, кеше үлде лә бөттө, тигәнгә ышанмай инем. "Нисек инде, кешеләр йәшәй-йәшәй ҙә үләләр ҙә ҡуялар, ул шулай юҡҡа сығырға мөмкинме ни?" - тип уйлана торғайным. Был һорауҙы атайыма ла бирҙем, ул: "Һин был турала уйлама", - тигәйне. Өйҙә өләсәйем һәр ваҡыт доға ҡылып йөрөй. Әсәйемдең әсәһе лә туҡһанды үтһә лә Ҡөрьән уҡып ултыра торғайны, бер ваҡытта ла ураҙаһын ҡалдырманы. Олатайҙар ҙа иманлы булғандар. Бәлки, уларҙың доғалары менән мине Аллаһы Тәғәлә дингә килтергәндер. Аллаһы Тәғәлә ҡөҙрәте инде был, Ул йөрәгемде асҡан. Педколледжды бөткәс, БДУ-ға уҡырға индем. Эшләп тә, уҡып та йөрөп, тәүге эш хаҡына Ҡөрьән һатып алдым. 1996 йылдарҙа Ғуфран мәсетенә йөрөй торғайныҡ. Ғәли хәҙрәт ул саҡта иҫән ине, ул һәр саҡ беҙгә яҡшы киләсәк теләп, дәртләндереү һүҙҙәре әйтә торғайны, кешенең күңелен күтәрә белә ине ул.

**Ғаиләлә ололар йоғонтоһо ҙур икәнен беләбеҙ. Башҡорттарҙа ул элек-электән шулай булған. Нурмөхәмәт хәҙрәт, улар ниндәй сифатҡа нығыраҡ иғтибар йүнәлтте һуң?**

**Нурмөхәмәт хәҙрәт:** Олатай-өләсәйҙәр беҙҙе бәләкәйҙән "Тәүфиҡлы бул", тип үҫтерҙе. Беҙҙең халыҡ өсөн иң мөһиме - күркәм холоҡ. Элек-электән шулай килгән. Тәүфиҡ имандан айырып алғыһыҙ. Дин - ул әҙәп тә, әхлаҡ та. Милләт бер йомғаҡ булып, ошо турала борсолорға тейеш, шул ваҡытта милләтебеҙҙең матур киләсәгенә һәр ҡайһыбыҙ ниндәйҙер өлөш индерә аласаҡ. Ислам дине күҙлегенән ҡарағанда, һәр бер кеше был донъяла хәленән килгәнсә, ең һыҙғанып туғанына ла, күршеһенә лә, хеҙмәттәшенә лә изгелек эшләргә, уларҙың тормошон яҡшыртыу өсөн тырышырға тейеш. Беҙгә Аллаһы Тәғәлә шундай матур ватан, шундай матур тәҡдир биргән. Шундай матур шәхестәребеҙ бар, шөкөр. Бөтөн нәмәбеҙ ҙә бар, тик киләсәк тураһында ғафиллыҡҡа, битарафлыҡҡа бирелгәнбеҙ. Йәштәрҙең күҙҙәрендә киләсәккә иманлы өмөт булырға тейеш.

Беҙҙе, быуындар бәйләнеше өҙөлөргә тейеш түгел, тип тәрбиәләнеләр. Ғаиләлә ейәндәр, уларҙың ата-әсәһе, өләсәйҙәре һәм тағы ла ҡарт өләсәйҙәре, ҡарт ҡартатайҙар була икән - шул ғаиләләрҙә именлек. Шәжәрәне бик юғары күтәреүҙәре лә бер ҙә юҡҡа ғына түгел, уны өйрәнгәндәр, уны хөрмәт иткәндәр. Халыҡ юҡҡа ғына, бүленгән - бүрегә тарыған, тип әйтмәгән. Беҙгә быны онотторға ярамай. Йәмғиәт ул мәсеттә генә түгел, ә йортта ла була. Йәш ғаиләләр аятҡа саҡырһа, әйтәм: "Атай командир, әсәй уның ярҙамсыһы, ә һеҙ - шул командала. Әгәр ҙә командала берегеҙ генә аҡһайһығыҙ икән, тимәк, һеҙ тотош команданы артҡа һөйрәйһегеҙ. Шуның өсөн һеҙҙең берҙәмлек бик мөһим..." Ғаиләлә изге йолалар үтәлеүен халҡымдың матур киләсәге итеп күрәм.

**Илшат хәҙрәт, бөгөнгө йәш быуынды нисек ҡыҙыҡһындырырға була?**

**Илшат хәҙрәт:** Балалар, бер яҡтан, бөгөн күп белә. Ниндәйҙер һорау тыуһа, телефонды асыу менән әҙер мәғлүмәт килеп сыға, элекке һымаҡ эҙләнеп, китаптар аҡтарып, соҡоноп ултырмай улар. Ә еңел табылған мәғлүмәттең баһаһы юҡ. Социаль селтәрҙә ата-әсәләргә һораулама эшләгәнем булды: "Балаларға гаджеттар ҡулланыуҙы сикләүҙе хөкүмәт кимәлендә хәл итергә кәрәкмеюкмы?" Туҡһан процент ата-әсә быға ыңғай ҡарай. Гаджеттарҙан айырыла алмау - улар өсөн дә, уҡытыусылар өсөн дә, полиция өсөн дә яңы проблема.

Бер заман бер йома хөтбәһенән һуң бер атай килде: "Минең 28 йәшлек улым көнө буйы компьютерҙа уйын уйнап тик ултыра", - тип зарлана. Тағы ла бер ҡатын: "Утыҙ йәшлек улым танктар уйнап тик ултыра, эшкә йөрөмәй", - тип килде. Киләсәктә ошо интернет уйынына бирелгәндәргә реабилитация үҙәктәре лә асылыуы мөмкин. Улар ысынбарлыҡта йәшәмәй, виртуаль донъянан сыға алмайҙар. Ғилем алыуҙы элек энә менән ҡойо ҡаҙыу, тип ҡарағандар. Бөгөнгө йәштәр олатайҙар һымаҡ ҡул менән ашлыҡ сәсеп үҫтереп, уңыш йыймағандар, шуға ла был донъяның ҡиммәтен аңламайҙар. Етмәһә, интернет аша уларҙы сит илдән кемдәрҙер тәрбиәләп ултыра...

**Нурмөхәмәт хәҙрәт, йәш быуын, тигәс, мәктәпте күҙҙән ысҡындырып булмай. Бала саҡтағы кисерештәр, асыштар һәр саҡ иҫтә ҡала. Ғилем башы мәктәптә һалына. Һеҙҙе мәктәптәргә йыш саҡыралармы?**

**Нурмөхәмәт хәҙрәт:** Юҡ шул. Беҙҙә халыҡ һаман үҙ шәүләһенән ҡурҡып ята һымаҡ, ә заман технологиялары аша дошман үҙенең эшен алып бара. Беҙ һаман балаларыбыҙға дөрөҫлөктө еткерергә форсат тапмайбыҙ. Бына, мәҫәлән, мин үҙемдең тыуған ауылымда бер тапҡыр ҙа мәктәптә булғаным юҡ. Улым уҡыған гимназияла ла бер тапҡыр ҙа булғаным юҡ. Аллаға шөкөр, мәсеттәребеҙ тулы. Ни өсөн, сөнки мәсеткә йөрөгән ғаиләләрҙә балалар күп. Улар тәрбиәле. Ләкин улар бит дөйөм халыҡтың ике-өс проценты ғына. Ҡалғандары өсөн дә борсолорға тейешбеҙ.

**Халҡыбыҙ нимәләрҙән алыҫ торорға тейеш? Минең аңлауымса, һеҙҙең шул һорауға үҙ яуабығыҙ бар.**

**Нурмөхәмәт хәҙрәт:** Халҡыбыҙҙа булмаҫҡа тейешле кире сифаттарҙы теҙеп, барлап сыҡҡанмын, шуларҙы әйтеп үтәйем. Бер кешегә, бер милләт әһеленә лә, бер енескә лә беҙҙә нәфрәт булырға тейеш түгел. Кеше намыҫына тап төшөрмәҫкә, кеше намыҫын да, үҙеңдең намыҫыңды ла һаҡлай белеү кәрәк. Процентҡа алыу ҙа, процентҡа биреү ҙә булмаһын, юҡһа, шул кәсеп менән йәшәгән кешеләр күбәйҙе. Беҙ кешене лә бөлгөнлөккә төшөрмәйбеҙ, үҙебеҙ ҙә бөлгөнлөккө төшмәйбеҙ. Беҙҙең халыҡта тәмәке тартыу, наркомания, аҙғынлыҡ, боҙоҡлоҡ, енси тәртипһеҙлек, ғәйбәт һөйләү, һүҙ йөрөтөү булырға тейеш түгел. Енәйәт эштәрендә

**✓ *Ниндәй сифттар булырға тейеш? Ул булмышы менән ябай. Ғаиләһе өсөн йәнен бирергә әҙер. Ватанын яратыусы. Һәр ваҡыт айыҡ. Бер ҡасан да алдашмай, хәләл мал таба белә. Оололарҙы хөрмәт итә, миһырбанлы.***

# МЕНӘН ИНАН!

ҡатнашыу, коррупция, мутлыҡ беҙҙә булырға тейеш түгел. Башҡорт кеше иҫәбенә йәшәргә тейеш түгел. Ул ғаиләһенән бер ваҡытта ла баш тартмай. Ата-әсәһен ҡарттар йортона тапшырмай. Бер кемгә лә яла яҡмай, икенсе дин кешеләре менән бер ваҡытта ла ыҙғышмай, үсләшеп, дошманлашып йәшәмәй. Үҙен тәкәббер ҡуймай. Дуҫтар, туғандар менән араны өҙмәй, улар менән татыу йәшәй. Беҙҙең халыҡ бер ваҡытта ла сихыр менән булышмай. Сихырҙың мосолман башҡорт менән бер ниндәй ҙә уртаҡлығы юҡ.

Әле ниндәй сифаттар булмаҫҡа тейешлеген һананым. Ә хәҙер - ниндәй сифттар булырға тейеш? Ул булмышы менән ябай. Ғаиләһе өсөн йәнен бирергә әҙер. Ватанын яратыусы. Һәр ваҡыт айыҡ. Бер ҡасан да алдашмай, хәләл мал таба белә. Ололарҙы хөрмәт итә, миһырбанлы. Балаларына ул дуҫ һәм уларҙы сифатлы итеп тәрбиәләй. Спорт һөйөүсе, дөрөҫ туҡланыусы. Әйткәндәй, йәмғиәтебеҙҙә ҙур мәсьәләләрҙең береһе - дөрөҫ туҡланыу. Беҙҙең халыҡ тәбиғәтте һаҡлай белеүсе, юғары белемле. Ул күркәм холоҡ эйәһе, хеҙмәт һөйөүсән, эштән ҡурҡмай. Төҫ-ҡиәфәтенә, өҫ-башына иғтибарлы, талапсан. Туған телендә һөйләшеүсе, туған телендә аралаша белгән кеше. Тағы ла ояла белеү сифаты хас уға. Минең халҡым тыйнаҡ, тик Аллаһы Тәғәләнән башҡа бер кемдән дә, бер нәмәнән дә ҡурҡмай. "Башҡорт ҡурҡаҡ түгел. Башҡорт ул мәрхәмәтле" тип әйтерлек булһын. Һәм инде башҡорт ҡунаҡты ҡабул итә белә. Ул ҡунаҡсыл, ихлас.

Мин, дин күҙлегенән сығып, бына шундай фекерҙәр төйнәнем, әле генә яҙылған нәмәләр түгел. Анализ, һығымталар күптән яһалды. Халҡымдың киләсәге булырға һәм ул бик матур булырға тейеш. Беҙ шул йүнәлештә эшләргә тейеш. Һәр бер кеше үҙенең ғаиләһендә, үҙенең коллективында, үҙенең дуҫтары араһында эште алып барһа, бының өсөн мулла булырға кәрәкмәй. Әле Илшат хәҙрәт әйтте, мин дә өҫтәйем. Дингә ни өсөн киләләр? Аллаға шөкөр, беҙҙә дингә аҡыл менән киләләр. Мода өсөн түгел. Йылдар тәжрибәһе менән киләләр. Ковид та, МХО-ла һынау булды. Үҙемдең һабаҡташтарымды, бер табаҡтан ашаған иптәштәремде ерләгән ваҡытта мин дә уйландым, бөтөн тормошом күҙ алдынан үтте. Ауырлыҡ килмәйенсә, кеше тормоштоң ҡәҙерен белмәй. Кеше нимә генә булһа ла, ауырыһа ла, йығылһа ла, илаһа ла, юғалтһа ла, яҡшырырға, төҙәлергә, тәүбә итергә, йомшарырға тейеш. Халҡыбыҙ шул тиклем ауырлыҡтарҙы үтеп, ҡабат-ҡабат бер үк тырмаға баҫмаҫ, аҡыл менән эш итергә кәрәк. Ниндәйҙер лозунгылар ҡысҡырған әҙәмдәрҙең артынан йөрөү заманы үтте. Хәҙер аҡыл көрәше бара. Иң беренсе, ғаиләң эсендә эшлә. Ә беҙ, имамдар, мәсеткә йөрөгән кешеләр менән эшләһәк, һәм улар яҡшы яҡҡа үҙгәрһә, ин шәәә Аллаһ, беҙҙең арабыҙҙа икейөҙлөлөккә урын ҡалмай.

Ауылда һәр кешенең ҡушаматы булған һымаҡ, һәр милләттең дә ҡушаматы була. Сауҙагәрме, сихырсымы унда. Шуға ла: "Ниндәй сифаттар беҙҙә булмаҫҡа тейеш?" - тигәнде атап-һанап үттем. Мөхәммәт бәйғәмбәр - үҙе күркәм әхлаҡ әһеле. Хатта дошмандары уны "Бер ваҡытта ла алдамай", тип белдергән. Әгәр ҙә беҙ тешебеҙ-тырнағыбыҙ менән әхлаҡҡа йәбешһәк, халҡыбыҙ бөтөн йәһәттән дә иң байы буласаҡ. Ошо байлыҡты дөрөҫ итеп ҡуллана белгәндә, Аллаһы Тәғәләнең рәхмәтенә ирешәбеҙ. Күңелдә тыныс булған ваҡытта бәхетле буласаҡбыҙ. Бәхет тигән төшөнсә - ул беҙҙең нигеҙебеҙҙә бар. Яңы нәмә - ул онотолған иҫке нәмә, тиҙәр бит. Беҙ шуны кире ҡайтара, йәштәргә күрһәтә белһәк, тормошобоҙ мәғәнәле булыр.

**▸ Илшат хәҙрәт, белеүебеҙсә, һеҙҙе студенттар янына осрашыуҙарға йыш саҡырып торалар. Һәм һеҙ улар менән ихлас аралашаһығыҙ. Колледждарҙа йәштәр ниндәй һорауҙарҙы күберәк бирә?**

**Илшат хәҙрәт:** Мин үҙем уларға күберәк һорау бирәмдер, бәлки. "Аллаһы Тәғәләгә ышанаһығыҙмы?" - тип һорайым. "Ышанабыҙ", - тиҙәр. "Ә ышанмағандар бармы?" "Бар",- тиҙәр. "Һин үҙеңдең тәнеңә хужамы?" "Эйе". "Улайһа, әйт әле, башыңда нисә бөртөк сәсең бар?" Белмәйҙәр. Бына шулай төрлө ҡыҙыҡ һорауҙар биреп, йәштәр менән эш алып барырға тырышам. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, бөгөнгө балаларҙа ғаилә моделе юҡ. Ҡыҙҙарҙан: "Ниндәй хыялығыҙ бар, 30-40 йәшегеҙгә үҙегеҙҙе нисек итеп күрәһегеҙ?" - тиһәң, "Бизнес, фатир һәм машина", - тиҙәр. "Ә ғаилә?"- тип һораһаң, шундуҡ ҡына яуап бирә алмайҙар. "Балалармы, әллә көсөк алып аҫрарғамы?" - тигәндәр ҙә бар. Йәштәр бөгөн үҙҙәренә яуаплылыҡ ала белмәйҙәр, ти кешеләр. Улар шул тиклем рәхәт йәшәйҙәр, телефонда ғына ултыралар, унда ла матур тормошто ғына күрәләр. Үҙҙәре өсөн яуаплылыҡ ала белмәгәс, ғаилә, бала тураһында уйлаймы ни улар? Был ҙур проблема, уға ғалимдар ҙа, уҡытыусылар ҙа иғтибар йүнәлтергә тейеш. Иң шәп, иң абруйлы кеше кем, тиһәң, айфоны, машинаһы булған кеше иң хөрмәтле абруй, тиҙәр. Әгәр ҙә йыйыштырыусыға берәйһе иҙән йыуырға ярҙам итһә, ниндәйҙер байрамға әсәйем ебәрмәй, бармайым, тиһә, был тиндәше улар өсөн эшкинмәгән кеше иҫәпләнә. Бәйғәмбәребеҙҙең хәҙисе бар. Әгәр ҙә һеҙ кешеләргә яҡшылыҡты аңлатмаһағыҙ, насарлыҡтан тотоп тормаһағыҙ, Аллаһы Тәғәләнең ғазабын көтөгөҙ. Аллаһы Тәғәләнең ғазабы килгәс, һеҙ доға ҡыла башлаһығыҙ, ләкин доғаларығыҙ ҡабул булмаҫ, ти.

Диндең төп талабы - был яҡшы эш, ә был насар, тип, кешеләргә аңлатып тороу. Сөнки бөгөн кешеләр аҙашып, яҡшы эште - насар, ә насарҙы яҡшы эш, тип күрә башланылар. Аллаһтың ғазабы ғаиләләр тарҡалыуында, ташланған балалар миҫалында күренә лә инде.

**Нурмөхәмәт хәҙрәт:** Ғаилә йылының төп маҡсаты нимә? Көслө шәхестәр тәрбиәләү. Ил етәкселеге лә был турала әйтеп тора. Ең һыҙғанып эшләгән йәш депутаттарҙы күрәбеҙ, йәш имамдарыбыҙ бар. Донъя улар ҡулына ҡала. Әхлаҡлы, тәрбиәле, иманлы, сабыр, күркәм холоҡло белгестәребеҙ булырға тейеш. Былар бит үҙенән-үҙе генә барлыҡҡа килмәй. Хатта мәсеткә алып килә торған көстөң береһе бит ул ғаилә. Үҙе уҡый белмәгән хәлдә лә, ата-әсә, балаларын етәкләп, мәсеткә килтереп, вәғәз тыңлап ултырһа, ниндәй файҙа! Унда атай - әсәйҙе, әсәй атайҙы хөрмәт итергә тейешлеге тураһында һөйләйҙәр, мөхәббәт тураһында ла һөйләйҙәр. Берәү миңә: "Мулла беҙгә мөхәббәт тураһында лекция уҡырға саҡырҙы", - тип һөйләй. Эйе, ысын, саф мөхәббәт тураһында мәсеттә һөйләйҙәр. Йософ менән Зөләйха тарихын, Бәйғәмбәребеҙҙең ҡатындарына саф мөхәббәте тураһында һөйләйҙәр. Беҙгә үрнәк булған изге кешеләрҙең тормошо тураһында ла унда һөйләйҙәр. Беҙ үрнәк алырлыҡ күп-күп ғаиләләрҙең олатай-өләсәйҙәре әүлиәләр, имамдар булған. Мәсеткә доға уҡытырға килһәләр "Минең олатайым мәсет һалған", "Минең олатай репрессияланған мулла булған", тип һөйләйҙәр. Шуға ла был аманатты күтәреп алырға ваҡыт етте. Иртәгә һуң буласаҡ, Аллаһы Тәғәләнән яза килеүе итимал.

**▸ Ғаилә, тибеҙ икән, тәрбиә төшөнсәһе унан айырып ҡаралмай. Илһөйәр, ерһөйәр, телһөйәр иманлы балаларҙы тәрбиәләү ғаиләгә генә лә ҡайтып ҡалмай. Уның күңелен үҫтереү, күңелен аңлау, сафландырыу, рухландырыу йәһәтенән дин ғилеме ныҡ ярҙам итә. Шуға ла дини остаздарыбыҙ ҙа күберәк булырға тейештер тип уйлайым...**

**Нурмөхәмәт хәҙрәт:** Мәктәптәрҙә балаларға тәрбиәүи яҡтан күберәк иғтибар бүленеүе үтә лә мөһим. Хәҙер дин дәрестәре индерелде, "Разговор о важном" класс сәғәте бар, шунда әхлаҡ, әҙәп төшөнсәләрен аңлатыр өсөн балалар менән аралашҡанда бик тә файҙалы булыр ине. Уҡытыусылар ҙа дини тематика буйынса кем нисек аңлай, шулай һөйләй. Әгәр ҙә миңә медицина китабы биреп, шуны уҡып, лекция һөйләргә ҡушһалар, унан файҙа булыр инеме?



Мин үҙемдең балалар менән дә һөйләшәм, ҡыҙыҡһынам. Уҡытыусылар араһында әле лә балаларға үҙҙәренең атеистик идеяларын һеңдерергә тырышҡандар бар. Уҡытыусы атеист икән, шул инаныуҙа ҡалһын, беҙ уға үҙебеҙҙең ҡараштты һеңдерәбеҙ, тип сат йәбешмәйбеҙ бит. Кемдер насрани, кемдер яулыҡта, кемдер йәшелгә буялған сәс менән йөрөй - беҙ береһенә лә бәйләнмәйбеҙ. Кеше хәҡиҡәткә аҡылы менән инанырға тейеш. Һәр бер эштең маҡсаты булырға тейеш, был фәндәрҙе уҡытыу исем өсөн генә булырға тейеш түгел. Ул бит Аллаһы Тәғәләнән бирелгән фән. "Мин шулай уйлайым, ә теге шулайыраҡ уйлай" һымаҡ яуап булырға тейеш түгел. Ашарға әҙерләгән ваҡытта ла кәстрүлгә нимә тура килә, шуны ташламайбыҙ. Нимәнелер алдан һалып ҡайнатаһың, нимәнелер нисбәтен иҫәпләп, һуңғараҡ төшөрәһең - һәр нәмәнең үҙ тәртибе.

Мәрйәм апай Бураҡаеваның күңел һалып еткерә торған "Тормош һабаҡтары" дәреслеге бар. Унан бик күп файҙалы ғилем алырға була. Һәр кем көсөнән килгәнсе йәш быуынды тәрбиәләүҙә үҙенең өлөшөн индерергә тырышһын ине. Бөгөн, Аллаға шөкөр, йәш быуын өсөн бөтөн шарттар булдырылған. Үҙебеҙҙең йолаларға, дин буйынса тәрбиәгә иғтибар бирмәһәк, Көнбайыш идеологияһы уларҙы тапап-иҙеп үтеп китәсәк. Мәҫәлән, 1917 йылда кемдер Аллаға табынған, кемдер - тәрегә, кемдер иген сәскән, кемдер заводта эшләгән. Йәшәп ятҡандар. Шулай һәүетемсә көн итеп ятҡанда, кемдер берәү килеп, улар күңеленә революция һәм атеизм идеяһын һала, кешеләр ҡотороноп, шул идеяларҙы байраҡ итеп күтәреп, бер-береһенә ҡаршы сыға. Бер атанан тыуған биш бала, биш яҡҡа ҡарап, бер-береһе өҫтөнән доностар яҙып, яла яғып, ҡырылышып бөтә. Мәсетте лә ҡутарыр өсөн кеше ситтән килмәгән, шунда йәшәгән бер мәғәнәһеҙе табылған. Ә башҡалары ауыҙҙарын асып, иҫтәре китеп ҡарап торған. Аллаһы Тәғәлә язаһын беҙгә үҙебеҙҙең ҡул менән бирә. Бөгөн дә йәштәргә тәртип һеңдермәһәк, уларға аҡыл өйрәтеүсе бар. Бер-бер хәл булһа, һин үҫтергән биш балаң бер-береһенә дошман булмаҫ, кеше малына йә ғүмеренә ҡул һуҙмаҫ, йә ейәнең ҡайҙалыр барып, кемделер алдамаҫ, тип, ышаныс меннән әйтә алаһыңмы? Шуның өсөн дә ҡул ҡаушырып ултырһаҡ, уңышҡа өлгәшә алмаясҡбыҙ. Бөгөн еңде һыҙғанып, халҡыбыҙҙа булған күркәм тәрбиә хазинаһын - дин, ғөрөф-ғәҙәтен ҡулланып, матур киләсәгебеҙ өсөн тырышырға тейешбеҙ.

**▸ Һеҙ телгә алған "Тормош һабаҡтары" яңынан уҡыу-уҡытыу програмаһына индерелгән. Тимәк, халыҡ тормошо, йәшәйеше, дине, йолалары тураһында йәш быуын өҫтәп ғилем аласаҡ. Уның рухи тормошона был үҙгәреш тә индерәсәк, тип ышанайыҡ...**

**Нурмөхәмәт хәҙрәт:** "Тормош һабаҡтары"н ҡабул итә торған саф йөрәк һәм уны еткерерлек ихлас кеше кәрәк. Тәрбиә - ул иң ауыр эш. Әйткән һүҙеңә үҙең дә тап килергә тейешһең, шулай бит? Мин ғалим түгел, мәжлескә киләм, Ҡөрьән уҡыйым да, кешеләргә әҙерәк вәғәз һөйләйем. Килгәндә үк Аллаһы Тәғәләгә әйтеп киләм: "Эй, Аллаҡайым, шунда берәй кешегә файҙалы мәғлүмәт еткерһәм, бер кеше иманға килһә, намаҙға баҫһа ине". Мин ябай нәмәләр тураһында һөйләйем, ул кеше күңеленә инә. Элек уҡытыусының абруйы шуға ҙур ине, ул аҡса өсөн түгел, ә балаларҙы кеше итәм, тип йәшәне. Беҙ ҙә эште "Бының өсөн беҙгә алмашҡа нимә бирәләр?" тигән матди күҙлектән сығып түгел, ә ихласлыҡ менән эшләргә тейешбеҙ. Беҙҙең һәр беребеҙ - ҙур дәүләттең-бинаның бер кирбесе. Һәр кем үҙ урынында булһа, һәр береһе үҙ вазифаһын дөрөҫ итеп башҡарһа, бөтәһе лә һәйбәт буласаҡ. Был донъяла һәйбәт булһа, тегендә лә насар булмаҫ, ин шәә Аллаһ. Беҙҙең халҡыбыҙ Бәйғәмбәрҙең сәхәбәләре заманынан диндә булған. Беҙгә әллә ҡайҙан килгәндәрҙең дин өйрәтеп йөрөүенең кәрәге лә юҡ. Беҙгә булғандың ҡәҙерен белеп, тәртипкә килтереп, ҡулланырға ғына кәрәк.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Диндә ихласлыҡ кәрәк. Бәлки, ошонда һөйләгәндәрҙе бер кеше генә булһа ла уҡып, тормоштоң мәғәнәһе нимәлә икән, тип уйланыр. Ул саҡта беҙҙең дә был һөйләшеү файҙаһыҙ үтмәгән булыр.**

**Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА**
яҙып алды.

***✓ 1945 йылдың февралендә туғыҙ осоусы ҡыҙға Советттар Союзы Геройы тигән исем бирелде. Шуға бәйле 8 март көнө айырыуса иҫтә ҡалды, сөнки был көндө Йондоҙҙарҙы тапшырыр өсөн маршал Рокоссовский үҙе килде.***



* * *

– Севастополь өсөн! - Главнокомандующийҙың ошо һүҙҙәре хәҙер барлыҡ танкистар, пехота, моряк һәм лётчиктарҙың телендә. Совет армияһы алға табан барыуын дауам итә, "Тиҙҙән еңеү!" тигән ышаныс барлыҡ күңелдәрҙе биләп алған.

Ҡырым ҡинлегендә совет дивизиялары хәрәкәт итһә лә, Севастополь һаман дошман ҡулында. Уны бирмәҫ өсөн нығытмалар ҡорған немец фашистары теше-тырнағы менән ҡаршы тора. Бына шуға ла ерҙә генә түгел, күктә дәһшәтле алыш бара. Еңеүгә булған ышаныс совет һуғышсыһын тик алға әйҙәһә лә, бер талап үҙгәрешһеҙ ҡалды: юғалтыуҙар аҙыраҡ булырға тейеш. Төнгө бомбардировщиктар авиация полкының ҡатын-ҡыҙҙар эскадрильяһы ошо мәхшәр эсендә ҡайнай, дошман нығытмаларына өҙләкһеҙ рейдтар яһайҙар.

Мәгүбә Сыртланова - төндәрен иң күп рейд яһаған осоусыларҙың береһе. "Мәгүбә Хөсәйеновна, һеҙҙе һаҡлаусы фәрештәләр бармы? Самолетығыҙ иләк булып тишкесләнеп ҡайта, ә һеҙ бер тапҡыр ҙа яра алғанығыҙ юҡ?" тип аптырай бәғзеләр. "Ул бөркөтҡыҙ!" тиҙәр икенселәре уйынлы-ысынлы.

Мәгүбә самолетына тағырға әҙерләнгән бомбаларҙың береһен ҡулы менән һыпырҙы һәм аҡбур менән "Севастополь өсөн!" тип яҙҙы. Һәр рейдта ул ошондай яҙыулы бомбаларҙы дошман өҫтөнә яуҙыра.

- Мәгүбә Хөсәйеновна, кәйефтәр нисек?

Үҙ уйҙарына сумып, полк командиры эргәһенә килеп баҫҡанын ла һиҙмәгән бит. Мәгүбә үрә баҫты:

- Иптәш командир...

- Булды-булды, - тип хәстәрлек менән өндәште Евдокия Бершанская. - Еңел түгел, аңлайым. Ҡыҙҙар алты-ете рейдтан һуң бөтөнләй аяҡтан яҙалар. Һин теремек.

Был төндә инде алтынсы тапҡыр осорға әҙерләнгән Мәгүбә тәүәккәл яуап ҡайтарҙы.

- Мин уларҙан өлкәнерәк бит, сыныҡҡанмын.

Тәүге мәлдәрҙә уның да бер нисә рейд үтәгәндән һуң аэродромға ҡайтҡас, самолеттан төшөр-төшмәҫтән ауып киткән саҡтары булды. Ә бөгөн бөтә нәмәне секундтар хәл иткәндә, арыу-талыу юҡ. Былай ҙа бит "этажерка"ға һигеҙҙән артыҡ бомба тейәп булмай. Ауыр йөк аҫҡан ПО-2 әкрен генә ҡуҙғалды, ләкин Мәгүбә ошо ҡараңғы төндә мотлаҡ тейешле урынға - "Юнкерс"тар аэродромына - "күстәнәстәр"ен алып барып ауҙарасаҡ. Юҡҡа ғына уларҙы фашист илбаҫарҙары "төнгө пәрейҙәр" тип атап йөрөтмәйҙәр! Тейешле нөктәгә урабыраҡ барырға була, юл хәүефһеҙ, ә дингеҙ аша тиҙерәк - Мәгүбә туранан һайланы. Беҙҙекеләр яҙамға мохтаж! Бер аҙҙан штурмандың иҫкәртеүе яңғыраны: аэродромға яҡынлашабыҙ. Мәгүбә самолет тиҙлеген кәметеп, Таня күрһәткән яҡҡа ҡайырылды. Ҡапыл төнгө ҡараңғылыҡты йырып, ялт-йолт прожекторҙар тоҡанды. Хатта хәҙер көнъяҡ бухталағы бөтә нәмә асыҡ күренә ине. Самолет ошо яҡтылыҡ эсендә ҡалды. Шундуҡ эргә-тирәлә кемуҙарҙан снарядтар гөрһөлдәне. Маневрҙар яһап, бер аҫҡа төшөп, бер өҫкә уҡталып, йә унға, йә һулға ҡәйелеп, осоусы ут ҡойонон йырып үтә алды. Штурман Таня Сумарокова бомбаларҙы ырғытыуын хәбәр итте. Эйе, аҫта бер-бер артлы янғын гөрсләп өҫкә күтәрелде. Снаряд ярсыҡтары ҡаҡлыҡыуҙан самолет тертләй, һелкенә, дерелдәй. Кире боролоу шулай уҡ дәһшәтле ут эсендә ҡалыуҙы аңлата. Киләһе снаряд самолетты ут менән ялмаясаҡ! Мәгүбә бер генә ҡотолоу юлын күрҙе, ни булһа ла булыр, аҫҡа мәтәлергә! Хәйләһе килеп сыҡты, самолетты бәреп төшөрҙөк, тип уйлаған фашист зенитсылары атыуҙы туҡтатты. Шулай ҙа шатланырға иртәрәк, ныҡ зарар күргән самолеттың да моторы "һүнәм-һүнәм" тип йүткерҙе.

- Таня, тереме һин?

- Тере, Мәгүбә! Тере!

- Мотор эшләмәй.

- Бында немецтар! Мәгүбә, үләһе, тик диңгеҙҙә генә!..

"Диңгеҙҙә генә!"

- Юҡ, үлмәбеҙ әле! - Мәгүбә хәҙер самолетына өндәште: - Бөркөт бул! Диңгеҙгә! - Самолет моторына "йән" ингәндәй булды. - Әҙ генә, тағы әҙ генә. Түҙ! Бирешмә! Диңгеҙ аша үтәбеҙ!

Ни мөғжизә "этажерка" һаман осоуын дауам итте. Ерҙән экипажға ярҙам итергә тырыштылар, сигнал ебәреп, ҡыҙыл ракета аттылар, һәм алда ус аяһындай ер күреп, Мәгүбә самолетын шунда йүнәлтте.

- Төшөп ултырҙыҡ, Таня!

- Төштөкмө! - тип ышанмағандай ҡабатланы штурман.

- Был яр буйы!

Мәгүбә менән Таня кабинанан һикереп төштөләр. Эйе, ПО-2 ҡойроғо һыуҙа булһа ла, тәгәрмәстәре ярға ҡунғайны.

Таня пилотты ҡосаҡланы ла илап ебәрҙе.

- Мәгүбә, мин инде донъя менән хушлашҡайным!

Мәгүбәнең дә күҙенән йәше атылып сыҡты, ул, һәр ваҡыттағыса, үҙен тиҙерәк ҡулға алды:

- Иртәрәк.

- Үҙебеҙҙекеләргә сыға алдыҡ! Беҙҙе килеп аласаҡтар, - тине һаман мышҡылдаған Таня. - Мәгүбә, һинең күҙең үткер. Мин хайранмын. Дөм-ҡараңғыла ла өс йөҙ метрҙан объекттарҙы шәйләйһең...

Мәгүбә уны тынысландырырға тырышып, арҡаһынан һөйҙө. Арыу-талсығыуы шулай булдымы, әллә үҙен ҡулға алдымы, Таня ойоно. Ә йөрәк тулауын тыя алмаған Мәгүбә ҡаты уйға сумды.

Балалар хаҡына... Ата-әсә шулай тине. Бына шулай ғаиләнең Урта Азияға оҙон юлы башланды. Өҫтәмә белем алыу теләге менән янған ҡыҙ эшселәр мәктәбенә уҡырға барҙы. Теркәп ултырыусы Гаджимурат Гасанов тигән кавказ кешеһе ине.

- Мәгүбә Хөсәйен ҡыҙы, - тип үҙе менән таныштырҙы Мәгүбә.

- Мосолман ҡыҙы, - тине Гасанов көр тауыш менән.

Ләкин был һүҙгә һаҡ ҡараған Мәгүбә бер нәмә лә өндәшмәне. Гасанов та ҡыҙҙың һағайыуын күрҙе шикелле. Икенсегә борҙо:

- Исем-шәрифең килешле, миңә әйтеүе еңел, Мәгүбә Гусейн ҡыҙы, - тип гөрләне.

Мәгүбә Гусейн ҡыҙы. Был тормоштоң яңы этабы башланыуы ине.

Шулай ҙа Мәгүбәгә самолет штурвалын тотоп тәү тапҡыр һауаға күтәрелгәнгә тиклем оҙайлы ғына юл үтергә тура килде. Ләкин үҙ көсө, аҡылы һәм тәүәккәллеге менән ул бөтөн ауырлыҡтарҙы енеп, барыбер моратына ирешә.

Мөхәббәт тураһында һорайҙар ҡыҙҙар-йондоҙҙар... Мөхәббәтен онота алманы Мәгүбә. Уны һәр саҡ көттө. Ҡайҙа уҡыһа ла, эшләһә лә, ҡайҙа йүнәлһә лә, Әсләм барыбер уны табыр төҫлө ине. Килмәне. Мәгүбә көттө. Көтөргә ярамағанын белгәс тә көттө, сөнки өйләнгәнен ишеттерҙеләр. Шулай ҙа онота алманы. Мәгүбә ауыр көрһөндө. Юҡ, үкенергә ярамай. Әгәр ҙә Үзбәкстанға сығып китмәһәләр, ихтимал, Сыртлановтарҙы Себергә һөрөрҙәр ине. Атаһының ҡатнашҡан кешеләрен шул яҙмыш көттө. Бөгөн Мәгүбә йәнен аямай үҙенең ватанын яҡлай, уны сикһеҙ яратыуын, тоғролоғон раҫлай. Ул совет ҡыҙы, партия ағзаһы, шулай буласаҡ. Әсләм дә күптән фронтталыр. Әүҙем комсомол булды класташы, йәшләй генә коммунистар сафына алдылар. Партия ҡайҙа ҡушһа, ул шунда булырға тейеш. Хәйер, партия ҡайҙа ҡуша, Мәгүбә лә шунда.





Һуғышҡа инеүенә ике йыл тулғанда, Мәгүбәнең полкташтары Ҡырымды үтеп сығып, Белоруссия ерендә инде. Урман, һаҙлыҡ һәм ҡыйратылған ауыл-ҡалалар - ергә тотошлайы менән фажиғә һеңгән. Полкташтары биш белорус ҡыҙы ла яҡындарына бәйле ҡайғылы хәбәрҙәр генә ишетте. 1944 йылдың 23 июнендә 2-се Белоруссия фронты Проня йылғаһын кискәндән һуң, һөжүмгә күсеп, дошман нығытмаларын ҡыйратты. Төп һыҙыҡтағы ут нөктәләрен юҡ итеү, фашистар өҫтөнә өҙләкһеҙ бомба яуҙырып, уларҙы тышаулау, мөмкинлектәрен сикләү, әлбиттә, "төн пәрейҙәре" иңенә төштө. Полк командиры майор Е.Д. Бершанская митинг эшләп, дошманды аяуһыҙ туҡмарға, Гвардия байрағын бөтөн Белоруссия аша алып үтергә саҡырҙы.

1945 йылдың февралендә туғыҙ осоусы ҡыҙға Советттар Союзы Геройы тигән исем бирелде. Шуға бәйле 8 март көнө айырыуса иҫтә ҡалды, сөнки был көндө йондоҙ-ҡыҙҙарға Йондоҙҙарҙы һәм, ордендарҙы тапшырыр өсөн маршал Рокоссовский үҙе килде.

Бына беренсе булып Ирина Рокобольскаяны саҡырҙылар. Ул инеү менән, маршал Рокоссовский торop баҫты, уның артынса - тиҫтәләгән генералы. Ни өсөн бөтәһе лә аяғүрә торалар - буләкләнеүсе аңламаны. "Иптәш маршал, полк командирына өндәшергә рөхсәт итегеҙ". Рокоссовский Иринаға ултырырға ҡушты, батыр ҡыҙ ултырғас ҡына командирҙар ҙа кире үҙ урындарына ултырҙылар. "Ҡатын-ҡыҙ булғаным өсөн минең алда аяғүрә баҫҡандар, мин бит шуны ҡапыл-ҡара аңламаным!" Был мәлде йыш иҫләне бәхетле Ирина.

Рокоссовский осоусы ҡыҙҙар алдында телмәр тотто: "Беренсе Белоруссия фронты менән командалыҡ иткән саҡта уҡ һеҙҙең полк тураһында легендалар ишеткәйнем. Минә ул әкиәт һымаҡ тойолғайны. Хәҙер күрәм, был ысынбарлыҡ. Мин ҡатын-ҡыҙ авиация полкын күрәм. Үҙегеҙҙең полкҡа ир-аттыз алғығыҙ килмәй икән. Был яҡшы, һеҙ үҙегеҙ Берлинға барып етәсәкһегеҙ..."

Ысынлап та, осоусы ҡыҙҙар еңеү таңын Берлиндан алыҫ булмаған Нойбранденбургта ҡаршы алдылар. Полкты тарҡатыу, ҡыҙҙарҙың бер-береһе менән илашып хушлашыуы... Айырылышыу ауыр булһа ла, тыныс тормошҡа күсергә - илде емереклектәрҙән азат итеп, яҡты киләсәк ҡорорға ынтылырға кәрәк ине. Ҡайҙа юлланырға, кем булырға, күп осоусы ҡыҙҙарҙың маҡсаттары билдәле. Һәр хәлдә, Мәгүбә үҙенең ҡайҙа юл аласағын асыҡ белде. Ләкин уға тиклем кесе ватанын ҡайтып бер күрергә тейеш. Шунһыҙ йәне тыныслыҡ тапмаясаҡ.

* * *

Бәләбәй, әлбиттә, үҙгәргән. Һәр ерҙәгесә, бында ла һуғыш хәсрәте оҙаҡҡа һеңгән. Емерек өйҙәр, ташланған баҡсалар, бөлгөнлөк... Тормош ҡабат гөрләһен өсөн күпме ваҡыт кәрәк булыр? Бында уны таныған кеше юҡ, Мәгүбә үҙе лә таныш-тоношон осратманы. Сит яҡтарҙа күп йөрөһәң, тыуған ер ҙә ят була. Әсләм ни хәлдә икән? Уның фронтта китеп, оҙаҡ та үтмәй имгәнеп ҡайтыуын һәм ҡайтыу менән уға партия эшен ҡабат тапшырыуҙарын ишеткәйне Мәгүбә. Ике туған Тәлиғә апаһы уға тыуған яҡтары менән араны өҙөргә бирмәй, һирәк-һаяҡ хәбәрләшеп торалар. Әле ҡайтҡанда ла йөҙөн сырыш баҫҡан мөләйем апаһы ҡосаҡ йәйеп ҡаршыланы: "Кал, йәнекәй, бер аҙға, - тип өгөтләй ул. - Бында ла һиңә эш етерлек". Ә Мәгүбәне һаман күк йөҙө үҙенә саҡыра, шул теләк йөрәкте татлы һыҙып ала.

Кемдер ишек шаҡыны. Өйҙәгеләр: "Ин!" - тиһәләр ҙә, инергә ашыҡманылар. "Берәй әбейҙер", - тип Мәгүбә ярҙамға ашыҡты. Уғаса булмай, шығырлап ишек асылды. Мәгүбә таныш түгел аҡһаҡ иргә ҡарап алды ла, Тәлиғә апаһына табан боролдо, шунан, тертләп тигәндәй, кире ҡайырылды.

- Әсләм.

- Эйе, был мин, Мәгүбәкәй.

Мәгүбәнең тыны ҡыҫылды. Тегe саҡтағы үҫмер малайҙан бер нәмә лә ҡалмаған. Ләкин сырамытырға була, шул уҡ ҡараш...

Класташтарға ҡамасауларға теләмәгән Тәлиғә апай сығып китте.

- Беҙ, яҡташтарың, һинең менән ғорурланабыҙ. Уҡыныҡ гәзиттән, - тип тамаҡ ҡырҙы Әсләм.

Мәгүбә был һүҙҙәрҙән уңайһыҙланды.

- Беҙ бөтәбеҙ ҙә Еңеү өсөн хәлдән килгәнсә көрәштек. Әсләм, һин дә, мин дә. Ә күптәр ҡайта алманы. Беҙҙең таныштар, туғандар...

Әсләм баш ҡаҡты. Үткәндәрҙе, класташтарын хәтерләп икеһе лә тын ҡалды.

- Һин оҙаҡҡамы? - Әсләм тел осондағы һорауын бирҙе.

Мәгүбә баш сайҡаны.

- Мәгүбә ҡал. Әйҙә, бергә булайыҡ.

Йөрәк дарҫлап типте, ләкин Мәғүбә ҡунағына тыныс ҡына яуап бирҙе:

- Был һүҙҙәрең ысын булһа, күптән әйтер инең.

Нисек аҡланырға белмәгән Әсләм ыҡ-мыҡ итте.

- Шулай булды... Мәктәптән һуң тура комсомол лидеры, унан урындағы партияны етәкләнем.

- Һин бит әле лә коммунист.

- Хәҙер минә барыбер, - әллә Әсләм күңелендә өмөт осҡоно ҡабындымы, тауыш нотаһы үҙгәрҙе.

- Юҡ, тап кирећенсә, хәҙер барыбер түгел, - Мәғүбә бер ҡәтғилек менән яуап бирҙе. - Һин балалар атаһы!

- Ташламам, ҡарармын.

- Ташлама, - тип өҙөп әйтте Мәғүбә.

- Мин һине танымайым... Ҡырыҫлыҡ бар, беҙ бит ят кешеләр түгел.

- Үҙгәрмәү мөмкин түгел. Һуғыш юлынан Берлинға барып еткәнсе күпме һәләк булған балаларҙы, етемдәрҙе күрергә тура килде. Улар бәхетһеҙлеге өсөн өлкәндәр яуаплы.

- Фашистар...

- Бөтәбеҙ ҙә. Ә бөгөнгө өсөн һин яуаплы. Бында ҡайтҡас та, шул уҡ фәҡирлек, хәйерсе етем балалар...

- Яралар уңалыр. Әҙәм балаһы бөтәһенә лә түҙә. Һеҙҙең ғаиләгә лә һынау кисерҙе.

Мәғүбә класташын ишетмәгәндәй дауам итте:

- Белоруссияла аҡылдан яҙған бер йәш кенә ҡатынды осраттыҡ. Ул "Оля, Оленька", тип һөйләнеп, бер урында әйләнеп тик йөрөй. Баҡтиһәң, ире партизан етәксеһе булған. Шуның өсөн фашистар ике йәшлек сабыйын аяғынан тотоп стенаға бәргесләгәндәр. Башы әҙәләп төшкәнсе. Бындай хәлдәр ҡабатланмаҫҡа тейеш. Бер баланың күҙенән йәш таммаһын. Мин аңлатып әйтә алдыммы?

Әсләм һүҙһеҙ генә баш ҡаҡты. Тын ҡалдылар. Ир йәнә һораулы ҡарашын төбәне:

- Бәләбәйгә тағы ҡайтырһыңмы?

- Ҡайтырмын.

- Ҡасан?

- Авиация заводы төҙөләү менән.

Был яуап ине.

* * *

Артабанғы юлы Мәғүбә Сыртлановаңы Грузияға алып китте. Ярты йылдан гәзиттә үҙенә "Советтар Союзы Геройы исеме бирелде" тигән Указды күреп, шул яҙыулы битте йөрәгенә ҡыҫты. Батырлыҡ, ҡаһарманлыҡ өсөн иң мәртәбәле исем. Унан да юғарыһы юҡ. Дәһшәтле һуғыш йылдарында яһалған ете йөҙ һикһән хәрби осошҡа булған баһа. Шулай ҙа Ватанға булған һөйөүен "герой" исеме менән баһаламаҙ Башҡортостан ҡыҙы. Мәғүбәнең Ватанға һөйөүе күпкә ҙурыраҡ. Барлыҡ наградаларҙан да ҙур ул. Ерҙе, йыһанды тотошлайы менән солғай торған бөйөк мөхәббәт. Сөнки был һөйөү уның исеменә үк һалынған. Мәғүбә - мөхәббәт тигәнде генә аңлата.

**(Аҙағы. Башы 25-26-сы һандарҙа).**

*КИНӘЙӘНЕ КИҢӘЙТЕП*

# ТОРМОШ РУЛЕГЕҘҘӘ КЕМ УЛТЫРА?



Рим Папаһы Америка Ҡушма Штаттарына барған. Уның ваҡыты бик тығыҙ икән, сөнки төрлө ҡалаларҙа никах үткәрергә кәрәк булған. Быңа ул Луизиана буйлап, американдарҙың транспорт сараһын мөмкин тиклем фантастик оҙонлоҡҡа һуҙа белеүҙәренә аптырап, лимузинда китеп бара. Папаның кәйефе шәп, тик үҙ ғүмерендә ул бындай машинаның руленә ултырғаны юҡ. Һәм ул водителгә өндәшә: "Минең рулгә ултырғым килә". Ябай водитель нисек инде Папа һынлы Папаға ҡаршы килһен? "Әлбиттә, изге ата", - тип яуап бирә.

Шулай итеп, Папа рулгә ултыра, ә водитель артҡы яҡҡа күсә. Папа ҙур ҡәнәғәтлек кисереп, тиҙлекте арттырғандан-арттыра. Сәғәтенә 90 миль менән барһа ла, 100-гә еткерһә лә, тиҙлек һиҙелмәй. Һәм, әлбиттә, ҙур тиҙлектә елдергәндәрҙе өнәмәгән Луизиана полицияһы юл ҡағиҙәләрен үтәмәүсене туҡтата. Папа машинаны юл ситендә туҡтата. Полицейский лимузин эргәһенә килә. Тәҙрәнән ҡарай. Һәм руль артында ултырған Папаны күрә! Артҡы ултырғысҡа ҡарап, унда ултырған пассажирға иғтибар итә.

- Бер минут көтөгөҙ, - ти полицейский. Шунан үҙенең машинаһына инеп, рацияны тоҡандыра, полиция начальнигы менән бәйләнешкә инә һәм хәбәр еткерә:

- Капитан, мин бик текә кешене туҡтаттым.

- Шулаймы ни? Кем инде ул? Бонни менән Клайдмы?

- Юҡ, уларҙан күпкә юғары.

- Йә, Хоҙай... Аль Капонены туҡтаттыңмы әллә?

- Юҡ. Унан күпкә еллерәк.

- Һин нимә, президенттың үҙен туҡтаттыңмы әллә?

- Юҡ, был әҙәм унан да юғары!

- Ҡуй сәле! Президенттан юғары кеше юҡ. Әйтә һал, кем ул?

- Кем икәнен белмәйем. Тик уны Папа үҙе алып йөрөй!..

Әйткәндәй, йор һүҙле халыҡ шағирыбыҙ Мостай Кәрим менән дә ошоға оҡшаш хәл булған. Был турала ул көндәлегенә яҙып ҡалдырған. Бер мәлдә улар Ҡайсын Кулиев менән бейек тау башында урынлашҡан ауылға килгәндәр. Машинаны бер өй алдында ҡалдырып, Ҡайсын өйгә инеп киткән. Күп тә үтмәй, Кулиевтың бөтә республикаға билдәле зәңгәр "Волга"һы янына бер йәш ҡатын килгән. Ул Ҡайсын инеп киткән өйгә күрһәтеп, шым ғына һораған:

- Ул ысынлап та Ҡайсын Кулиевмы?

- Эйе, тап үҙе, - тип яуап биргән Мостай.

- Ысын, улмы? - тип ныҡышҡан ҡатын. Ыңғай яуап алғас, енел һулап ҡуйған һәм һорай һалған:

- Ә һеҙ кем булаһығыҙ?

- Үҙегеҙ уйлап ҡарағыҙ, Ҡайсын һынлы Ҡайсын мине үҙ машинаһында алып йөрөгәс, мин кем булам!

Ҡатын ҡапыл артҡа сигеп:

- Беҙҙә уның исеме менән шаярмайҙар, - тип баш һелккән.

Ҡыҙыҡ хәлме? Кемгә нисек, минә былай бик ҡыҙыҡ тойолдо һәм бик бәйләнсек һорау тыуҙы. Тормош тип аталған машинағыҙҙың руленде кем ултыра? Үҙегеҙме, әллә...

**Радик ӨМӨТҠУЖИН әҙерләне.**

*ӨЛӘСӘЙЕМ ҺАБАҠТАРЫ*

# ТӘҘРӘ ТӨБӨНӘ МЕНҺӘ...



**Хоҡуҡ һаҡлау органдары балалар ғүмеренә бәйле хәүеф-хәтәр тураһында даими иҫкәртә, халыҡты киҫәтә тора. Шулай ҙа көндәр йылыныу менән бындай хәбәр-иҫкәрмәләр бермә-бер артҡан төҫлө. Мәҫәлән, тәҙрәләрҙе асып ҡуйыу ҙа хәүеф тыуҙыра бит.**

Башҡортостандың Ғәҙәттән тыш хәлдәр буйынса дәүләт комиссияһы биргән мәғлүмәттәргә ярашлы, тәҙрәнән ҡолап төшеп, ғүмерҙәре өҙөлгән балалар байтаҡ. Мәҫәлән, 2020 йылда бындай фажиғәле осраҡта 6 бала йән биргән, 43-ө имгәнгән, 2021 йылда 8-е йән биргән һәм 23-ө имгәнгән, 2022 йылда 10 бала йән биргән һәм 61-е имгәнгән, 2023 йылда 5-һе йән биргән һәм 19-ы имгәнгән. Ә быйыл 12 бала асыҡ тәҙрәнән ҡолап төшеп, өсәүһенең ғүмере өҙөлгән. Бындай фажиғәләрҙе кисектереү өсөн ата-әсәләргә асыҡ тәҙрәле бүлмәлә баланы ҡарауһыҙ ҡалдырмаҫҡа, тәҙрәне үлсәп асырға булышлыҡ иткән махсус ҡулайламалар ҡулланырға, себен-серәкәйҙе индермәү өсөн тәғәйенләнгән сеткалар ҡуйғанда ла һаҡ булырға кәңәш итәләр. Әммә тирә-яҡ донъяны тиҙерәк танып-белергә ашҡынған балаларҙы һаҡлап ҡалып өлгөрмәгән аяныслы осраҡтар артыҡ кәмемәй. Эскерһеҙ күңелле сабыйҙарға бәйле ошондай хәлдәр тураһында уҡығанда өләсәйемдән алған бер һабаҡ иҫкә төшә һәм, уны башҡалар ҙа белһә, бәлки, ғәзиздәрен юғалтмаҫтар ине, тип уйланам.

Бәләкәй балаға тәҙрә тупһаһына менергә ярамағанлыҡты тыйып, көйөп кенә аңлатып булмайҙыр. Ни тиһәң дә, әҙәм тәбиғәте менән ҡыҙыҡһыныусан, ярамағанға ынтылыусан. Шуға ла өләсәйем тәҙрә тупһаһына менергә, унда ултырырға, баҫырға ярамағанлыҡты былай тип аңлатыр ине: баҡтиһән, тәҙрә төбөнә фәрештәләр ҡуна икән! Кешенең ике иңбашына ултырып, яҡшы һәм яман ғәмәлдәрен яҙып арыған фәрештәләр нәҡ тәҙрә тупһаһына ултырып ял итә. Улар тәҙрә төбөндә ултырғанда йортҡа нур һибелә, ҡот ҡуна, йоҡлағанда матур төштәр керә һәм хыялдар тормошҡа аша. Тәҙрә тупһаһына менһән, күҙгә күренмәһә лә, шунда ял итеп ултырған фәрештәне имгәтеүең бар икәнен иплəп кенә төшөндөрә торғайны өләсәйем. Әкиәт кеүек итеп ҡат-ҡат һөйләнгән был хәбәр иҫтә ҡала, ә инде эскерһеҙ, изгелекле бала күңелендә тәҙрә төбөнә яҡын бармау ниндәйҙер ҡаты тыйыу булып түгел, ә фәрештәне уйлап, уға игелек итеү кеүек уйылып ҡала. Һәр хәлдә, минең күңелемдә өләсәйемдең ошо һабағы нәҡ шундай йылы хәтирә булып һаҡланып ҡалған. Заман балалары башҡа, бөтә нәмәне белеп тыуа һәм төрлө хәрәфәткә ышанып та бармайҙар, тиһәләр ҙә, улар һәр яңы мәғлүмәткә асыҡ, ҡайһы осраҡта сит ил әкиәттәренән килгән йәйғорло һынармөгөҙ, теш фейһы кеүек заттар барлығына ла ышана бит. Тәҙрә төбөндә ял иткән фәрештәгә лә ышанырҙар, үҙҙәрен хәүефтән араларҙар, моғайын.

**Камила ҒӘЛИЕВА.**

*УЙМАҠ ХИКӘЙӘ*

# ӘСЕ ҠОРОТ



Беҙҙән урьяҡҡа ҡарай дүрт өй юғары Хәбирә апайҙар йәшәне. Шыршы байрамын ярата ине ул, көтөп ала ине, шуға Октябрь байрамы үтеү менән өй түренә шыршы индереп ултырып, шуны биҙәргә керешә. Ул саҡта шыршы уйынсыҡтарына ҡытлыҡ булғанға күрә апайыбыҙ ҡағыҙҙарҙан семәрләп ҡар бөртөктәрен эшләй, буяғандарын тегеҙ итеп киҫеп сылбырҙар теҙә, әтәс, айыу, ҡуяндар ҙа ҡағыҙҙан. Ылғый барып йөрөгәс, бөләбеҙ, декабрь аҙағы етеүгә шыршы апаруҡ күркәмләнә, ҡупшылана. Юҡ, быныҡ менән генә биҙәү мәшәҡәттәре бөтмәй, тамамланмай әле, 31 декабрь көнө өҫтәп, ҡағыҙ киҫәктәренә йомарлап шыршыға манпасый, баш бармаҡтай камауай шәкәр, бал ҡалаҡ ҙурлыҡ йәш ҡорот йомарсыҡтары тағыла. Былары кемдәр өсөн, тиһегеҙме? Әлбиттә ҡунаҡҡа саҡырылған эт өйөрө балалар өсөн!

Шулай итеп, йылдың йылы Хәбирә апай беҙҙең тирәләге балаларҙы шыршы байрамына йыя. Етәкләшеп, шыршы тирәләй әйләнгән булабыҙ шунда, белгән йырҙарыбыҙҙы һуҙабыҙ. Айырым баҫып шиғыр һөйләргә әүәҫтәргә, башҡаларға ҡушылмай йыр йырлаусы маһирҙарға бүләккә теге шыршыға тағылған тәмләкәстәр тотторола. Ҡотом, фартым булмағас, гел минә йәш ҡорот эләгә лә ҡуя, шиғыр һөйләһәм дә, йыр йырлаһам да.

Сираттағы шыршы байрамы яҡынлашһа, мышҡылдарға тотонам:

- Эй, бармайым унда, ҡорот ашап туйып кителде!

Әсәйем ипле генә итеп өгөтләргә тотона:

- Ҡуй улайтма, балам, саҡырған ерҙән ҡалма, ҡыуған ерҙән ҡас, тиҙәр бит, бар әле, күр ҙә тор, был юлы өләшөнә, моғайын да, манпасый йә шәкәр эләгер!

Эйе, әлекте, ти, әпәт минә ғарҡ булғансы ҡорот һоғондорола...

...Яңы кинолар төшөрөлмәй хәҙер, хәтерҙә ҡалыр йырҙар ҙа юҡ, биҙәлгән шыршыларының дә йәмекото самалы. Бәләңгертлек, моңһоҙлоҡ әйләнә тирәлә, ихласлыҡ, йән елкенеүе лә тойолмай. Ә мин әсе ҡоротто һағынам. Шау ҡағыҙҙарға төрөнгән шыршыға тағылған әсе ҡоротто...

**Хәйҙәр ТАПАҠОВ**

*✓ Һыуыҡ көндәрҙә ул йылыта, эҫелә тирмә эсен һалҡында тота. Ғөмүмән, кейеҙ башҡорттарҙың алыштырғыһыҙ ҡаралтыһы, тиһәк, хата булмаҫ. Шуға ла һарыҡтарҙың һаны йылҡы башынан кәм булмаған.*



ИНТЕРНЕТТАН



# ИСЕМЕҢДӘ ҠАРАП...

## үҙеңде баһаларҙар

■ Takzdorovo.ru сайты белдереүенсә, быйыл Яңы йыл байрамдары мәлендә рәсәйҙәр спиртлы эсемлектәрҙе аҙыраҡ ҡулланған. Үткәрелгән һорау алыуҙарҙан күренеүенсә, 34,7 процент кеше йыл дауамында алкоголде һирәк эсә, 23,2 проценты бөтөнләй эсмәй. Яуап биреүселәрҙең 19,3 проценты ҡышын һирәгерәк эсеүен белдергән. Ҡышын 8,3 процент кеше күңелһеҙ булған өсөн, ә 4,4 проценты йылынып өсөн эсә.

■ Исемегеҙҙе әйтеүе ни тиклем еңел булһа, шул тиклем эшкә урынлашыу һәм яңы дуҫтар табыуы еңелерәк буласаҡ. Нью-Йорк һәм Мельбурн университеттары тикшеренеүселәре бындай ҡыҙыҡлы һығымтаға үткән һайлауҙарҙың һайлау бюллетендәрен өйрәнгәндән һуң килгән. Исемдәре еңел әйтелгән сәйәсмәндәр башҡа оппоненттарына ҡарағанда күберәк тауыш йыйған. Тикшеренеүҙәрҙең авторы Саймон Лахам билдәләүенсә, бында исемдең оҙонлоғо ла, уның "сит тел"дә яңғырауы ла түгел, ә тап уның еңел әйтелеүе мөһим.

■ Бөтөн донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы һәм Еврокомиссия белгестәре белдереүенсә, үлем һәм ауырыу тыуҙырыу сәбәптәре исемлегендә беренсе урында бысранған һауа, икенсе урында тауыш тора. Баҡтиһәң, тауыш хатта йоҡлаған саҡта ла ҡан баҫымын, стресс гормондары күләмен күтәрә икән. Яйлап был ауырыуҙар ҡан тамырҙарының тарайыуына һәм йөрәк ауырыуҙарына килтереүе ихтимал.

■ Британия тикшеренеүселәре фекеренсә, төрлө проблемаларҙан ҡотолоу өсөн картиналар галереяһына йыш йөрөү ҙә етә. Бигерәк тә донъя һынлы сәнғәте ҡомартҡылары кеше психикаһына ыңғай тәьҫир итә. Ғалимдар үткәргән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, Клод Моне йәки Сандро Боттичелли кеүек бөйөк рәссамдарҙың һүрәттәрен ҡараған саҡта кешенең баш мейеһе әүҙемлеге ғашиҡ булғандағы мейе торошона оҡшаған була. Бынан тыш, тикшеренеүҙә ҡатнашыусыларҙың ҡанында домафин гармоны ла күберәк була, был гормон кеше ниндәйҙер кинәнес кисергәндә бүленә. Бындай реакция тикшереүҙәрҙә ҡатнашыусының һәр береһендә күҙәтелә. Эксперттар әйтеүенсә, сәнғәт өлгөләре ҡурҡыу, тынысһыҙланыу кеүек тойғоларҙан арынырға һәм хатта ауыртыуҙан ҡотолорға ярҙам итә.

■ Имбир тамырында 3 процентҡа тиклем эфир майҙары һәм күп төрлө аминокислоталар бар. С, А, В1, В2 витаминдары, шулай уҡ цинк, кальций, калий, натрий, тимергә бай был тәмләткес баш мейеһен кислород менән байыта һәм артериаль ҡан баҫымын төшөрә, матдәләр алышыныу процесын нормалләштерә. Имбир сәйен бигерәк тә миҙгелле сирҙәр киҫкенләшкән ваҡытта эсергә тәҡдим итә белгестәр.

■ Британияның Бристоль университеты ғалимдары әйтеүенсә, баланың аҡыл ҡеүәһе үҫеше уның бәләкәй сағында нисек туҡланыуына бәйле. Өс йәшкә тиклем "зарарлы" аҙыҡ-түлек ашаған балаларҙы биш йылдан һуң тикшереп ҡарағандар һәм интеллект коэффициентының тиҫтерҙәренекенә ҡарағанда түбәнерәк булыуын асыҡлағандар. Ғалимдар әйтеүенсә, өс йәшкә тиклем балаға "дөрөҫ" аҙыҡ биреү мөһим, сөнки мейе йәшәүҙең тәүге өс йылында әүҙем үҫешә.

ҠУЛ БЕЛГӘН ШӨҒӨЛ

# ӘСӘНӘН КҮРГӘН...

## кейеҙ баҫҡан

**"Кейеҙ ҡалынлығы беләккә төшә", ти башҡорт халыҡ мәҡәле. Кейеҙ баҫыу башҡорттарҙың бик боронғо кәсептәренең береһе булыуы бер кемгә лә сер түгел. 1771 йылда уҡ Иоганн Готлиб Георги башҡорт ерҙәре буйлап үткән экспедиция яҙмаларында ла был хаҡта әйтеп ҡалдырған: "Тирмәне ябыу, аҫтыңа түшәү, бурка йәки икенсе өҫ кейеме, эйәр аҫтына һалыу һәм башҡаһы өсөн йөндән кейеҙ баҫалар. Йәғни тетелгән йөндө сепрәккә баш бармаҡ ҡалынлығында йәйеп һалып, эҫе һыу һирпеп, сепрәге менән ҡуша баҫалар һәм тағы эҫе һыу һирпәләр, йәнә баҫалар, йөн ныҡ итеп йәбешеп ятҡансы бар көстәренә тапайҙар".**



Ҡышын ҡаты һыуыҡтар, йәйен үтә эҫе булған башҡорт ерҙәрендә кейеҙһеҙ тормош көтөү ауырға тура килер ине. Сөнки һыуыҡ көндәрҙә ул йылыта, эҫелә тирмә эсен һалҡында тота. Ғөмүмән, кейеҙ башҡорттарҙың алыштырғыһыҙ ҡаралтыһы, тиһәк, хата булмаҫ. Шуға ла һарыҡтарҙың һаны йылҡы башынан кәм булмаған. Кейеҙгә бәйле йолалар ҙа бихисап. Ошо һәм кейеҙгә ҡағылышлы башҡа мәғлүмәттәрҙе туплау өсөн һәм боронғо кейеҙҙе ҡабатлап баҫыу маҡсаты менән Милли музейҙың этнография бүлеге мөдире Лилиә Барлыбаева, фәнни хеҙмәткәрҙәр Гөлйемеш Ҡылысова, Айгөл Ҡужәхмәтова менән Өфө ҡалаһының 2-се Балалар һынлы сәнғәт мәктәбе уҡытыусыһы, Рәсәй рәссамдар союзы ағзаһы Ләйсән Ғималова Әбйәлил районына фәнни экспедиция менән юлланды. Сөнки Әбйәлил районы кейеҙ баҫыу кәсебен, боронғо йолаларҙы тергеҙеүсе булараҡ күптән билдәлелек яулаған.

Эш сәфәребеҙҙе район үҙәгенән башланыҡ: Башҡортостан Республикаһының Милли музейы филиалы булған Аҫҡар ауылының Тыуған яҡты өйрәнеү музейында 1850-1860 йылдарға ҡараған боронғо кейеҙ һаҡлана. Нәҡ ошо ҡомартҡы беҙҙе үҙенә саҡырып килтерҙе лә инде. Бәҙерниса Балганованың 150*90 см ҙурлығындағы кейеҙенә уртаһында әүернә, дүрт яғына ҡусҡар һәм башҡа биҙәктәр һалынған. Музейҙың фәнни хеҙмәткәре Ләйсән Бисенғолова һөйләүе буйынса, кейеҙ өс метрлыҡ булған һәм Бәҙерниса инәй уны балаларына бүлеп бирер өсөн өскә ҡырҡҡан. Әлеге мәлдә музейҙа уның урта өлөшө генә һаҡлана. Беҙҙең экспедицияның төп маҡсаты ошо кейеҙҙең тулы күсермәһен эшләү ине. Был эшкә тотонорҙан алда райондағы кейеҙ баҫыу оҫталарының ҡул эштәре менән танышып сығыуҙы кәрәк тип таптыҡ һәм Дауыт ауылына юлландыҡ. Бында Шәүрә Кәримованың йортона килеп ингәс тә уның әсәһе Әлфиә Ғайсина туплаған үҙенсәлекле музейға юлыҡҡандай булдыҡ. Шәүрә ханым самауырҙар, еҙ һәм ағас һауыт-һабалар, йөн эшкәртеү ҡулайламалары кеүек боронғо әйберҙәр менән бергә Әлфиә инәйҙең һоҡланып туйғыһыҙ ҡул эштәрен дә ҡәҙерләп һаҡлай: балалар һәм ололар, хатта ҡурсаҡтар өсөн милли кейемдәр, юрған, яҫтыҡ, балаҫ, сергетыш, түшәк тартма, сарыҡ, боронғо сулпылы сәсүрмес һәм һарауыс. Әйткәндәй, һарауыстың нисәнсе йылдарҙа эшләнеүе билдәһеҙ, шулай ҙа: "Өлкән өләсәйем Мәғрифәнән ҡалған тип беләм. Ҡул эштәренә маһирлыҡ тап унан күскән беҙгә. Әсәйем шулай уҡ аш-һыуға, милли ризыҡтар әҙерләүгә лә оҫта ине", - тип йылы хәтирәләре менән бүлеште Шәүрә Ғәли ҡыҙы. Әлфиә инәйҙең тынғыһыҙ башҡорт ҡатыны икәне хатта фотоһүрәттәрҙә лә анығ сағылған төҫлө. Һөйләшкән арала Шәүрә Кәримованың үҙе кейеҙ баҫмаһа ла, башҡа ҡул эштәренә маһир булыуы асыҡланды. "Һатмайым, күңел ҡушыуы буйынса һәм бүләккә биреү өсөн түш биҙәүестәре, ҡашмау, сәйләндәрҙән бәйләү техникаһында төрлө әйберҙәр эшләргә яратам", - ти ул.

Киләһе туҡталышта беҙҙе башҡорт халҡының боронғо кәсебе - кейеҙ баҫыуҙы районда ғына түгел,

ҺӨНӘРМӘНДӘР МӘКТӘБЕ

# БАШҠОРТ АҪАЛЫ БАЛАҪЫ



Аҫалы балаҫ музейындағы уйҙар

Махсус биләмәлә "Башҡорт аҫалы балаҫтары" музейы урын алған: гран-при бүләгенә лайыҡ аҫалы балаҫтар күргәҙмәһе теҙелгән, иң күренекле оҫталарҙың фотогалереяһы һәр йыл тулылана, яңырып тора. Оҫталар галереяһын иҫтәлекле экспонаттар тәшкил итә: "Быуаттарҙы ялғар аҫыл еп" республика фестиваленә нигеҙ һалған данлыҡлы балаҫсыларҙың фоторәсемдәре, тәржемәи хәле - биографияһы, уларҙың уникаль эш үҙенсәлектәре сағыла. Бында башҡорт аҫаларын ижад иткән милли халыҡ сәнғәте хаҡында уникаль тарихи һәм фәнни мәғлүмәт туплана.

Башҡортостан Мәҙәниәт министрлығы янындағы Республика халыҡ ижады үҙәге һәм "Урал" галереяһы Әлшәйҙәге фестиваль-конкурстарға ҙур әһәмиәт бирә, башҡорт аҫалы балаҫының феноменаль күренеш кенә түгел, милли хазина булыуы яңынан-яңы оҫталарҙың эшендә асыҡ сағыла. ЮНЕСКО ҡарамағындағы Донъяның матди мәҙәниәте өлгөһө тигән ҡурсыулы ярҙам күрһәтеү, гранттар бүлеү ҙә район мәҙәниәт бүлеге юллауы һәм республиканың мәҙәниәт етәкселеге тарафынан башҡарыла. "Башҡортостан һуҡма балаҫтары" тигән баш аҫтында тәүге күргәҙмә Күмертау ҡалаһында 1998 йылда үтә, уны ойоштороусыларҙың береһе Кәримә Кайдалова артабан ныҡышмалы һәм эҙмә-эҙлекле эшмәкәрлеге менән аҫалы балаҫты оло мәҙәни майҙанға сығарҙы һәм сәхнәгә күтәрҙе, тиергә мөмкин. Халыҡ ижады үҙәге был аҫыл һөнәр - аҫалап балаҫ һуғыу оҫталарының республика семинарҙарын башланы. Архангел, Ғафури, Миәкә, Стәрлетамаҡ, Йылайыр районддарында, Сибай ҡалаһында балаҫсылар Әлшәйҙәге кеүек асыҡ конкурстар-күргәҙмәләрҙә, оҫталыҡ дәрестәрендә ораша.

Фестивалдең төп таянысы һәм көсө - Әлшәй яғында, йәғни әүәл-әүәлдән ғаиләһе-әҡрәбәһе менән балаҫ һуҡҡан данлыҡлы оҫталарҙа. 2010 йылда башлап үткән тәүге район фестивалендә үҙе бер тамаша булып, 97 йәшлек Нәсимә Сиражетдинова бөтә ғаиләһе менән ҡатнашты. Ул үҙ ғүмерендә өс йөҙҙән ашыу балаҫ һуҡҡан, айбарлы хеҙмәт маһирлығы ҡыҙҙары Зәкирә менән Зөлфиәгә лә күскән. Уның оло ҡыҙы, Бәләкәй Аҡколой ауылында йәшәүсе Зәкирә Воронцова 2019, 2022 йылдарҙа республика фестивалендә гран-при бүләге яуланы. Оҫтаның икенсе ҡыҙы Зөлфиә Бикбулатова уҙған 2023 йылда уникаль һөнәри маһирлығы өсөн шулай уҡ гран-при бүләгенә лайыҡ булды. Зәкирә Воронцова өйрәткән мәктәп уҡыусылары төркөмө быйылғы 2024 йылда тиҙ аҫалау ярышында ла төп еңеүсе булды.

✓ ***Беренсе ҡағиҙә, башҡорт балаҫындағы аҫаларҙың традицион формаһын, рәүешен, биҙәген ҡәтғи һаҡлау. Икенсе ҡағиҙә, ике йылға бер үтә торған фестивалгә бары тик өр-яңы балаҫтар ғына ҡабул ителәсәк.***

республикабыҙҙа ла тәүгеләрҙән булып тергеҙгән Рыҫҡужа ауылы оҫтабикәһе Латифа инәй Мостафина ҡаршы алды. Әлеге көндә оҫтабикә үҙе баҫҡан кейеҙҙәрҙән тыш, әсәһе Ильясова Фатима Йәмилхан ҡыҙы бирнәлеккә тип баҫып биргән эске балаҫ, урын балаҫтарын (буй балаҫ) һәм сергетышты ҡәҙерләп һаҡлай. Уның хәтерләүенсә, 1994 йылда тәүгеләрҙән булып ауылдағы ҡатын-ҡыҙҙар менән берлектә кейеҙ баҫыу эшен башлап ебәрәләр. "Мөхлисә Ғималова, Вәсилә Мостафина, Ғәйнур Латипова, Зилдә Моталова, Маһира Басирова, Йәүҙә Камаловалар менән көнөнә 2-3 кейеҙ баҫҡан саҡтарыбыҙ ҙа булды", - тип береһен дә ҡалдырмаҫҡа тырышып теҙеп китте Латифа инәй. Уның ҡыҙы Гөлфиә Хәкимова ла ҡул эштәренә маһир: ултырғыс түшәге - ҡораҡ тегә, футболкаларға буяуҙар менән заманса биҙәүестәр төшөрөп һата.

Баҫыласаҡ кейеҙебеҙгә биҙәк һалыу өсөн йөндө Исхаҡ ауылынан оҫтабикә Зөлфирә Махийәнова буяп әҙерләне. Ул йөндө һарыға буяу өсөн һуған ҡабығы ҡулланған, ә йөндө ерек ағасының нәҡ июнь айында һыҙырылған туҙы менән ҡуша һыуға һалып ҡайнатып, ҡыҙыл һәм алһыу төҫкә буяп ала. Зөлфирә ханым 2006 - 2021 йылдарҙа "Кейеҙ йорто"нда оҙаҡ йылдар кейеҙ баҫып, ярайһы уҡ ҙур тәжрибә туплаған оҫталарҙың береһе. Был "Кейеҙ йорто" Әбйәлил районы мәҙәниәт йорто һәм тирә-яҡтағы оҫтабикәләр тырышлығы менән Буранғол ауылында булдырылған оҫтахана ине. Ҡыҙғаныҫҡа күрә, уның ишектәре хәҙер бикле. Тотош республикаға билдәлелек яулаған, федераль һабантуйҙарҙың биҙәге булған "Кейеҙ йорто"ноң яҙмышы шулай тамамланыуы күңелдәрҙе өйкәй...

Артабан беҙ Әбйәлил районының мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре Зифа Ҡужәхмәтова, Фатима Хәкимова, Зөлфирә Махийәнова, Фәриҙә Уйылданова, Ләйсән Бисенғолова менән берлектә Амангилде ауылында йәшәүсе кейеҙ баҫыусы Ғәшүрә Әбүбәкерова йортона юл тоттоҡ. Күрше Үтәгән ауылында тыуып үҫкән Ғәшүрә Зәйнулла ҡыҙына кейеҙ баҫыу өләсәләре Сафура һәм Бәҙемша, Рыҫҡужа ауылынан булған әсәһе Әминәнән ҡалған һөнәр. Боронғолар балаларҙы егәрле итеп тәрбиәләү өсөн бар эшкә лә өйрәтергә тырышҡан. "Ваҡытында кейеҙҙән тирмәләр эшләп, балаларымды аяҡҡа баҫтырҙым", - ти Ғәшүрә Зәйнулла ҡыҙы. Уның ҡыҙы ла, килендәре лә, ейәнсәрҙәре лә кейеҙ баҫыу серҙәренә күптән төшөнгән. Йәйгеһен ҡапҡа эсендә, ҡышҡыһын мунсала баҫалар кейеҙҙе. Бергәләшеп йыйылһалар, матур биҙәкле кейеҙ баҫыу уларға бер ни тормай. Ғәшүрә Әбүбәкерова оло ғорурлыҡ менән балаларының ҡул көсө һалынған, зауыҡ менән биҙәлгән ҡалын кейеҙҙәрҙе беҙгә лә күрһәтте. Уның өйөндә 1912 йылғы әсәһе Әминә Әбүбәкерованан ҡалған балалар карауаты өсөн әҙерләнгән кейеҙ ҙә ҡәҙерле әйберҙәр менән бергә һаҡлана. "Кейеҙҙең яҡшы сифаттары күп, ул йылыны, һалҡынды тотоуҙан тыш, йыуғандан һуң тиҙ кибә. Шуға ла әрһеҙ, тотоноу өсөн уңайлы булған", - ти оҫтабикә.

"Сират беҙгә етте", тип эшкә тотондоҡ. Йорт хужаһы тейешле урындыҡ әҙерләп, мунсаһын яғып көтөп торған. Тетелгән көҙгө һарыҡ йөнөн 7-8 сантиметр ҡалынлыҡта тауар өҫтөнә йәйеп һалдыҡ. Ғәшүрә инәй, йөн араһында яҙғы йөндәрҙе лә күрә һалып, айырырға ҡушты. Сөнки яҙғы йөн тик бейәләй-ойоҡбаш, шәл кеүек бәйләм өсөн яҡшы, ә кейеҙ булып йәбешеп ятмай. Йәйелгән йөн өҫтөнә һыу һирпеп, ҡалын бүрәнәне буласаҡ кейеҙгә төрөп, һығып бәйләп, 3-4 кеше ҡул менән баҫып тәгәрәтергә тотондоҡ. Кейеҙ баҫыуҙың йәнә мөһим ҡағиҙәһе бар: яман һүҙ һөйләргә ярамай. Юғиһә, кейеҙ йәмһеҙ килеп сыға икән. Оҫтабикәләр быға үҙ тәжрибәләренән сығып та инанған. Сират биҙәк һалыуға етте. Буялған йөндө ҡалын итмәй генә һуҙып, тейешле урындарға һалып сыҡтыҡ. Шул арала Амангилде ауылының мәҙәниәт йорто, "Сәсмәүер" халыҡ фольклор ансамбле етәксеһе Зифа Ҡужәхмәтова кейеҙҙең дауалау көсө хаҡында ла һөйләне. Элек, ғилми медицина үҫешмәгән ваҡытта, ауырыуҙарға кейеҙҙең файҙаһы күп тейгән. Мәҫәлән, тулғағы тотоп оҙаҡ бушана алмаған ҡатын-ҡыҙҙы кейеҙгә төрөп һалғандар, тыуасаҡ бәпестең атаһы өс тапҡыр кейеҙгә төрөлгән ҡатын өҫтөнән ашаҡлап үтергә тейеш булған. Шул саҡта әсә кешенең хәле яҡшырып, бәпесте ҡабул иткәндәр.

Биҙәктәрҙе һалып бөткәс, өҫтөнә йәнә эҫе һыу һирпеп, кейеҙҙе төрлө яҡтан ҡат-ҡат баҫырға тура килде. Беҙгә, сибек беләкле ҡыҙҙарға, оло апайҙарҙың таһыл эшенә хайран ҡалып ҡарап торорға ғына ҡалды. Улар кейеҙҙе алмаш-тилмәш баҫты, сөнки беләк көсө лә тигеҙ булырға тейеш икән. Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының уңған да, шул уҡ ваҡытта көслө лә булыуҙарына шик юҡ. Кейеҙебеҙ әҙер булғас, уны ағым һыуҙа сайҡатып киптерергә генә ҡалды. Эш тамамланыу менән Зифа Ҡужәхмәтова өмәселәрҙе бай өҫтәл әҙерләп, ыҫланған ҡоротло Әбйәлил бишбармағы менән һыйланы. Кейеҙ баҫыу нескәлектәрен өйрәнеүҙә үҙ өлөшөн индергән Әбйәлил уңғандарына Милли музей директоры Рөстәм Әхмәт улы Исхаҡов исеменән рәхмәт хаттары тапшырылды.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Боронғонан ҡалған ҡомартҡы-хазиналарҙы ҡәҙерләп һаҡлау, киләһе быуынға еткереү зарур. Унан да бигерәк, ошо зауыҡлы әйберҙәрҙе йәш быуын үҙ ҡулдары менән дә эшләй алырға тейештер. "Атанан күргән уҡ юныр, әсәнән күргән тун бесер", тип юҡҡа ғына әйтмәгән боронғолар. Был йәһәттән Әбйәлил районы ҡатын-ҡыҙҙары әүҙем эш алып барыуын күреп шатландыҡ. Һәм башҡорт кейеҙе хаҡында бай мәғлүмәт, онотолмаҫ тәьҫораттар, БР Милли музейына үҙебеҙ баҫҡан кейеҙҙе алып, ырыҫ-бәрәкәткә төрөнөп ҡайттыҡ.**

**Айгөл ҠУЖӘХМӘТОВА,**
**БР Милли музейы этнография бүлегенең ғилми хеҙмәткәре.**

2010 йылдағы тәүге фестивалгә әлшәйҙәр үҙҙәренең яҡташтарын - Дим-Өршәк буйының балаҫ һуғыусыларын йыйҙы: онотолмаҫ сағыу ижадлы оҫталарҙы бөтә Башҡортостан күрҙе. Аҫалар йыйынының тәүге ҡарлуғастары: Гөлзәйнәб Кирәева (Иҫке Сәпәш ауылы), Гөлсөм Ғабдрәхимова (Сурай ауылы), Миңнегөлсөм Ғәлиуллина (Аҡбирҙе ауылы), Зөһрә Әхмәтова (Ҡыпсаҡ-Аҫҡар ауылы), Миңнесәүиә Муллағәлиева (Иҙрис ауылы), Гөлсөмбаныу Ғабдрәхимова (Ҡармыш ауылы) - улар ғүмер буйы бер нисә йөҙәр балаҫ һуғып дан алған. Һәр оҫта үҙ балаҫтары, аҫалар ҡоролған урын-станогы янында ғаиләһе менән күргәҙмәгә килгәйне. Улдары һәм ҡыҙҙары, килендәре, ейән-ейәнсәрҙәре - һәммәһе лә балаҫ һуға, ысынтылап, еренә еткереп аҫалай белә. Был һөнәрҙең бик тә ғәзиз һәм кәрәкле икәнен яҡшы аңлай, хәләл көсө менән донъяны матурлай, ил-йортто биҙәй, тормошон ҡотайта... Уларҙың ябай һәм ынтымат хеҙмәте бөтә мәшһүрлеге, донъяуи әһәмиәте менән халыҡты тетрәндерҙе. Оло быуын балаҫсылар береһенән-береһе ғибрәтле һәм тәфсирле иҫтәлектәрен дә һөйләне. Балаҫ өсөн төрлө төҫкә манылған аҫыл йөн ептәрҙе улар магазиндан-баҙарҙан да алмаған, әҙер ептәр бер ҙә һауанан да килеп төшмәгән. Бөтә ғаилә менән тәрбиәләгән һарыҡтың йөнө, өй эсе менән яҙғы йөндө - баҡтаны ҡырҡыу, уны таҙартыу, йыйыу, тетеү, иләү, сиратыу, йомғаҡлау, буяу эштәре, балаҫ һуғырға яраҡлы буй еп оҙатыр өсөн киндерҙән йә кизе-мамыҡтан ныҡлы еп әҙерләү, унан килеп тотош бер ҡатмарлы ҡоролма булған һуғыу урынын булдырыу (көрөҫ, тараҡ, тәбелдерек, урҙа, ҡолға, һоҫа кеүек "серле кәрәк-ярағын" әйтергә лә түгел) - барыһы ла кәрәк... Ошо эштәрҙе аралап ҡына һанап сыҡҡанда ла, ҡатын-ҡыҙҙы ни хәтле бөтмөр, егәрле һәм булдыҡлы итеп яратҡаны өсөн Аллаһыға мең шөкөр итәһең.

## Әлшәй фестивале бөгөн һәм иртәгә

Әлшәй фестиваленең үҙенә генә хас тәртип-ҡанундары ла бар, шулай уҡ һәр йыйын һайын яңылыҡтар ҙа индерелә. Беренсе ҡағиҙә, башҡорт балаҫындағы аҫаларҙың традицион формаһын, рәүешен, биҙәген ҡәтғи һаҡлау. Уйҙырма яһалма биҙәктәр һуғылған эштәр конкурсҡа ҡабул ителмәй. Икенсе ҡағиҙә, ике йылға бер үтә торған фестивалгә бары тик өр-яңы балаҫтар ғына ҡабул ителәсәк. Өсөнсө ҡағиҙә, конкурстарҙа бары тик һарыҡ йөнөнән һуғылған аҫалы балаҫтар ғына ҡатнашасаҡ. Уларҙың буяуы ла боронғоса ысул менән әҙерләнгән, тәбиғи буяу булһа, балаҫтың халыҡсан төҫтәре юғары баһаланасаҡ. 2024 йылғы баһалама төркөмөнөң был тәҡдиме менән балаҫсылар бер һүҙҙән килеште. Дүртенсе ҡағиҙә, фестиваль бөгөнгө көн өсөн ҡыҙыҡлы, зауыҡлы, килемле булырҙай эштәрҙең айырым күргәҙмәһен дә булдыра: тәбиғи-натураль йөндән мотлаҡ аҫалап һуғылған балаҫ, һуҙма, өҫ кейеме, сувенир, картина рәүешендә әйберҙәр айырым ҡараласаҡ. Бишенсе ҡағиҙә, аҫалы балаҫ һуғыу мәктәптәре эше айырым ҡарала һәм һәр оҫтаның йәштәргә лә өйрәтеүе мөһим тип баһалана.

Әлшәй фестивале үҙенең оҫталарын йылдан-йыл барлай, эштәрен-балаҫтарын иҫәпкә ала, йәштәрҙе өйрәтеү-уҡытыу буйынса даими эш яйға һалына, музей һәм күргәҙмәләр әүҙем эшләй, һуғыу ҡоролмалары алына.... Ләкин был мәңгелек һөнәрмәнлектең тышҡы күренеше генә әле, төп асылы - оҫталыҡ һәләте, ил яҙмышы, донъя именлеге менән бәйле. Аҫалы аҫыл балаҫтар бәхетле һәм өмөтлө тормош билдәһе бит.

**Сәрүәр СУРИНА.**

**(Аҙағы. Башы 26-сы һанда).**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ИЗГЕЛЕК ҺӘМ ГҮЗӘЛЛЕК ТУРАҺЫНДА ХАТТАР

## Йәш уҡыусыларға хаттар

Өлкән кешенең йәштәр менән һәр әңгәмәһе өгөт-нәсихәт уҡыуға әйләнә. Был һәр ваҡыт шулай булған һәм шулай ҡалыр ҙа, моғайын. Һүҙҙе ҡыҫҡа тоторға һәм үҙем өсөн иң мөһим нәмә тураһында ғына әйтергә тырышырмын - күҙаллауҙарым буйынса, үткән тормош тәжрибәм менән бүлешеү был.

Уҡыусы менән әңгәмәләрем өсөн хат формаһын һайланым. Был, әлбиттә, шартлы форма. Хаттарымды уҡығандарҙы дуҫтарым тип күҙ алдыма килтерәм. Дуҫтарға хаттар миңә ябай тел менән яҙырға мөмкинлек бирә.

Ни өсөн хаттарымды нәҡ ошо рәүешле урынлаштырҙым һуң? Мин уларҙа тәү сиратта маҡсат һәм тормош мәғәнәһе, үҙ-үҙеңде матур тотош тураһында яҙам, ә һуңынан беҙҙе уратып алған тирә-йүндең гүзәллеге, сәнғәт әҫәрҙәрендә асылған гүзәллеккә күсәм. Тирә-яҡтың матурлығын аңлау өсөн кеше үҙе лә күңеле менән матур, тәрән, тормошҡа дөрөҫ ҡарашлы булырға тейешлектән сығып нәҡ шулай эшләнем. Ҡалтыранған ҡулдар менән бинокль тотоп ҡарағыҙ әле - бер нәмә лә күрмәйәсәкһегеҙ.

## Беренсе хат
## Бәләкәйҙә - ҙур

**Матди донъяла ҙурҙы бәләкәйгә һыйҙыра алмайһың. Рухи ҡиммәттәр өлкәһендә иһә былай түгел: бәләкәй генә нәмәгә күпкә ҙурырағы һыя ала, ә әгәр ҙә ҙурға бәләкәйҙе урынлаштырып маташһаң, ҙур нәмә юҡҡа сыға ла ҡуя.**

Әгәр кешенең бөйөк маҡсаты бар икән, ул бөтә нәмәлә сағылыш табырға тейеш, хатта әһәмиәтһеҙ генә күренгәндә лә. Күҙгә күренмәгән һәм осраҡлыла намыҫлы булырға кәрәк: шул саҡта ғына оло бурысыңды үтәгәндә намыҫлы булырһың. Оло маҡсат кешенең бар булмышын ялмап ала, уның һәр ҡылығына йоғонто яһай һәм, алама әмәлдәр менән яҡшы маҡсатҡа өлгәшеп була, тип уйларға ярамай.

"Маҡсат әмәлдәрҙе аҡлай" тигән әйтем емергес һәм әхлаҡһыҙ. Быны Достоевский "Енәйәт һәм яза"ла асыҡ күрһәтә. Был әҫәрҙең төп геройы - Родион Раскольников риба биреүсе шаҡшы әбейҙе үлтереп, юғары маҡсаттарға өлгәшерлек аҡса табып, шул рәүешле кешелеккә яҡшылыҡ ҡылам, тип уйлай, әммә эстән һәләкәт кисерә. Маҡсат алыҫ һәм бойомға ашмаҫтай, ә енәйәт ысынбарлыҡта; ул ҡот осҡос һәм бер нисек тә аҡларлыҡ түгел. **Юғары маҡсатҡа түбәнсел саралар ярҙамында ынтылырға ярамай. Ҙурҙа ла, бәләкәйҙә лә бер төрлө намыҫлы булырға кәрәк.**

Уртаҡ ҡағиҙә: бәләкәйҙә ҙурҙы һаҡлау кәрәк, атап әйткәндә, фәндә лә. Ғилми хәҡиҡәт барыһынан да ҡиммәт һәм уға ғилми тикшеренеүҙәрҙең барлыҡ өлөштәрендә лә, ғалим тормошонда ла оҡшарға тырышырға кәрәк. Әгәр инде фәндә "ваҡ" маҡсаттарға - факттарға ҡарамаҫтан, "көс" менән дәлилләүгә, һығымталарҙың "ҡыҙыҡлығы"на, уларҙың нәтижәлелегенә йәки үҙ-үҙеңде үрләтеүҙең башҡа төрҙәренә ынтылһаң, ғалимдың юҡҡа сығыры ҡотолғоһоҙ. Бәлки, шунда уҡ түгелдер, әммә ахыр сиктә тап шулай буласаҡ! Алынған тикшеренеү һөҙөмтәләрен арттырып күрһәтеү йәки хатта факттарҙы саҡ ҡына боҙоп күрһәтеү башланып, ғилми дөрөҫлөк икенсе планға күсә икән, фән юҡҡа сыға, һәм ғалим үҙе лә иртәме-һуңмы ғалим булыуҙан туҡтай.

Һәр нәмәлә ҙурҙы тәүәккәл рәүештә һаҡлау кәрәк. Ул саҡта барыһы ла еңел һәм ябай.

**Дмитрий ЛИХАЧЕВ.**

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# 17 ИЮЛЬ - ЭТНОГРАФТАР КӨНӨ

**Этнограф көнө - Рәсәй ғалим-этнографтарының һөнәри байрамы. Уны бөйөк урыҫ этнографы, антрополог һәм сәйәхәтсе, Император Рус география йәмғиәте ағзаһы Николай Николаевич Миклухо-Маклайҙың (1846-1888) тыуған көнөнә арнап билдәләйҙәр. Колония халыҡтарын яҡлаусы, ҡолдар һатыуға һәм расизмға ҡаршы кеше - ул Иҫке донъяға Яңы Гвинея папуастарының йолаларын аса, 200-гә яҡын ғилми хеҙмәт яҙа, ватан антропологияһы һәм этнографияһына нигеҙ һала.**

Ҡайһы бер мәғлүмәттәргә ярашлы, Этнограф көнөн СССР-ҙа 1970-80 йылдарҙа Ленинград дәүләт университеты профессоры Рудольф Итс башланғысында билдәләй башлайҙар. Байрам экспедициялар мәленә тура килеүе лә уны тиҙ арала билдәле итә.

Этнография - халыҡтарҙы һәм башҡа этник берләшмәләрҙе, уларҙың килеп сығышын, составын, таралышын, көнкүрешен, мәҙәни-тарихи һәм халыҡ-ара мөнәсәбәттәрен, матди һәм рухи мәҙәниәтен өйрәнеүсе фән. Унда этногенезды - теге йәки был этностың килеп сығыу тарихын өйрәнеү айырым мөһим урын алып тора.

Башҡорттар тураһында тәүге тапҡыр гәрәп сәйәхәтселәре Сәллəм Тәржемән (IX быуат), Ибн Фаҙлан (X быуат), Әл-Мәсуди (X быуат), Әл-Бәлхи (X быуат), Әл-Андалузи (XII быуат), Иҙриси (XII быуат), Ибн-Сәйед (XIII быуат), Яҡут (XIII быуат), Ҡәҙүини (XIII быуат), Димәшҡи (XIV быуат), Абульфред (XIV быуат) телгә ала. Ғалим Рәшит әд-Дин (1247-1318 йылдар). Төркиәтсе Мәхмүд Ҡашғари бин Хөсәйен бин Мөхәмәт башҡорт теле тураһында яҙған. XIII быуаттың көнбайыш-европа сәйәхәтселәре Юлиан, Плано Карпини һәм Гильом де Рубрук, Константин Бағрянородный ҙа мәғлүмәт ҡалдыра. XVIII быуатта башҡорт халҡы тураһында этнографик мәғлүмәтте В.Н. Татищев, П.И. Рычков, И.И. Лепехин, П.С. Паллас, Георги Иоганн Готлиб йыйған һәм баҫып сығарған. XIX быуатта ла башҡорттар тураһында тарихи-этнографик материалдар йыйыу дауам иткән. Был ғалимдарҙың хеҙмәттәре тураһында, улар йыйған мәғлүмәттәр менән "Киске Өфө" гәзите уҡыусылары яҡшы таныш. Килһе башваҡыста ҡайһы бер билдәле башҡорт этнографтарын танырһығыҙ.




Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.

**26-сы һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Съезд. Сәғитов. Таған. Барби. Тәхет. Крузо. Агроном. Назар. Әрҙәнә. Ата. Бау. Ҡараҡ. Лупа. Ауыл. Йәйен. Есаул. Исем. Абонент. Аулаҡ. Һолобаш. Ҡортбаш.

**Вертикаль буйынса:** Асанбаев. Бураҡаева. Нужа. Ала. Серб. Бурһыҡ. Икмәк. Сәғәт. Балан. Еҙгорт. Ғиззәтуллин. Стела. Диван. Шеш. Төн. Ҡайма. Арба. Алҡа. Тир. Ҡунаҡ.

ХУЖАБИКӘГӘ

# ҠАУЫН ТӘМЕ ҠЫШҠА ҠАЛҺЫН



**Йәй бүләк иткән тәмле-татлы емеш-еләктәрҙе, йәшелсәне ҡышҡылыҡҡа ла һаҡлап ҡалдырыу тураһында һәр уңған хужабикә хәстәрлек күрәләр был мәлдә. Ундайҙарға ҡауындан да ҡышҡа әҙерләмә ысулдарын тәҡдим итәбеҙ.**

## Ҡауын һәм лимондан ҡайнатма

Татлы ҡауын менән лимондың әскелтем тәме бер-берећен тулыландырып, бик үҙенсәлекле тәмлекәс килеп сыға. Әйткәндәй, ҡауынға лимондан тыш, әфлисун һәм хатта лайм ҡушып та ҡайнатмалар әҙерләргә була. Был юлы ябай ғына ысулын тәҡдим итәбеҙ. Уны ҡоймаҡ һәм эремсек ҡабартмаһына ла, сыр һәм ит турамаларына ла ҡушып өҫтәлгә ҡуйырға була.

Ҡайнатма өсөн 1 кг ҡауындың ҡабығын әрсергә, эслеген ҙур булмаған шаҡмаҡтарға тураҡлап кәстрүлгә һалырға. 1 лимонды ҡабығы менән ваҡ ҡына итеп турап ҡушырға. Өҫтөнә 700 грамм шәкәр һибергә һәм һуты сыҡһын өсөн 3-4 сәғәткә ҡалдырырға. Шунан кәстрүлде утҡа ҡуйып ҡайнатырға, тағы ла 15 минут талғын утта тоторға. Һыуынғанын көтөргә. Тағы ике тапҡыр ошо уҡ рәүешле ҡайнатып, 15-әр минут талғын утта тотоп, һыуынғанын көтөп алырға. Өс тапҡыр шулай ҡайнатып-һыуытып алғандан һуң, алдан стериллә нгән банкаларға ҡойоп, ҡапҡасын ябырға һәм һыуынғас, баш түбән әйләндереп ҡуйырға. Татлы һәм хуш еҫле ҡауын ҡайнатмаһы әҙер!

## Консерваланған ҡауын

Был ысул татлы, бешкән ҡауынды ҡышҡа һаҡлап ҡалырға ярҙам итәсәк. Татлылығын шәкәр ярҙамында арттырырға мөмкин, уны күпме һалырға икәнде һәр хужабикә үҙе самаларға мөмкин. Был тәмлекәсте үҙен генә лә табынға ҡуйырға була, сиробын эремсеккә, йогуртҡа, туңдырмаға йәки бутҡаға ҡушып ашарға мөмкин. Әҙерләмә өсөн һәр береће 2,5-3 килограмлыҡ ҡауындар кәрәк.

2 ҡауынды уртаға ярып, орлоғон алып ташларға һәм ҡабығын әрсергә. Тураҡлап таҙа һәм ҡоро банкаларға һалып сығырға. Десерт өсөн әҙерләгәндә ваҡ шаҡмаҡтарға бүлеү унайлыраҡ була. Шунан кәстрүлгә 2,5 литр һыу ҡойоп, 1 кг шәкәр, 2,5 балғалаҡ лимон кислотаһы өҫтәргә һәм утҡа ҡуйырға. Болғата-болғата ҡайнап сыҡҡанын көтөргә, шәкәр тулыһынса ирергә тейеш. Ошо сиропты ҡауындар һалынған банкаларға тултырғансы ҡойоп сығырға, ҡапҡасын ҡапларға. Ҙур ғына кәстрүлдең йәки тастың төбөнә туҡыма йәйеп, банкаларҙы ҡуйып сығырға һәм һыу ҡойорға. Һыу банкаларҙың "яурынса"һына тиклем етеп торорға тейеш. Шунан ҡайнап сыҡҡанын көтөргә, утты талғынлатып тағы ла 10-15 минут ҡайнатырға. Артабан банкаларҙы һаҡ ҡына алып, ҡапҡастарын нығытып ябырға, баш түбән әйләндерергә һәм йылы юрған менән урап ҡуйырға. Һыуынғас, ҡауын әҙерләмәһен кәрәк урынға һаҡларға ҡуйырға.

## Ҡауын һәм банандан джем

Был татлы ризыҡты икмәккә һылап, эремсек ҡабартмалары, ялҡау эремсек билмәне, әсе ҡоймаҡ, ҡоймаҡтарға ҡушып ашау тәмле. Уны әҙерләү өсөн 1,5 кг ҡауынды әрсеп, ваҡ ҡына шаҡмаҡтарға телергә, өҫтөнә 800 грамм шәкәр һибергә һәм төнгөләккә ҡалдырырға. 1 лимондың ҡабығын әрсеп, һутын һығырға. Әрселәгән ҡабыкты һәм һутты ҡауынға ҡушып, талғын утта 25 минут ҡайнатырға. Шул арала иҙгес ярҙамында ҡауынды иҙеп сығырға була. 400 грамм бананды, тағы 1 лимонды ҡабығы менән ваҡ шаҡмаҡтарға бүлеп, ҡауын ҡайнаған кәстрүлгә һалырға. Талғын утта 30 минут тотҡас, утты уртаса күрһәткестән юғарыраҡ асып, тағы 20 минут ҡайнатырға. Килеп сыҡҡан ҡайнатманы блендер ярҙамында иҙергә, тағы бер ҡайнар хәлгә еткерергә һәм алдан әҙерләнгән стерилле банкаларға ҡойоп сығырға.

ЙӘЙГЕ СЕЛЛӘЛӘ...

# ҺЫУЫҠ СӘЙ...

## һыуһынды ҡандыра



**Һыуыҡ сәй - татлы һуттар һәм газлы һыуҙарҙы алмаштыра алыр файҙалы эсемлек. Был эсемлекте ғаиләлә барыһы ла ни тиклем яратып эсеүенә үҙегеҙ ҙә ғәжәпләнерһегеҙ әле.**

**Был юлы ете төрлө тәмле һыуыҡ сәй әҙерләү ысулы менән бүлешмәксебеҙ. Уларҙы байрам өҫтәленә ҡуйырға ла була.**

Айырым рецептарға күсерҙән алда һыуыҡ сәйҙәр әҙерләү буйынса дөйөм кәңәштәргә ҡолаҡ һалайыҡ:

- Бер бешерерлек сәйҙе дөрөҫ самалау өсөн түбәндәге ҡағиҙәгә таянығыҙ: 200-250 мл һыуға 1 балғалаҡ сәй.
- Бешерелгән сәй төрөнә ҡарап, һыуҙың эҫелеге лә төрлөсә булыуы ихтимал. Һалҡынсараҡ сәй әҙерләү өсөн башта һыуҙы ҡайнатып, 10 минут һыуынғанын көтөргә була.
- Сәй яҡшы сыҡһын өсөн 5 минут етә. Шунан да артыҡ тотмаҫҡа тырышығыҙ.
- Шәкәрҙе күпме һалыуҙы һәр кем үҙе самалай. Уның урынына бал, төрлө сироптар ҙа ҡулланырға була.
- Емеш-еләктең үҙегеҙгә оҡшағанын һайлағыҙ, шулай уҡ тәмләткестәр ҙә ҡулланырға була.

### Классик һыуыҡ сәй

Уны әҙерләү өсөн 700 мл һыу, 3 балғалаҡ ҡара сәй, 1 лимон, 1 ҡалаҡ шәкәр, 2 ботаҡ бөтнөк, 8 шаҡмаҡ боҙ кәрәк. Һыуҙы ҡайнатып, сәйҙе һалырға һәм шәкәр өҫтәп, 5 минут торорға һәм һөҙөргә. Лимон һутын, бер нисә бүлкә емешен, бөтнөк ҡушырға. Башта сәйҙе бүлмә температураһында һыуытып, шунан һыуытҡысҡа ҡуйырға. Эсемлекте боҙ киҫәктәре ҡушып, бөтнөк япрағы һәм лимон киҫәге менән биҙәп бирергә.

### Еләк һәм лайм менән йәшел сәй

Еләк бешкән мәлдә тәмле бәлештәр генә түгел, сәйҙәр ҙә әҙерләргә була. Бының өсөн 1 литр ҡайнар һыуға 4 балғалаҡ йәшел сәй һалып бешерергә, бер нисә минуттан һөҙөп алырға. 1,5 ҡалаҡ шәкәр ҡушып, эсемлекте һыуытырға ҡуйырға. 150 грамм еләк (баҡса еләген уртаға бүлеп), 1 лаймды нәҙек кенә итеп телеп, 2 ботаҡ бөтнөк менән бергә сәйгә өҫтәргә. Яҡшылап болғатырға һәм бер нисә сәғәткә һыуытҡысҡа ҡуйырға. Матур көршәккә һәм касаларға ҡойоп, табынға ҡуйырға була.

### Сафландырғыс шафталы сәйе

Июль-август айҙары - шафталы (персик) өлгөргән осор. Был эсемлекте иң бешкән, тәмле емештәрҙән әҙерләгәндә яҡшы. Бының өсөн 800 мл эҫе һыуға 4 балғалаҡ ҡара сәй һалып бешерергә, һөҙөргә. 1 ҡалаҡ шәкәр ҡушып һыуытырға. 2 шафталының һөйәген алып ташлап, блендерҙа иҙергә, тағы икәүһен бүлкәләргә телергә. Һыуынған сәйгә иҙелгән емеште ҡушып болғатырға. Шунан ҡырҡылған емеште, 1 ботаҡ бөтнөк, 10 боҙ шаҡмағы, ярты лимон һутын өҫтәргә.

### Ҡара көртмәле-лимонлы сәй

Ҡара көртмәле урынына ҡурай еләге йәки ҡарағат та ҡулланырға була. 2 балғалаҡ ҡара сәйгә 600 мл ҡайнар һыу ҡойорға, бешкәс, һөҙөргә. Ярты лимондың һутын һығып, 100 грамм ҡара көртмәле ҡушырға һәм ҙур булмаған һауытҡа һалып, талғын утта болғата-болғата быҡтырырға. Шунан һөҙөп алырға һәм шыйыҡ массаны әҙер сәйгә өҫтәргә. Сәйгә 1 ҡалаҡ бал ҡушырға. Эсемлеккә матурлыҡ өсөн бер нисә бөртөк ҡара көртмәле, лимон киҫәге һалып, боҙ шаҡмағы ҡушып, ҡунаҡтарға тәҡдим итергә мөмкин.

### Һыуыҡ каркаде

Был сәйҙе әҙерләү өсөн гибискустың 3 балғалаҡ таж япрағына 700 мл эҫе һыу ҡойоп бешерергә, шунан һыуытып, 300 мл алма һуты өҫтәргә. Һыуытҡыста тотҡас, 1 ботаҡ бөтнөк, 8 боҙ шаҡмағы һалып өҫтәлгә ҡуйырға була.

### Ҡыҙыл ҡарағат һәм әфлисун

4 балғалаҡ ҡара сәйгә 1 литр ҡайнар һыу ҡойорға, һөҙөргә һәм 1 әфлисун һутын һығып өҫтәргә. Түңәрәкләтеп теленгән тағы 1 әфлисунды, 150 грамм ҡыҙыл ҡарағатты, 4 балғалаҡ шәкәр ҡушып болғатырға һәм бер нисә сәғәткә һыуытҡыска ҡуйырға.

### Бөтнөк менән йәшел сәй

Был сәй тик йәшеллектән генә тора. 4 балғалаҡ йәшел сәйгә 800 мл ҡайнар һыу ҡойорға, 5 минут төнәтеп һөҙөргә. Йылымыс эсемлеккә 2 ботаҡ бөтнөк (мята), 1 лаймды киҫәктәргә телеп, икенсеһенең һутын һығып ҡушырға, 2 ҡалаҡ шәкәр өҫтәргә. Шунан һыуытҡысҡа ҡуйырға. Сәйгә 8 боҙ шаҡмағы ҡушып эсергә.

**Күреүегеҙсә, төрлө тәмле сәйҙәрҙе әҙерләүе ҡатмарлы түгел. Әйткәндәй, үҙебеҙсә, емеш-еләккә төрлө үләндәр ҡушып та һыуыҡ сәй эшләргә мөмкин. Күңелегеҙгә ятҡандарын һайлағыҙ һәм эҫе йәй көндәрен файҙалы сәйҙәр эсеп үткәрегеҙ.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# БЕР АЛДАҺАҢ...

## ғүмергә алдаҡсы булырһың

Белмәгән сибәрҙе алғансы, белгән йәмһеҙҙе ал.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Ҡайһы саҡта ҡатын-ҡыҙ ир кеше менән яҡынлашыуҙан ҡурҡып ҡаса, ул оҡшамаған өсөн түгел, ә үҙе уға оҡшамауҙан ҡурҡҡан өсөн.

**(Константин Мелихан).**

Артыҡ ҡайнар мөхәббәт иң аҙағында беҙҙе күңел төңөлөүгә килтерә. Шуға ла ашҡаҙан өсөн тәмле аҙыҡ нисек зыянлы булһа, кеше өсөн ҡайнар мөхәббәт тә шулай уҡ зыянлы.

**(Публий Овидий).**

Ҡатын һәм ир икә осраҡта күңел бошоҡһоуына бирелә: бер-береһен оҙаҡ күрмәгәндә һәм бер-береһе эргәһендә оҙаҡ торғанда.

**(Жан Ростан).**

Ғаилә бөтәһен дә алыштыра. Шуның өсөн өйләнер алдынан уйла: һиңә нимә мөһимерәк - бөтәһе лә, әллә ғаилә генәме?

**(Фаина Раневская).**

Һәләтлелек мөмкинлектәрҙән тыш бер нәмә лә түгел.

**(Наполеон Бонапарт).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер кеше Аҡһаҡалға килә һәм шулай тип һорау бирә:**

**- Аҡһаҡал, миңә ни эшләргә, кәңәш бир. Мин бөтөн тәнемдә тартыныу тоям. Беләм, мин үҙемдең ролдә түгелмен, мин үҙемдең ысын тойғоларымды белдерә алмайым. Миңең үҙем булғым килә...**

**- Һин, ысынлап та, үҙ тойғоларыңды баҫаһың, - ти Аҡһаҡал. - Бәләкәй сағыңда һине иламаҫҡа һәм көслө булырға өйрәткәндәр. Шулай итеп һине тойғоларыңды баҫырға өйрәткәндәр. Әгәр ҙә кеше аҡыл файҙаһына үҙенең тойғоларын баҫа икән, тимәк, ул бары тик уйлай белеүсе машинаға әүерелә. Тартыныу тойғоһо үҙеңдең укытыусыларыңдың һабағын яҡшы үҙләштереүең тураһында һөйләй. Уларҙы ғәйепләмә, улар һиңә изгелек эшләйбеҙ икән тип уйлағандар. Ләкин улар үҙҙәре лә аңламайынса һине көсһөҙ булырға өйрәткән. Ә бит бары тик көслө кеше генә йөрәгенең ташҡа әйләнеүенә ҡаршы тора ала. Көслө кеше генә үҙ-үҙе булып ҡала ала. Көслө кеше генә үҙенең тойғоларынан йәшенмәй. Илағыһы килһә - илай, шатланғыһы килһә - шатлана, көлгөһө килһә - көлә. Һинең эске минең тойғоларҙан тора, уларҙы тышҡа сығар һәм улар менән үҙеңсә, бер-берегеҙҙе аңлаған телдә һөйләш. Шул саҡта ғына һин үҙең булып йәшәйәсәкһең..."**

СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҒЫ

# ТЕАТР ЧЕЧНЯҒА ЮЛЛАНА...



**2024 йылдың сентябрендә Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театры Чечен Республикаһының баш ҡалаһында милли театрҙарҙың "Федерация" Бөтә Рәсәй фестивалендә ҡатнаша. Спектакль 10 сентябрҙә Грозныйҙа Х. Нурадилов исемендәге Чечен дәүләт драма театры сәхнәһендә күрһәтелә.**

Фестивалдә сығыш яһау өсөн илдең милли театрҙары коллективтарын танылған режиссерҙар, артистар һәм тәнҡитселәр ентекле һайлап ала. Йөҙләгән спектаклдең 10-ға яҡыны ғына финал программаһына индерелә. Улар араһында Айрат Абушахмановтың башҡорт әҙәбиәте классигы Таңсулпан Ғарипованың роман-пенталогияһы буйынса сәхнәләштерелгән "Бөйрәкәй" спектакле лә бар. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, быйыл яҙ спектаклдең премьераһы үтте.

- Башҡорт драма театры был фестивалгә ике тапҡыр саҡырылды: 2019 йылда башҡорт театры беренсе фестивалдә "Зөләйха күҙҙәрен аса" спектакле менән ҡатнашты, 2020 йылда иһә "Гөлбостан" спектакле һайлап алыныу (ҡыҙғанысҡа ҡаршы, коронавирус пандемияһына бәйле коллектив ҡатнашманы), - тип белдерҙеләр театрҙың матбуғат хеҙмәтендә. Фестивалде Рәсәйҙең Мәҙәниәт министрлығы, Театр эшмәкәрҙәре союзы һәм Чечен Республикаһы хөкүмәте ойоштора.

ТЕЛ ТӨБӨ - ХАЗИНА

# СӘРКӘШ БУЛМА

**Быуындарҙы быуындарға бәйләгән, замандарҙы тоташтырған тел булыр. Уның хазинаһынан һирәк ҡулланылған һүҙҙәрҙе яңғыратыу менән, улар яңынан ҡуҙғып-балҡып китә, бөгөн дә телебеҙҙә үҙ урындарына дәғүә итә.**

**Сыған һуғыу** тип, эҙ яҙҙырыу хаҡында әйтелә. *Ҡайһы бер йәнлек-хайуан сыған һуғыуға оҫта. Төлкө бик тиҙ сыған һуҡҡан.*

**Сәҙәф** тигән һүҙҙе осратһағыҙ, "перламутр" йә "перламутрҙан яһалған" тигәнде аңларға кәрәк. *Ҡыҙыл диңгеҙҙә табылған сәҙәф. Сәҙәф биҙәүес.*

**Сәңгәр.** Йәй йә көҙ тыуған мал тураһында "сәңгәр" тиҙәр. *Сәңгәр быҙау. Сәңгәр бәрәс.*

**Сәркәш.** "Сәркәш" һүҙенең бер мәғәнәһе - ул тыңлауһыҙ, үҙ һүҙле. *Сәркәш баланы тыйып ҡара!* Икенсеһе - һуғышып барыусан, тигән мәғәнәлә ҡулланыла. *Сәркәш малайҙарҙы спортҡа, ҡыҙыҡлы шөғөлгә йәлеп итеү яҡшы булыр.*

**НУРБИКӘ әҙерләне.**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.
1 582218 911006 24027

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән ВӘЛИЕВА,
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ЯСЙ "СПУТНИК-ЮГ" типографияһында баҫылды. Тел.: 8 (967) 744-77-33. (453400, БР, Дәүләкән ҡалаһы, Мәжит Ғафури ур., 4 й., 203 офис).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |
| **Матбуғат таратыу** | **252-39-99** |

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
11 июль 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 14 сәғәт 30 мин.

«Киске Өфө»нөң индексы — **ПР905**

Тиражы - 2750
Заказ - 1150

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.